ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 ғинуар (һыуығай) 2020

№2 (888)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 ғинуарға тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе февралдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" биш айға 563 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Уңайлы ине әле... 6

Замандаштың һорауҙарына яуаптар 8-9

Йырлайым... ә башҡа төрлө һөнәрем юк 11

Онотолғанды тергеҙәбеҙ 13

ТВ-программа 14









ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кемдер юғалған, кемделер алдағандар, тигән хәбәрҙәр ишетелеп тора. Был нилектән, "һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар" тигән ҡағиҙәне онотоуҙанмы, әллә икенсе сәбәптәнме?

***Айрат ХАРИСОВ, Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө транспорт линияһы участкаһы начальнигы:*** Иғтибарлы һәм битараф булмау - ошо ике фактор һеҙҙе генә түгел, ә башҡаларҙы ла енәйәттән һәм хоҡуҡ боҙоуҙан һаҡлап ҡала ала. Бөгөн хатта урамға сыҡмай, интернет аша ла енәйәтселәр тоҙағына ҡабыу ихтималлығы бер кемгә лә сер түгел. Рәсәй Федерацияһы эске эштәр министры Владимир Колокольцев, бөтә ил буйынса мәғлүмәт-телекоммуникацион технологияларға бәйле төрлө енәйәттәр йышыраҡ теркәлә, тип билдәләне. Әлбиттә, улар беҙҙең төбәктә лә күҙәтелә. Интернет-технологияларҙың үҫеше миҙалдың бер яғы булһа, уның кире яғы ла бар, шуға бигерәк тә иғтибарлы булырға кәрәк. Енәйәтселәр үҙҙәрен дәүләт ойошмалары, банктар хеҙмәткәрҙәре тип таныштырыуы мөмкин. Владимир Колокольцев шундай миҫал килтерҙе: Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә "медицина учреждениеһы" тигән исем артында ҡайһы бер ойошмалар телефон аша клиенттарҙы бушлай диагностикаға саҡыра һәм һуңынан, етди сирҙәре булыуы тураһында һөйләп, баштарын ҡатырып, кредит алырға этәрә.

Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре даими рәүештә халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыуға ҡарамаҫтан, бындай енәйәттәр булып тора. Мут кешеләрҙең ҡулына эләкмәҫ өсөн телефон аша шәхси мәғлүмәтте бер кемгә лә әйтмәгеҙ, һәр саҡ ишеткән мәғлүмәтте рәсми сығанаҡтарҙан тикшерегеҙ. Күптәр, "кемдер бындай хәлгә эләкһә лә, мин эләкмәйем", тип уйлауы мөмкин. Әммә беҙҙе хеҙмәтләндереү зонаһында, поездарҙа йәки вокзалдарҙа енәйәттәр пассажирҙарҙың ышаныусанлығы арҡаһында, уларҙың әйберҙәрен йәки документтарының һаҡланыуына артыҡ иғтибар бирмәүе һөҙөмтәһендә башҡарыла. Шуға күрә бары тик иғтибарлылыҡ ҡына әйберҙәрегеҙҙең дә, документтарығыҙҙың да, үҙегеҙҙең дә именлегеҙҙе һаҡлауын иҫтән сығарырға ярамай.

Шулай уҡ башҡаларға ла иғтибарлы булырға кәрәк. Ҡайһы бер осраҡта хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәренә битараф булмаусы граждандарныҡ ярҙам итә: кемдер енәйәтсе булыуы ихтимал кешенең йөҙ һыҙаттарын йәки башҡа билдәләрен иҫләп ҡала һәм полицияға шылтырата. Был сифат бигерәк тә кешеләр юғалғанда ҙур ярҙам. Ваҡыт секундтар менән иҫәпләнгәндә, полиция хеҙмәткәрҙәренә енәйәтсенең ҡайҙа булыу ихтималлығы йәки ниндәйҙер билдәләре ныҡ мөһим. Йәмғиәттә бөгөн халыҡтың иң һаҡланмаған өлөшө булып пенсионерҙар һәм балиғ булмағандар тора. Шуға уларға бигерәк тә иғтибарлы булыу кәрәк. Әгәр ҙә ниндәйҙер енәйәт шаһиты булһағыҙ, шунда уҡ полицияға хәбәр итергә лә онотмағыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ШЫРШЫЛАРҘЫ ЙЫЯЛАР

**Өфөлә яңы йыл шыршыларын утилләштереү буйынса "Шыршыларҙы - юнысҡыға" экологик акцияһын уҙғарыу күҙаллана. Ул 11,12, 18 һәм 19 ғинуарҙа үтә.**



Баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, ҡарағайҙарҙы, аҡ шыршыларҙы, шыршыларҙы ҡаланың 24 майҙансығындағы махсус ҡабул итеү пункттарына тапшырырға мөмкин. Бынан тыш, 18 ғинуарҙа "Аркада" һәм "Купец" сауҙа үҙәктәре биләмәһендә яңы йыл ағастарын утилләштереүгә тапшырыу өсөн өҫтәмә нөктәләр ойоштороламаҡсы. Экопроектты ойоштороусылар билдәләүенсә, акцияның төп маҡсаты - ҡалдыҡтарҙы айырым йыйыу проблемаһына ҡала халҡының иғтибарын йәлеп итеү һәм шыршыларҙы икенсел сеймал сифатында файҙаланыу. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2019 йылдың ғинуарында Өфөлә ошо акция барышында 1000-гә яҡын ағас йыйылды һәм икенсел эшкәртеүгә ебәрелде.

АФАРИН!

## РӘМИ КӨНДӘЛЕГЕ

**Өфө режиссеры Булат Йосопов республиканың күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәренә арналған картиналар серияһын дауам итә. Әле ул "Беренсе республика" трилогияһының өсөнсө фильмын, "Шағир көндәлеге" нәфис фильмын төшөрә башланы. Оҫтаның яңы эше сағыу ғүмер кисергән һәм туған телендә ижад итеү хоҡуғын яҡлаған өсөн эҙәрлекләүгә дусар булған Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа бағышланған.**

Фильмда шағирҙың 1941 йылдан алып 1977 йылға тиклемге тормош һәм ижад юлы сағылдырыла. Уны шағир йөрөгән урындарҙа - Өфөлә, Салауат районында, Мәскәүҙә, Түбәнге Новгородта, Үзбәкстанда төшөрөү күҙаллана. Рәми Ғарипов ролен Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт драма театры актеры Артур Ҡунаҡбаев башҡара. Фильмды Мәскәү операторы Станислав Амбарцумов төшөрә. Фильмдың бюджеты 23,3 миллион һум булыр тип көтөлә. 20 сентябрҙә фильмды төшөрөү өсөн халыҡтан аҡса йыйыу иғлан ителде. Ижади төркөм: сценаристар - Таңсулпан Бабичева, Гөлсәсәк Саламатова, ҡуйыусы рәссамдар - Рөстәм Баймөхәмәтов, Әлиә Байрамғолова, продюсерҙар - Леонид Филинов, Юнир Әминев, Гөлсәсәк Саламатова. Премьера 2020 йылдың октябренә билдәләнгән. Проект тураһында бөтә яңылыҡтар #РәмиКөндәлеге хештегы менән һалына.




12+

✓ **_Бындай сәғәттәр буйынса кешенең ҡайҙалығын, хәрәкәт йүнәлешен асыҡларға мөмкин. Хатта телефондың зарядкаһы бөткән ваҡытта ла эҙләү эштәрен ҡайһы ерҙән башларға икәнен беләбеҙ._**



ДОНЪЯ ШАНДАУЫ

# НӘФРӘТ ҺУҒЫШҠА ИЛТМӘҺЕН



**Яңы 2020 йыл бар донъяны билдәле киммәлдә хәүефкә һалған ваҡиғалар менән башланып китте. 3 ғинуарҙа Ирандың Ислам революцияһы һаҡсылары корпусының (КСИР) элиталы тип иҫәпләнгән "Аль-Кудс" подразделениеһы командиры, генерал Касем Сулеймани Багдад аэропорты янында АҠШ армияһының хәрби дронынан ебәрелгән ракеталар һөжүме арҡаһында һәләк булды.**

Был һөжүм АҠШ президенты Дональд Трамптың шәхси приказы буйынса ойошторола. Трамп Иран генералын "беренсе һанлы террорист" тип атап, уны Яҡын Көнсығыштағы американдарҙы - дипломаттарҙы, һалдаттарҙы, моряктарҙы һәм башҡа хәрбиҙәрҙе юҡ итеү маҡсатында террористик операциялар планлаштырыуҙа ғәйепләй. Әммә, The New York Times гәзитенең АҠШ президенты хакимиәтендәге сығанаҡтарға бәйле мәғлүмәтенә ярашлы, бындай операцияларҙың һөҙөмтәле рәүештә ойошторола алыуын хәрби разведка инҡар иткән.

Был ваҡиға донъяның киң матбуғат сараларында ығы-зығы тыуҙырҙы, хатта ки бәғзе журналистар ошо конфликт һөҙөмтәһендә өсөнсө бөтөн донъя һуғышы башланыу мөмкинлеге хаҡында ла яҙа башланы. Тик бының АҠШ етәкселеге тарафынан ойошторолған ошондай айырым һөжүм акттарының беренсеһе лә, һуңғыһы ла түгел икәнен иҫәпкә алырға кәрәк был осраҡта. 2003 йылда Иракта Саддам Хусейн режимы ла АҠШ һәм НАТО-ның берлектәге хәрби көстәре тарафынан ҡолатылған ине, әммә һуңынан ошо илдә бик оҙаҡ йылдар буйына ҡоралды конфликттар тынманы, террористик акттар һөҙөмтәһендә тиҫтәләгән мең граждандар һәләк ителде.

Иран етәкселеге, әлбиттә, үҙ суверенитетына, үҙ граждандарына ҡаршы алып барылған АҠШ сәйәсәтенә ҡаршы торасағын, пропорциональ яуап бирәсәген белдерҙе. 8 ғинуарҙа Ирандың хәрби көстәре АҠШ-тың Ирактағы ике хәрби базаһына үҙ ракеталары менән яуап һөжүмен атҡарҙы, әммә американдар бынан әллә ни зыян күрмәгән. Күрәһең, ошонан һуң ҡаршы тороусы ике яҡ та башҡаса хәрби көс ҡулланыуҙы хупламаясаҡ: Ирандың хәрби мөмкинлектәре сикләнгән булһа, АҠШ етәкселеге конфликтты үтә тәрәнәйтеүҙе маҡсатҡа ярашлы, тип иҫәпләмәй.

Ошо көндәрҙә Анкарала осрашҡан Рәсәй һәм Төркиә президенттары Владимир Путин һәм Рәджәп Эрдоган АҠШ һәм Иран етәкселеген Яҡын Көнсығышта тыныслыҡты һаҡлау маҡсатында хәрби конфликтты оло һуғышҡа әйләндермәҫкә, ике ил араһындағы барса мәсьәләләрҙе лә дипломатик юл менән хәл итергә саҡырҙы.

Әйткәндәй, АҠШ менән Иран араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡ бынан 40 йыл элгәре башланғайны. 1979 йылда Иранда Ислам революцияһы башланып, шаһ властьы ҡолатыла. Иран шаһы Мөхәммәт Риза Пәхләүи АҠШ-ҡа дауаланырға юллана, Ирандың яңы юлбашсыһы аятолла Хомейни АҠШ етәкселегенән уны Иранға бирҙертеүҙе талап итә. Талап кире ҡағыла, ә Ирандың исламсы хәрби формированиелары АҠШ илселеге дипломаттарын һәм хеҙмәтселәрен аманатҡа ала. Ул саҡта ла, үҙ граждандарының, дипломаттарының 444 көн буйына әсирлектә тотолоуына ҡарамаҫтан, АҠШ президенты ла, илдең хәрби етәкселеге лә Иранға ҡаршы һуғыш башларға баҙнат итмәй...

**Илдар СӘҒИТОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Кемдер юғалған, кемделер алдағандар, тигән хәбәрҙәр ишетелеп тора. Был нилектән, "һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар" тигән ҡағиҙәне онотоуҙанмы, әллә икенсе сәбәптәнме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Олеся ПАШКИНА, "Лиза Алерт" Эҙләү-ҡотҡарыу отрядының Башҡортостан Республикаһындағы вәкиле:*** Кешеләр юғалыуы төрлө сәбәптәргә бәйле. Беренсенән, кемдәндер дауаханаға эләгеүе мөмкин һәм был хаҡта туғандарына хәбәр итмәгәндәр. Бындай хәлдәр йыш булмаһа ла, булып тора. Кешенең ҡапыл ғына хәле насарлана һәм ул хәбәр итеп өлгөрә алмай йәки уйламағанда бәхетһеҙ осраҡҡа эләгә. Шулай уҡ хәтерҙәрен юғалтыусылар тураһында ла әйтеп китергә кәрәк. Ғәҙәттә, улар өйҙән сығып, ҡайҙалыр бара ла, кире ҡайтыу юлын онота. Өйөндәгеләргә бындай ғаилә ағзаһының хәтере насарайыуына, башҡа үҙгәрештәргә иғтибар бирергә һәм ваҡытында табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк, сөнки бөгөн күп сирҙәрҙе дауаларға мөмкин. Икенсенән, ундай туғандарығыҙ булһа, барлыҡ кеҫәләренә лә адрес, исемшәрифе, туғандарының телефоны яҙылған ҡағыҙҙар һалығыҙ. Был юлында осраған кешенең йәки беҙҙең хеҙмәт ағзаларының уға ярҙам итеү мөмкинлеге булһын өсөн кәрәк. Шулай уҡ GPS-сәғәт алып тағыуҙы ла тәҡдим итәбеҙ. Ғәҙәттә, уны балаларға алалар, әммә ололар ҙа ҡайһы бер ваҡыт бала кеүек ярҙамһыҙ булып китә. Бындай сәғәттәр буйынса кешенең ҡайҙалығын, хәрәкәт йүнәлешен асыҡларға мөмкин. Йәки ошондай уҡ ҡушымтаны (улар һәр операторҙа бар) телефонға яҙҙырырға була. Хатта телефондың зарядкаһы бөткән ваҡытта ла эҙләү эштәрен ҡайһы ерҙән башларға икәнен беләбеҙ.




Тағы бер категория - балалар. Бик йыш уларҙың юғалыу сәбәбе - ҡайҙалыр уйынға артыҡ бирелеп, онотолған, был иң хәүефһеҙ хәл-торош, сөнки тиҙҙән үҙе ҡайтасаҡ. Икенсе осраҡ - бала ниндәйҙер сәбәп буйынса үҙе өйҙән ҡасып сығып киткән. Өсөнсө ситуация - бала менән ниндәйҙер хәл булған һәм ул хәбәр итеп өлгөрмәгән. Был осраҡтарҙа ла балаларҙа GPS-сәғәт йәки телефондарында ҡушымта булырға тейеш. Эйе, хәҙер балалар аҡыллы, уларға был хеҙмәттәрҙе һүндереүгә бер ни тормай, әммә уның һуңғы тапҡыр ҡайҙа булғанын асыҡларға мөмкин.

Тағы бер мәл: балалар бик йыш сит кешегә эйәреп китеп, йә уның машинаһына ултырып юғала. Бында инде ғаиләлә балалар менән шәхси хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре тураһында һөйләшергә, уға сит машинаға ултырырға, сит кешеләргә эйәреп китергә ярамағанлығын аңлатырға кәрәк. Тағы бер категория: тормоштарында ниндәйҙер көрсөк килеп тыуғанда психологик сәбәптәр арҡаһында йәйиһә яңғыҙ ҡалырға теләп, өйҙәренән сығып китеүселәр була. Бында инде уларҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк, йәғни: "Күпмелер ваҡытҡа үҙ теләгегеҙ менән юғалып торорға ҡарар иткәнһегеҙ икән, барлыҡ туғандарығыҙҙы был хаҡта иҫкәртегеҙ!"- тип кәңәш бирергә була.

***Фәйхүнә ЙОСОПОВА, пенсионер:*** Минең үҙемдең шундай сәйерлегем бар: ориентировка тигән нәмәм юҡ. Ҡалала ҡайһы яҡҡа автобусҡа ултырырға белмәй ҡаңғырған осраҡтарым була. Шуға оялып тормайым: ошонан шул автобусҡа ултырһам, шул урынға барып етә аламмы, тип кешеләрҙән һорайым. Бөгөн кемдәндер юғалыуы ла шул үҙенсәлектәргә барып тоташмаймы икән? Мәҫәлән, күптәр урманда аҙаша. Әлбиттә, еләк-емеш артынан барып, араларында берәй кеше дөрөҫ йүнәлеш ала белмәһә - юғалыу өсөн күп тә кәрәкмәй. Был бигерәк тә олоғая барыусыларға һәм балаларға ҡағыла, тип уйлайым, сөнки йәштәр, әгәр кеҫә телефондары тотҡан урын булһа, хатта белмәгән ерҙә лә навигация менән дөрөҫ юл таба ала. Әммә яңы технологияларҙы ауыр үҙләштергән ололар һәм әле аңлап бөтмәгән балалар хатта ҡулында заманса телефон булғанда ла албырғап ҡалыуы мөмкин. Албырғау тигәндән, юғалыуҙың йәки ориентир юғалтыуҙың бер сәбәбе булып та торалыр әле ул. Һалҡын ҡанлылыҡ һаҡлау урынына саҡ ҡына албырғап, ҡаңғырып, паникаға бирелдеңме - хатта урман ситендә лә аҙашып, төпкә инеп китеүең ихтимал.

Ә инде алданыуҙарға килгәндә, уның хәҙер ниндәй генә төрҙәре юҡ. Шулай ҙа халыҡ барыбер төп башына ултырырға әҙер генә тора. Бында, моғайын, төп сәбәп булып тиҙ генә байырға (финанс пирамидалары) йәки нимәнелер еңел генә эшләргә тырышыу (интернет аша һатыу йәки һатып алыу), ниндәйҙер сирҙән ҡотолорға теләү, төрлө ҡара эштәрҙән (сихыр, боҙом) ҡурҡыу, бәхетле булыу хыялы торалыр. Балаларҙы ялтыр-йолтор тышлы кәнфиткә алдаштырыу күренеше лә юҡ түгел. Бында инде ата-әсәләргә балаларына урамда сит кешенән әйбер алмаҫҡа, сит кеше менән аралашмаҫҡа өйрәтергә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы республиканың Сәнәғәт һәм энергетика министрлығына 2020 йылда власть органдары яғынан иғтибар һәм яҡлау талап иткән предприятиелар менән системалы эшкә күсергә, шулай уҡ индустриаль тармаҡтың проблемалы мәсьәләләрен хәл итеү буйынса тәҡдимдәр һәм механизмдар әҙерләү өсөн "Сәнәғәт сәғәттәре"н ойошторорға ҡушты.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2020 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен айына 12130 һум тип билдәләгән законға ҡул ҡуйҙы. Был эш хаҡының, төрлө компенсацияларҙың һәм социаль түләүҙәрҙең артыуына килтерә. Атап әйткәндә, МРОТ күләме ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын түләүгә, йөклөлөк һәм бала ҡарау буйынса пособие күләменә йоғонто яһай. Башҡортостанда 2020 йылдың 1 ғинуарынан эш хаҡының минималь күләме, район коэффициентын иҫәпкә алып, 13 949,5 һум була.

✓Республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, Башҡортостанда "проблемалы" йорттарҙы төҙөүҙе тамамлау буйынса эш дауам итә. Яңы йыл алдынан Өфөлә өлөшләтә төҙөлөштә ҡатнашҡан 385 ғаиләгә күптән көтөлгән торлаҡ асҡыстары тапшырылды. "Көмөш шишмә" торлаҡ комплексында 316 ғаилә фатир асҡыстарын алды. Шулай уҡ Дим-9 биҫтәһендәге 9-сы йортта, "Яңы Булгаков" торлаҡ комплексында фатирҙарҙы ҡабул итеү һәм асҡыстар тапшырыу саралары уҙҙы.

✓Башҡортостанда Яңы йылды байрам иткән көндәрҙә иҫерткес эсемлектәр һатыуҙы сикләгән закон үҙ көсөнә инде. БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев шулай уҡ депутаттарға алкоголде законһыҙ рәүештә етештереү урындарын һәм суррогат һатыу нөктәләрен асыҡлау буйынса эшкә ҡушылырға саҡырҙы. Республика парламенты спикеры һүҙҙәренсә, был закон - халыҡ араһында эскелекте иҫкәртеү буйынса ҙур эштең башы ғына.

✓Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы яңы йыл байрамдарында янғындар һанының һиҙелерлек кәмеүе хаҡында хәбәр итте. 1-9 ғинуарҙа республикала 150 янғын теркәлгән. Был 2019 йылдың ғинуар каникулдары (185) менән сағыштырғанда 19 процентҡа аҙыраҡ. Быйыл 150 янғында биш кешенең ғүмере өҙөлгән. Сағыштырыу өсөн: бер йыл элек 20 кеше янғын ҡорбаны булған.

✓ *Яман ғәҙәттәре тоҡомоноң тамырҙарын ҡоротоуы ихтимал икәнен төҫмөрләү генә түгел, аңлай, ләкин үҙен тыя алмай, ихтыяр көсө етмәйҙер, күрәһең. Үҙ башына яңынан-яңы ғәжәп ғәләмәттәрен уйлап сығарып ҡына тора.*



*ИШАРА*

# КҮҢЕЛДӘРГӘ БЕР ҠЫЛ ТАРТЫЛҺЫН,

## илем, халҡым тигән изге ҡыл

**Күңелемде бушлыҡ биләп алмаһын, тип, саҡ ҡына ваҡыт тапһам, шиғырҙар уҡырға яратам мин. Улар йәнде дауалай, көс-ғәйрәт өҫтәй. Бына бөгөн ҡулыма Рәми Ғариповтың шиғри йыйынтығын алдым. "Бер ҡыл" шиғырынан өҙөктө күсереп яҙам:**

**"Бер көн килеп элекке бер дуҫым<br>Бөрөп алды шулай алҡымдан:<br>- Паганини ҙә бит түгелһең, - ти, -<br>Уйнайһың, - ти, - әммә бер ҡылда.<br>Ил дә тел тип ҡаңғырғансы,<br>Ҡалдырсы бер, иҫке бер ҡылды, -<br>Тигәс дуҫым, бер дошманым артты,<br>Ә күңелдә бер ҡыл тартылды!<br>Иҫке бер ҡыл! Изге бер ҡыл йәнгә!<br>Ул тартылған сәсән халҡымдан".**

Әлбиттә, был оҙон шиғыр. Ары шағир үҙ фекерен тағы ла тәрәнерәк аса, дауам итә. Аҙағынаса уҡып сыҡтым да был шиғырҙы, китабымды ябып, бүтән эштәремде ҡулыма алдым. Үҙ тормошомдағы ваҡиғалар бер-бер артлы хәтерҙә ҡалҡып сыҡты. Шулай, икенсе синыфты тамамлаған көндө бер дуҫым яныма килеп, күҙҙәремә ҡарап:

- Бер кешене һәр саҡ яҡлайҙар... - тине лә, боролоп китеп барҙы.

Нинә был һүҙҙәрҙе әйтте икән дуҫым? "Бер кеше" ул кем икән, тип, коридорға сыҡһам, унда беҙҙең синыф ҡыҙҙары табелдән үҙҙәренең фамилияларын табып, билдәләрен ҡарайҙар. Уларға ҡушылып, мин дә үҙ фамилиям тәңгәленән билдәләремде эҙләйем: уҡыуҙы "дүрт" тә "биш" билдәләренә генә тамамлағанмын икән. "Дүрт"тәрем дә әҙ. Баяғы дуҫҡайымдың билдәләрен ҡараһам, уның "өс"тәре лә байтаҡ икән. Шунда, уҡытыусы нинә мине яҡлай икән, тигән уй үтте башымдан. Беҙҙең бит беребеҙҙең дә ата-әсәһе юҡ, бөтәбеҙ ҙә бер төҫтәге кейемдә, тип уйландым, тик уйҙарымдың осона сыға алманым. Бик күп йылдар үтһә лә, күҙҙәремә ҡарап, бәреп әйтелгән һүҙҙәр онотолмай. Нисектер, еңел уҡыным мин мәктәп йылдарында. Әллә дәрестәрҙә уҡытыусыларҙы ихлас, иғтибар менән тыңларға яратыуым, әллә хәтерем һәйбәт булыуы быға сәбәп булғандыр, тип уйлайым.

Йылдар үтте. Уҡыным, эшләнем. Әле бик күп йылдар пенсияламын. Бер көн әхирәтем Фаягөл ҡунаҡҡа килде. Сәйҙәр эсеп, хәтирәләр сисеп ултырабыҙ.

- Фаягөл, мин был һорауымды бер кемгә лә биргәнем юҡ ине, һинән һорайым әле. Училищела уҡығанда ҡыҙыҡ ҡына хәл булды: бер уҡытыусыбыҙ мине ситкәрәк саҡырып алды ла, "Һинең талантың юҡ, һине Филипп Дмитриевич ярата, шуға һиңә "5" ҡуя. Ысын отличник түгелһең һин", - тип әйтте лә, ары китеп барҙы. "Һинең талантың юҡ, белем байлығыңа таянып ҡына һәйбәт проекттар яһайһың", тип, бөтә курсташтарым алдында икенсе юлы тағы сәпәп әйтте. "Нинә ул миңә ул һүҙҙәрҙе әйтте икән?" тип әле булһа уйланам, - тип, үҙемде күптән борсоған уйҙарым менән уртаҡлаштым.

Фаягөл рәхәтләнеп көлдө лә:

- Ә минең талантым булмағас, ул һүҙҙәрҙе миңә әйтеүсе булманы. Юҡты юҡ тип әйтеүҙән ни файҙа, ә бына барҙы юҡ тип әйтеп, сағып алһа, көнсөлдөң күңеле була, - тине.

Мин дә йылмайҙым. Күңелемдәге ауыр таш иреп юҡҡа сыҡты. Рәхмәт әхирәтемә. Ә мин ғүмерем буйы шул ябай һорауға ла яуап таба алмағанмын. Тик ауыр һүҙҙәрҙе ишеткән һайын, мин тағы ла ныҒыраҡ тырышып уҡыным, эшләнем. Һуңлап булһа ла "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы" тигән исемгә лә лайыҡ булдым. Кешеләр бер-береһенә ауыр һүҙҙәрҙе сәмгә тейер өсөн әйтәләрме, әллә бөтөрөп ташлау өсөнмө икән? Ә мин ауыр һүҙ әйтеүселәрҙе тәрбиәһеҙ кешеләр тип ҡабул иттем. Тәрбиә етерлек кимәлдә бирелмәгән уларға. Мин үҙем уларҙы йәлләйем...

Ә Рәми Ғариповтың баяғы шиғырына килгәндә, беҙҙең быуын да "илем", "телем", тип йәшәй, шул "ҡыл"ды тарта, көйләй. Беҙҙән һуң килгән йәштәр ҙә дауам итер, иншалла. Шағир әйткәнсә, "Яуҙар, мең ғазаптар арҡылы ул ҡыл үтеп ингән йөрәгебеҙгә". Шуға ла, бер "ҡыл" тартып, бер маҡсат менән йәшәгән туғандарҙың, милләттәштәрҙең бер-береһенең битен тырнамай йәшәүҙәрен бик күрге килә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЯҺАЛМА ҒӘҘӘТЛЕ БУЛМА

**Еңеллек, етешлек көҫәү ихтыяжы һәр тере йәнгә хас тойғолор, сөнки һәр кемебеҙ еңеллеккә анһат ҡына бирелеп бара. Күп ваҡытта яһалма, ваҡытлыса ғына еңеллек ләззәтен татыу өсөн дә, уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтеререн уйлап та бирмәй, күҙҙәрҙе йомоп, хистәр ҡосағына ташланабыҙ, йәнәһе, бөгөн йәтеш, рәхәт булһа - булды!**

Ләкин "күктән төшкән" яһалма еңеллек күп осраҡта уйламаған, көтмәгән юғалтыу, ҡайғы-хәсрәттәргә тарыҡтыра әҙәм балаһын. Хайран ҡалырлыҡ: ундай хәлдәр һәр кемебеҙҙең башынан үткән, ләкин беҙ йә фәһем ала белмәйбеҙ, йәиһә белмәмешкә һылтанабыҙ! Яман ғәҙәттәре тоҡомоноң тамырҙарын ҡоротоуы ихтимал икәнен төҫмөрләү генә түгел, аңлай, ләкин үҙен тыя алмай, ихтыяр көсө етмәйҙер, күрәһең. Киреһенсә, үҙ башына яңынан-яңы ғәжәп ғәләмәттәрен уйлап сығарып ҡына тора. Яһалма ғәҙәттәре ҡайғы-хәсрәттәрен еңел кисерергә, арыу-талыуҙарын еңел күтәрергә ярҙам итә, йәнәһе. Аҡыл кешегә үҙен аҙҙырыр, ағыулар өсөн бирелгән, тип уйларһың. Шулай булмаһа, Ер йөҙөнән үҙен ҡырып бөтөрөрлөк яңынан-яңы көслөрәк ҡорал төрҙәре, химик ағыуҙар уйлап табыуын, тере йәндәрҙә тәжрибәләр үткәреүен һәм уларҙы бар әҙәм затын юҡ итерлек күләмдә етештереүен башҡаса нисек аңлатырға була?

Еңеллектә йәшәү ғәйеп түгел, ләкин шып-шыма ерҙә осабыҙға шырау табырға беҙгә ҡуш! Әҙ генә ваҡыт татыулыҡта, именлектә әҙәмсә йәшәй башлаһаҡ, әллә ҡайһы арала осабыҙға яңы сиҡан сығырға әҙер тора. Шул сиҡанды ярһытырға сыпрандап осло шырау эҙләй башлайбыҙ. Шулай түгелме ни?...

**Урал МОСТАФИН.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# "КИСКЕ ӨФӨ"БӨҘ...

## рухи тимерсебеҙ



**"Киске Өфө" гәзите менән күптән танышмын. Беҙ бит хәҙер өлкән кешеләр, барыбер беҙҙе рухландыра торған нимәләр кәрәк донъяла. Бына "Киске Өфө" беҙҙең рухи тимерсебеҙ, тип әйтергә мөмкин. Сөнки был гәзит рухландыра ла, уның рубрикалары йән сәләмәтлеге, тән сәләмәтлеге лә бирә.**

Мин баш ҡалала "Байрам" магазинында эшләйем һәм үҙебеҙҙең башҡорттарҙы осратһам, туғанымды күргәндәй шатланып, һәр береһе менән уртаҡ һүҙ табып һөйләшергә ынтылып торам. Шунда уҡ аралашып китәбеҙ, "Киске Өфө" гәзитен алдыраһығыҙмы, тип тә һорашҡаным бар. Ыңғай яуап биргәндәре һәр ваҡыт гәзиттең йөкмәткеһен юғары баһалай, уға яҙылһаҡ, бүтән сығанаҡтар кәрәкмәгән дә кеүек, сөнки "Киске Өфө"лә сәйәсәт, иҡтисад, мәҙәниәт, башҡорт донъяһы, баш ҡала һәм республика яңылыҡтары тупланған, тиҙәр.

Үҙем дә гәзитте аҙна буйы көтөп алам. Уны башҡа бер баҫма менән дә сағыштырып булмай, сөнки ул - беҙҙе йәшәтә торған гәзит. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, гәзиттең һәр рубрикаһы, һәр һүҙе, фекерҙәре үҙ тәртибебеҙ, тормошобоҙ, балалар тәрбиәһе буйынса бөтөн яҡлап та ярҙам итә. Беҙҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың, тәбиғәтебеҙ шундай: ҡул эштәре менән шөғөлләнергә һәм тирәяғыбыҙҙы матурларға, күҙ нурыбыҙҙы һалып эшләгән әйберҙәрҙе балаларға ҡалдырырға тырышабыҙ. Был йәһәттән дә яратҡан гәзитебеҙ биттәрендә кәрәкле мәғлүмәт етерлек, мәҫәлән, башҡорт халҡының балаҫ, кейеҙ туҡыу йолаъсулдары, һәр милли биҙәктең асылы тураһындағы мәҡәләләр бигерәк файҙалы.

Һүҙемде йомғаҡлап, яңы йыл барыбыҙға ла уңыштар килтерһен, халҡыбыҙ артһын, үҙ телебеҙҙә һөйләшкән милләттәштәр күберәк булһын, тип теләйем. Урамда башҡортса һөйләшеп йөрөүселәр артыуы ла халыҡтың рухы, үҙаңы күтәрелеүен сағылдыра бит. Беҙ туған телебеҙҙең әһәмиәтен аңлап та бөтмәйбеҙ, күңелебеҙ менән генә тойоп, уға тартылабыҙ һәм был тойғо һәр милләттәштең күңелендә уянһын ине. Милли баҫмаларыбыҙҙан рух, тәрбиә, аҡыл алып, бер-беребеҙҙе ҡеүәтләп йәшәйек. Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ тигән һүҙҙәргә таянып, гәзитебеҙҙе лә йәшәтәйек!

**Флүрә МӘҮЛИЙӘРОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Йоматау" шифаханаһы ҡасабаһында һигеҙ етем һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаилә "Торлаҡ төҙөлөшө фонды" дәүләт компанияһы төҙөгән яңы йорттан фатир алды. Ике подъезлы дүрт ҡатлы йорт 2019 йылдың ноябрендә сафҡа индерелде. Фатирҙарҙа ремонт эшләнгән, сантехника ҡуйылған, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетынан.

✓Tvil.ru сервисы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостандың "Яҡтыкүл" курорты - Рәсәйҙә йәй көнө ял итеү өсөн популяр урындар исемлегендә иң ҡиммәтлеһе. Рейтинг 2020 йылдың 1 июненән 31 августына тиклемге осорға түләнгән ғаризалар йомғаҡтары буйынса төҙөлгән. Тәүге өсәү иҫәбендә - Ҡырымдың Саки ҡалаһы, Селигер күле буйындағы Осташков (Тверь өлкәһе) һәм "Яҡтыкүл" шифаханаһы.

✓2020 йылдың июленә тиклем тағы һигеҙ санавиация вертолет майҙансыҡтары төҙөлә. Уларҙы киләһе йылдың икенсе ярты йыллығынан милли проект сиктәрендә файҙаланыу күҙаллана. Өфөлә Республика клиник перинаталь үҙәге биләмәһендә ошондай бер майҙансыҡ асылды ла инде. Июлгә Нефтекамала, Аҫҡында, Баймаҡта (Сибайҙа), Мәсәғүттә, Стәрлетамаҡта, Белоретта һәм Өфөлә яңы майҙансыҡтар барлыҡҡа килергә тейеш.

✓Башҡортостан Милли музейында "Башҡортостан - дуҫтар күҙлегенән" фотокүргәҙмәһе бара. "Башҡортостан - Тәбиғәт. Кеше. Мәҙәниәт" халыҡ-ара акцияһы йомғаҡтары буйынса ойошторолған фотокүргәҙмә 2020 йылдың ғинуар аҙағына тиклем дауам итә.

✓Киләһе йылда Өфөнән халыҡ-ара йүнәлештәр буйынса яңы авиарейстар асылыуы ихтимал. Был хаҡта Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, хәҙер Италияға, Ҡаҙағстанға һәм Азия илдәренә пассажирҙар ағымын баһалау буйынса эш алып барыла. Дәүләт комитеты рәйесе Австрия менән тура авиабәйләнештең кәрәкле булыуын да билдәләне.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты республика вуздары араһында наркотиктарға ҡаршы эш алып барыусы иң яҡшы ойошма тип билдәләнеп, Башҡортостан Республикаһының Наркотиктарға ҡаршы комиссияһының уҡыу йорттары араһында ойошторған конкурсында еңеү яуланы.

✓ 2020 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән рәсәйҙәрҙең уртаса пенсияһы айына 16 400 һум була. Илдә 40 миллион кешегә өҫтәмә түләнә. 2020 йылдың 1 апреленән дәүләт тәьминәте буйынса пенсия 7 процентҡа индексациялана.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӨҪӘҮ БУЛҺА...

**Рәсәй Хөкүмәте өс һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләргә ипотеканың бер өлөшөн түләү өсөн өҫтәмә рәүештә 6 миллиард һум бүлә.**

"Ошо маҡсатта ҡаралған миллиард һумға тағы ла өҫтәмә аҡса - 6 миллиард һум бүлергә кәрәк. Был 12 меңләгән ғаиләнең бурысын кәметергә мөмкинлек бирергә тейеш", - ти премьер-министр Дмитрий Медведев. Программаның операторы мәғлүмәттәре буйынса, тәүге ай ярымда ғына ипотека кредитының бер өлөшөн түләүгә өс меңдән ашыу ғариза килгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ишле ғаиләләргә ярҙам программаһы Президент Владимир Путиндың башланғысы менән индерелде. Ул 2019 йылдың 25 сентябренән ғәмәлдә. Өсөнсө һәм артабанғы балаһы тыуған йәки тыуырға тейешле ғаиләләр ошо льготанан файҙалана ала. Ипотека түләү өсөн аҡсаның күләме 450 мең һум тәшкил итә. Программа әлегә 2022 йылдың 31 декабренә тиклем ғәмәлдә була. Субсидия алыу өсөн заемсыға ипотека төҙөгән банкка мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ипотека кредитының бер өлөшөн түләү тураһында ғариза менән бергә шәхесте, гражданлыҡты һәм ата-әсәлекте раҫлаған документтар, шулай уҡ торлаҡ йәки шәхси төҙөлөш өсөн ер участкаһы һатып алыуға кредит биреү тураһында документтар тапшырыу талап ителә. Закон буйынса, аҡса бер тапҡыр, бер ипотека кредитына ғына бүленә.

## ПЕНСИЯ ХӘЛДӘРЕ

**2020 йылдың 1 ғинуарынан рәсәйҙәрҙең пенсияһы арта. Пенсия фонды бюджетында, инфляцияны уҙып китеп, киләһе йылға пенсияны индексациялау ҡаралған.**

Әйтәйек, рәсәйҙәрҙең пенсияһы айына бер мең һумға арта. Түләү, былтырғы кеүек үк, законда билдәләнгән ваҡыттан бер ай алдараҡ - 1 февралдә түгел, ә 1 ғинуарҙа индексациялана. 2020 йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән рәсәйҙәрҙең уртаса пенсияһы айына 16 400 һум була. Илдә 40 миллион кешегә өҫтәмә түләнә. 2020 йылдың 1 апреленән, пенсионерҙың йәшәү минимумы кимәленә ярашлы, дәүләт тәьминәте буйынса пенсия 7 процентҡа индексациялана. Рәсәйҙә эшләп йөрөгән һәм эшләмәгән 4 миллион пенсионерға ошондай пенсия түләнә. 2020 йылдың 1 февраленән социаль хеҙмәттәр йыйылмаһының айлыҡ аҡсалата түләүе һәм аҡса эквиваленты 3,8 процентҡа арттырыла. Был 15 миллион гражданға ҡағыла.

## КРЕДИТҠАМЫ?

**Рәсәй Федерацияһының Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы 2020 йылдың 1 ғинуарынан "Ғаилә автомобиле" һәм "Беренсе автомобиль" льготалы автокредитлау программаларын тергеҙә. 2020 йылға субсидияларҙың дөйөм күләме - 5 миллиард һум.**

Заемсылар өсөн шарттар шул уҡ. Льготалы автокредитлау программалары сиктәрендә автомобиль хаҡынан 10 процент күләмендә ташлама тәҡдим ителә. Ул кредит буйынса тәүге взнос түләү өсөн ташлама рәүешендә рәсмиләштерелә, ә финанс ойошмаларына алып еткерелмәгән килем федераль ҡаҙнанан компенсациялана. 2019 йылда льготалы автокредитлау программаларына 9,4 миллиард һум бүленде (июлдә министрлыҡ өҫтәмә рәүештә 6 миллиард һум бүлде). Былтыр 10 айҙа льготалы автокредитлау программалары буйынса 100 меңдән ашыу машина һатылды. 2018 йыл йомғаҡтары буйынса - 99,5 мең автомобиль, тип хәбәр итә агентлыҡ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығына һылтанма менән.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ГРАНТҠА КЕМ ЛАЙЫҠ?

**Республика етәксеһе Радий Хәбиров 2019 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығының 5 миллион һум күләмендәге грантына лайыҡ булған муниципалитеттарҙы иғлан итте.**

Гранттар үткән йыл булдырылды. Улар республика социаль-иҡтисади үҫешенең айырым йүнәлештәре буйынса яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән ҡалаларға һәм районд арға тапшырыла. Рейтинг төҙәгәндә биләмәләр өс төркөмгә бүлende: ҡала округтары, ҡалалы районлар һәм ауыл районлары. "Халыҡ менән иң яҡшы бәйләнеш" номинацияһында Стәрлетамаҡ, Благовещен һәм Иглин районлары, шулай уҡ Өфөнөң Октябрь районы еңеүсе тип танылды. "Инвестор менән диалог" номинацияһында иң яҡшылары - Ағиҙел ҡалаһы, Баймаҡ һәм Архангел районлары. "Таҙа муниципалитет" номинацияһында Октябрьский ҡалаһы, Туймазы һәм Илеш районлары грантҡа лайыҡ булды. "Сәләмәт муниципалитет" номинацияһында Салауат, Стәрлетамаҡ һәм Бөрйән районлары еңеү яуланы. "Уңайлы ауыл" номинацияһында гранттар Учалы һәм Балтас районларына тапшырыла. Бынан тыш, федераль ҡануниәтҡә ярашлы 2018 йыл йомғаҡтары буйынса урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеге баһаланды. Үткәрелгән мониторинг йомғаҡтары буйынса иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн Күмертау ҡалаһына, Бәләбәй, Яңауыл, Өфө, Борай, Мишкә, Нуриман, Мәсетле һәм Ғафури районларына гранттар тапшырылды. Бүләк фонды 75 миллион һум тәшкил итә. Гранттар, комплекслы баһалау буйынса рейтингҡа ҡарап, биләмәләр араһында бүленә. Уларҙы урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йүнәлтеү күҙаллана.

## ДЕПУТАТТАР ПЛАН ҠОРА



**10 ғинуарҙа башланған яҙғы сессия барышында Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары 50-нән ашыу закон проектын ҡарарға ниәтләй. Улар араһында - һайлау, административ хоҡуҡ боҙоуҙар, ғаиләне, бала хоҡуҡтарын һаҡлау, ер, бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү тураһында һәм башҡалар. Был хаҡта Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр.**

2019 йылда ҡабул ителгән ауыл старосталары, газондағы парковка, халыҡтың сәләмәтлеген һаҡлау, урман мөнәсәбәттәрен көйләү, ишле ғаиләләргә дәүләт ярҙамы хаҡында актуаль закондарҙы үтәү мониторингына айырыуса ҙур иғтибар бүленә. Парламентта йылға пароходсылығын үҫтереү, "Алға" махсус иҡтисади зонаһын булдырыу, күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонт ойоштороу тураһында мөһим иҡтисади мәсьәләләрҙе ҡарау күҙ уңында тотола. Яҙғы сессия барышында республика Дәүләт Йыйылышы "Рәсәй Федерацияһы Ҡала төҙөлөшө кодексының 5.1-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" һәм "Ҡайны бер федераль конституция закондарына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проекттарын Дәүләт Думаһына индерергә ниәтләй.

## БЕҘ СӘЛӘМӘТ ЙӘШӘҮ ЯҠЛЫ!



**Башҡортостан 2019 йылда сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләрҙең күплеге буйынса Рәсәйҙең 10 төбәге исемлегенә инде.**

Росстат йыл дауамында сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған граждандарҙы иҫәпләгән - Рәсәйҙә улар 12 процент тәшкил иткән. Башҡортостанда иһә сәләмәт йәшәү рәүешен алып барған кешеләр - 19,7 процент. Росстат сәләмәт йәшәү рәүешен алып барғандарҙы түбәндәге шарттар буйынса иҫәпләп сығарған: тәмәке тартмау; көн һайын 400 грамдан кәм булмаған йәшелсә, емеш-еләк ашау; физик әүҙемлек; тоҙҙо сама белеп ҡулланыу (тәүлегенә 5 грамдан күп түгел) һәм алкоголдә аҙнаһына ирегеттәргә - 168 грамдан, ә ҡатын-ҡыҙҙарға 84 грамдан артыҡ эсмәү. Сәләмәт йәшәү рәүешен билдәләү методикаһын Росстат 2019 йылдың мартында раҫлаған. Рейтингта тәүге өс урынды Ингушетия (48,8 процент), Ҡырым (29,2 процент) һәм Адыгея (28,8 процент) биләй. Аҙ күрһәткестәр: Чукотка автономиялы округы - сәләмәт йәшәү рәүешен алып барыусылар 0,4 процент тәшкил итә, Тыва - 1,1 процент һәм Ненец автономиялы округы - 2,1 процент.

## БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ АРНАП

**17-18 апрелдә Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған Халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция ойошторола.**

Башҡортостан Йәмәғәт палатаһының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, форум барышында икенсе донъя һуғышында донъя халыҡтарының еңеүен тәьмин итеүҙә мәғариф системаһының роле һәм биләгән урыны, шулай уҡ хәрби-патриотик тәрбиә биреү традицияларын һәм еңеүҙе яҡынайтыуҙа айырым шәхестең роле тураһында фекер алышыу күҙаллана. Конференция башланғанға тиклем материалдар йыйынтығында ошо һәм башҡа темаларға мәҡәләләр баҫыла, аҙаҡтан Рәсәйҙең ғилми эҙәмтәләр килтереү индексы системаһына урынлаштырыла. Конференция эшендә ҡатнашыу өсөн материалдарҙы 2020 йылдың 31 мартына тиклем education.during.the.war@gmail.com электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Ойоштороусылар - Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем министрлығы, Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы, Башҡортостан Республикаһының Милли музейы, Мәғариф ветерандары советы. Форум тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте 8 (347) 273-22-93 телефоны буйынса алырға мөмкин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Декрет ялындағы әсәләр мәшғүллек хеҙмәттәре иҫәбенә квалификацияһын күтәрергә йәки яңы һөнәр алырға мөмкин. Бының өсөн республика бюджетынан өҫтәмә аҡса бүләләр. Хөкүмәт ҡарары проектына ярашлы, өс йәшкә тиклемге балаһы булған хеҙмәткәрҙәрҙе яныһан уҡытҡан өсөн эшҡыуарҙарға һәм юридик берәмектәргә компенсация бирелә. Эш биреүсе уҡытыуҙы үҙе ойоштора һәм курстар өсөн аҡса түләй.

✓Йәш ярымдан өс йәшкәсә балаларға пособие әлеге 50 һумдан 10 мең һумға тиклем арттырыла, ул аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә түләнә. Был хаҡта Рәсәй премьер-министры Дмитрий Медведев хәбәр итә. Уның һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта дәүләттән беренсе һәм икенсе бала өсөн айлыҡ ярҙам алыусылар һаның арттырыу өсөн ғаиләләрҙең мохтажлыҡ критерийҙарын бер кешегә йәш ярымдан ике минималь йәшәү минимумына тиклем күтәреү тураһында закон проекты әҙерләнгән.

✓Башҡортостанда ишле, шулай уҡ һаулығы яғынан үҙенсәлекле балалар тәрбиәләгән ғаиләләрҙең транспорт һалымын түләгәндә льгота алыу мөмкинлеге бар. Льгота алыу өсөн һалым органдарына ғариза яҙырға кәрәк. Ведомствола транспорт һалымынан азат итеү тураһында ҡарарҙы бер ай эсендә ҡабул итергә тейештәр. Әгәр һалым түләнгән, ә ғаилә льготаға хоҡуҡлы икән, аҡса кире ҡайтарыла - бының өсөн дә йәшәгән урын буйынса һалым органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓Утыҙ меңгә яҡын башҡорт йәшәгән Силәбе ҡалаһындағы милли кафела Башҡорттар йорто барлыҡҡа килеүе ихтимал. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына "Уралым" гәзитенең баш мөхәррире Нурия Иксанова хәбәр итте. Башҡорт аш-һыуы кафеһын асыу ысын байрамға әүерелде. Тантанаға Силәбенән, өлкә районларынан һәм күрше Башҡортостандан халыҡ йыйылды. Кафеға уның хужабикәһе Рита Хәсәйеновaның әсәһенең тыуған төйәге - Ҡоншаҡ районының Ҡунаҡбай ауылы хөрмәтенә "Бай ҡунаҡ" тигән исем биргәндәр.

✓Башҡортостандың "Абҙаҡ" тау саңғыһы курорты ТурСтат порталы рейтингында сноубордта шыуыу өсөн иң шәп өс урын иҫәбенә инде. Рейтинг интернетта ниндәй курортта сноубордта шыуыу яҡшыраҡ тигән һорауға яуаптарға нигеҙләнеп төҙөлгән. Рәсәйҙә 3 миллиондан ашыу кеше сноуборд менән мауыға, башлыса улар - 30 йәшкә тиклемгеләр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*КӨНАУАЗ*

# ЕР УБЫЛҒАНЫН...




## күк күкрәгәнен көтмәйек!

**Башҡорт дәүләт университетында белем алған йылдарҙа йәйге каникул мәлендә атайымдың хәрби дуҫы килһә, төрлө һорауҙар биреп, белемемде тикшереп ҡарай ҙа: "Баш ҡалала уҡып йөрөгән булаһың, ә бына Өфөнөң ниндәй урындарында бушлыҡ барлыҡҡа килеү ихтималы барлығын беләһеңме?" - тип һорап ҡуя торғайны. "Ишеткәнем бар, тик аныҡ ҡына белмәйем" - дөрөҫөн әйтәм. Шунан ул миңә геология буйынса һабаҡ бирә башлай...**

Архитектура һәм ҡала төҙөлөшө Баш идаралығында Өфөнөң геологик хәл-торошо буйынса фекер алышыуға һәм "Опасные геологические процессы на территории Уфимского "полуострова" китабының исем туйына арналған сарала ла һүҙ шул хаҡта барҙы. Республикала аналогы булмаған баҫмаһың авторҙары - ер аҫты разведкаһы отличнигы, республиканың атҡаҙанған төҙөүсеһе, "Архстройизыскания" ойошмаһының генераль директоры Владимир Камалов менән геология-минералогия фәндәре кандидаты Владимир Барышников йыйылыусыларҙы аныҡ факттар менән таныштырҙы.

Хәүефле геологик процестар араһында карст процестары, халыҡ телендә быны ябай ғына итеп, "ер убылыу" тибеҙ, һәр ваҡыт йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итә, сөнки баш ҡала ғына түгел, республиканың 400-ҙән ашыу биләмәһе ошондай ҡатлам өҫтөндә ултыра. Был бигерәк тә Өфө, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Ауырғазы, Аҫҡын, Мишкә, Нуриман, Благовещен һәм башҡа районларға хас күренеш. Хатта 17-се быуатта уҡ немец ғалимэнциклопедисы, сәйәхәтсе, этнограф Петр Симон Паллас: "Уфа есть место худо выстроенное и немало уже в упалость пришедшее, коего положения дурнее избрано быть не могло", - тип яҙа. Нисек кенә булмаһын, атайолатайҙар ошонда ҡәлғә төҙөгән һәм бөгөн ул республиканың баш ҡалаһы территорияһы булып тора. Ә бына унда нисек ғәҙәттән тыш геологик хәлдәрҙе булдырмаҫҡа - быныһы инде икенсе, шул уҡ ваҡытта етди мәсьәлә.

Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 30 йылда Өфөлә ер убылыуҙың 150 осрағы теркәлгән, шуларҙың 13-ө - һуңғы биш йылда. Владимир Владимирович белдереүенсә, баш ҡала ете уба өҫтөндә ултыра. Һыу сығанаҡтарының түбәндә урынлашыуы карст барлыҡҡа килеүгә сәбәп була, йәғни тау тоҡомдарының ҡасандыр тотош булған ҡатламдары йыуыла, ашала йәки ярыла һәм бушлыҡ барлыҡҡа килтерә. Уларҙың ниндәйҙер өлөшөн тергеҙергә мөмкин, әммә бының өсөн маҡсатлы эш алып барылырға тейеш.

Күҙәтеүҙәр буйынса, карст соҡорҙарының 80 процентының диаметры 5 метрға етә, 9 процентыныҡы - 5-10 метр, 7 процентыныҡы - 10-20 метр. Уларҙың дәүмәлен өфөләләр үҙ күҙҙәре менән дә күргәне булды инде. Миҫалдарҙы интернет селтәрендә лә табырға мөмкин. Шулай ҙа бер генә участканы: Интернационал урамындағы 193-сө (193/1, 193/2) йорт комплексын атап китмәй булмай. Унда күп ҡатлы йорттар ҙа, мәктәп тә, башҡа объекттар ҙа бар, ә геология белгестәре һығымтаһы буйынса ул 2-се хәүеф категорияһына инә. Был категорияға ярашлы, унда бер ниндәй төҙөлөш тә булмаҫҡа тейеш. Был йәһәттән ҡаланың баш архитекторы Олег Байдин асыҡлыҡ индереүенсә, бөгөн элек төҙөлөш эштәре алып барырға ярамай тигән һығымта эшләнгән участкаларҙа төҙөлөштәр бара. "Беҙ төҙөлөш компанияларының намыҫы "аманатлығында", тине Олег Анатольевич. Ә ни өсөн ундай участкаларҙа эшмәкәрлек алып барыуға рөхсәт бирелә һуң? Сөнки ентекле тикшеренеү эшләнмәй, бөгөн миллиондарҙы экономиялап, киләсәктә миллиардлыҡ сығымдар тотоноласағын күҙаллау юҡ. Был етешһеҙлекте бөтөрөп уҡ булмаһа ла, нисек кәметергә?

- Китап 3 йыл дауамында тупланһа ла, уға тотош ғүмер арналған, - ти студент йылдарынан уҡ ошо эш менән шөғөлләнә башлаған авторҙарҙың береһе Владимир Камалов. - Унда геологик, тектоник, гидрогеологик, гидрологик материалдар тупланған. Ҡалала белгестәргә, төҙөүселәргә күрһәтә торған ентекле өйрәнелгән урындар бар.

Бынан тыш, барлыҡ мәғлүмәтте цифрлаштырыу кәрәклегенә лә баҫым яһалды. Ул ваҡытта бөтөн мәғлүмәт һәм үҙгәрештәр шунда уҡ электрон базаға индерелеп барасаҡ, мониторинг эшләүе лә еңеләйәсәк. Шуға күрә сара барышында Башҡортостанда хәүефле геологик процестарҙы мониторинглау үҙәге төҙөү кәрәклеге лә билдәләнде. Уның бурысы булып фәнни нигеҙләнгән карст мониторингы программаһын төҙөү; тикшерелгән территория өсөн махсус картографик нигеҙ булдырыу; инженер-геологик мәғлүмәтте цифрлы базала йыйыу һәм системалаштырыу; геологик мөхит үҙгәрештәрен даими анализлау; карстлы территорияларҙа төҙөлгән объекттарҙың исемлеген төҙөү һәм уларҙы ҡулланыу тотороҡлолоғо буйынса эксперт баһаһы биреү; карстлы территорияларҙы цифрлы картаға индереү һәм уларҙы тотороҡлолоҡ һәм хәүеф дәрәжәһе буйынса районлаштырыу; карстлы территориялар һәм участкаларҙа инженер тикшеренеүҙәре программаларын өйрәнеү; карстлы территорияларҙа биналарҙы һәм ҡоролмаларҙы инженер тикшереүе, проектлау, ҡулланыу буйынса территориаль норматив база булдырыу; тәбиғи-техноген факторҙарҙың геологик мөхиткә һәм матди ресурстарға тәьҫиренең хәүефһеҙлеге буйынса федераль (МЧС) һәм муниципаль власть органдары менән хеҙмәттәшлек күҙаллана.

Сығыш яһаусылар белдереүенсә, Рәсәйҙең күпселек төбәктәрендә бындай үҙәктәр бар һәм уларҙы тотоу ҡаҙнаға йылына яҡынса 50 миллион һумға барып баҫа. Шул уҡ ваҡытта бындай үҙәктәр карст һөҙөмтәһендә киләсәктә проблема тыуҙырасаҡ объекттарҙы алдан күҙаллап, халыҡтың именлеген тәьмин итеү менән бер рәттән, матди сығымдарҙы экономиялау мөмкинлеген дә бирәсәк. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, ике объектты (Интернационал, Р. Зорге урамдарындағы проблемалы йорттар) ғына ҡарағанда ла был һан йылына 900 миллион һум самаһы тәшкил итә.

Әммә, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Геология институты директоры вазифаһын башҡарыусы, геология-минералогия фәндәре докторы Сергей Ковалев белдереүенсә, китапта яҙылған һәм сарала күтәрелгән мәсьәләләр күптән өлгөрөп еткән, ләкин власть ғалимдарҙың ғына түгел, ә белгестәрҙең һүҙенә лә ҡолаҡ һалмай. Улар һаман да республиканың ҙур өлөшө карстлы булыуын ишетергә лә, күрергә лә теләмәй... "Күк күкрәмәй тороп, крәстиән суҡынмай", - ти урыҫтар. Күк күкрәгәнен көтмәҫкә ине...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҮҘМӘШҒҮЛДӘРГӘ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙмәшғүлдәр өсөн һалым буйынса экспериментта ҡатнашырға тейешле төбәктәр исемлеген киңәйтте.**

2020 йылдың ғинуарынан Башҡортостанда ла ошо яңылыҡ үҙ көсөнә инде. Исемлектә илдең тағы 18 субъекты: Санкт-Петербург ҡалаһы, Ленинград, Түбәнге Новгород, Төмән өлкәләре, Краснодар һәм Пермь крайҙары, Югра һәм башҡалар бар. 2019 йылда Мәскәүҙә, Мәскәү, Калуга һәм Ростов өлкәләрендә, Татарстанда үҙмәшғүлдәр өсөн профессиональ һалым индерелгәйне. Рәсәйҙәр Мотлаҡ медицина страховка фондына страховка взностары түләй, улар пенсия фондына тотоп алып ҡалынмай.

Үҙмәшғүлдәрҙең эш биреүсеһе һәм ялланма эшселәре юҡ, йәғни улар - шәхси хеҙмәт эшмәкәрлегенән килем алған граждандар. Законда бындай граждандарҙың һөнәрҙәр исемлеге яҙылмаған. Ҡағыҙә булараҡ, улар - фрилансерҙар, репетиторҙар, бала ҡараусылар, ауырыу ҡараусылар, фотографтар, блогерҙар, өй кондитерҙары, водителдәр һәм хатта торлаҡты ҡуртымға биреүселәр.

## ТАҒЫ ПЕНСИЯ...

**Рәсәй Президенты Владимир Путин пенсияның туплanma өлөшөн ғәмәлдән туҡтатып тороуҙы 2022 йылға тиклем оҙайтыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы.**

Пенсия страховкалауында үҙгәрештәр тураһындағы федераль закондың 1-се бүлегендә "2021" һандарын "2022"-гә үҙгәртергә". Яңы закон буйынса, 2022 йылдың аҙағына тиклем пенсияның туплама өлөшө (эш хаҡынан 6 процент тотоп алып ҡалыуҙы күҙ уңында тота) формалаштырылмай. Эшләп йөрөгән рәсәйҙәрҙең Пенсия фондына ҡүскән мотлаҡ взностары страховка пенсияһын булдырыуға йүнәлтелә. Октябрь аҙағында Финанс министрлығы ирекле пенсия тупланмаларының яңы системаһы хаҡында закон проектын баҫтырып сығарҙы. Ул ғәмәлдән туҡтатылған туплanma пенсияға алмашҡа килер тип күҙ уңында тотола. Ошо системаға ярашлы, взностарҙың күләмен эш хаҡынан процентарҙа, йә иһә абсолют сағылышта билдәләргә мөмкин.

## ҠЫҪҠА ЭШ АҘНАҺЫ

**Быйыл рәсәйҙәрҙә һигеҙ ҡыҫҡа эш аҙнаһы көтә. Ғәҙәттәгесә, ҡыҫҡа эш аҙналары ғинуар, февраль, март, апрель, май, июнь һәм ноябрь айҙарына тура килә.**

2020 йылда яңы йыл каникулдарынан һуң тәүге эш аҙнаһы ике көнлөк кенә булды. Киләһе ҡыҫҡа аҙна февраль аҙағына тура килә, Ватанды һаҡлаусылар көнөн байрам итеүгә бәйле 25 февралдән 28-енә тиклем эш көнө тип иҫәпләнә. Мартта Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө уңайынан икенсе эш аҙнаһы ла дүрт көнлөк була. Апрель аҙағында Яҙ һәм хеҙмәт байрамы алдынан да рәсәйҙәр бер көнгә аҙыраҡ эшләй. Майҙың беренсе эш аҙнаһы 4 һәм 5 ғинуарҙағы ял көндәрен күсереү иҫәбенә өс көн: 6 майҙан 8-нә тиклем генә дауам итә. Унан һуңғы эш аҙнаһы ла Енеү көнө айҡанлы ҡыҫҡа була. Июндә рәсәйҙәрҙә Рәсәй көнө уңайынан тағы бер ҡыҫҡа эш аҙнаһы көтә. Артабанғы ҡыҫҡа эш аҙнаһы ноябрҙә генә була. Халыҡтар берҙәмлеге көнө аҙна уртаһына тура килә, шуға 2-3 һәм 5-6 ноябрь эш көндәре булып тора.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡыҙыл көртмәле

Бил ауыртҡанда ҡыҙыл көртмәле япрағынан төнәтмә ярҙам итә. Уны әҙерләү өсөн 1 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле япрағына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт термоста төнәтеп, һөҙөп алырға. Ике ҡалаҡ дауаны ашарҙан алда көнөнә 5-6 тапҡыр эсергә. Төнәтмәгә һалынған япраҡтарҙы ташламағыҙ, йылы көйөнсә генә ауыртҡан урындарға төнгәгә баҫлама яһағыҙ.

### Балан

Балан емештәрен ваҡлап иҙеп (блендер ярҙамында ла мөмкин), кәрәкле миҡдарҙа бал ҡушып яһалған дауаны ҡалаҡлап көнөнә өс тапҡыр ашау һалҡын тейгәндә ярҙам итә.

### Финик

Ҡан баҫымы юғары булғанда 20 көн дауамында һәр көн иртән 5 бөртөк финик емешен 1 стакан ҡайнатылған йылы һыуға ҡушып ашарға. Кварталға бер тапҡыр ошолай дауаланыу һөҙөмтәле.

### Ҡара йөҙөм

Йөрәктең хәлһеҙлеген дауалау өсөн 1 кг һөйәкһеҙ ҡара йөҙөм кәрәк булыр. Башта йылы һыуҙа йыуып, шунан һалҡын һыуҙа сайып таҙартырға. Ҡаптасылы быяла һауытта һаҡларға. Һәр көн иртән ашарҙан яртыы сәғәт алда ас ҡарынға 40 бөртөк йөҙөм ашарға. Бер килограмм йөҙөмдө ошолай ашап бөткәс, тағы ла һатып алырға һәм 39 бөртөкләп ашай башларға. Шунан тағы ла бер килограмм йөҙөмдө 38 бөртөкләп ашарға. Ошо рәүешле аҙайта барып, нулгә тиклем төшөп еткәс, дауаланыу осоро тамамлана. Кәрәк булғанда был рәүешле дауаланыуҙы ике аҙнанан тағы ҡабатларға ярай.

### Һуған

Баш әйләнгәндә 1 стакан ваҡлап туралған һуғанға ошо уҡ миҡдарҙа бал ҡушып болғап, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ҡабул итергә.

### Сейә

Йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланғанда сейә емешенән әҙерләнгән төнәтмә ярҙам итә. Уның өсөн 1 ҡалаҡ сейә емешенә (киптерелгән булһа ла ярай) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә һәм йоҡлар алдынан эсергә.

✓ *Ошо легаль булмаған таксиҙарҙың һәм "ларгус"тарҙың өҫтөнлөгө нимәлә - улар кешене тәғәйен урындан килеп алып, тәғәйен урынға алып барып ҡуя. Йәғни ауыр сумканды һөйрәп, өҫтөрәлеп йөрөмәйһең.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Ҡайһы бер әйберҙәрҙә айырыуса ныҡ ҡатмарлаштырылған, бер-береһенә тоташып килгән кәкерсәк һәм йәйә формаһындағы биҙәктәрҙән торған композициялар осрай, улар ғәжәйеп битлектәрҙе хәтерләтә. Эргәһендә үҙәктәш түңәрәктәр йәки үрмәксе ауына оҡшаш ҡояш тамғалары, алты һәм ете тажлы оя биҙәктәр ҡайылған.**



*Япраҡтар менән тулыландырылған ҡусҡар биҙәк һыҙаты.*



*Сите ҡаймаланмаған нескә биҙәк (БР, Әбйәлил районы, Ташбулат ауылы). Г.И. Мөхәмәтшин һүрәте. 1958*

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында боронғо өлгөләргә ҡарап сигелгән урын тартмаларының күбеһе XX быуат уртаһында эшләнгән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа бәрхәт һәм буҫтау тауарҙар урынына сатин (йыш ҡына ҡара төҫтәге), ҡаймаһына ҡомас ҡулланғандар; урын тартмаһы эслеге кизе-мамыҡ туҡыманан булған. Мулинә менән ҡайығандар. Урын тартмаһы көньяҡ-көнсығыш йорттарын йыһазлауҙа үткән быуат дауамында ҡулланылған.



*XX б. икенсе яртыһы тартҡыларындағы ҡайыу. Антропология һәм этнография музейы. Т.К. Сурина фотоһы*

Кейеҙ баҫыу һәм декоратив кейеҙ эшләүгә арналған очеркта ҡайылған тышлы сергеләр тасуирлана, төҫөнә, биҙәктәр нисек урынлашыуына, уларҙың төҙөлөшөнә иғтибар бирелә. Был әйберҙәрҙә ҡайыу тулҡынлы кәкерсәктәр, бәләкәй ҡыя шаҡмаҡ, өсмөйөш, дүртмөйөштәрҙән торған аппликация менән аралашып килә.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Былтыр декабрь башында Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров граждандарҙы район-ҡалалар араһында ташыусы легаль булмаған таксиҙар эшмәкәрлеген тикшерергә ҡушты. Кәңәшмәлә рөхсәтһеҙ эшләгән таксиҙарҙың иң популяр парковка урыны - Үҙәк баҙар туҡталышы булыуы ла билдәләп үтелде. "...Был майҙансыҡтар таҙартылып, улар менән эш алып барырға кәрәк. Исмаһам, лицензия алып, техник тикшереү үтһендәр һәм улар йөрөткән кешеләр һәләк булмаһын", - тине Радий Фәрит улы.**

# УҢАЙЛЫ ИНЕ ӘЛЕ...



"Ларгус"тар һәм микроавтобустар тупланған майҙансыҡтар "Өфө" универмагы, Башҡорт дәүләт аграр университеты алдында ла бар. Халыҡ фекеренсә, был таксиҙар көнөнә бер генә түгел, яҡын араларға 6-7 тапҡыр - иртәнге биштән алып кискә тиклем йөрөй. Алыҫ араларға хатта төнгө рейстар ҙа ныҡ популяр, сөнки төн буйына йоҡлап бараһың, иртән тәғәйен ереңә барып еткәс, көҙәллаған эштәреңде теүәлләргә була. Әгәр халыҡ бындай хеҙмәт менән файҙалана икән, тимәк, әлеге ваҡытта уларға альтернатива юҡ.

Былтыр республика ҡала, ҡала-ара һәм ҡала яны маршруттарын хеҙмәтләндереү өсөн 400 самаһы ҙур, уртаса һәм бәләкәй күләмле яңы автобустар һатып алды. Ләкин был ғына Башҡортостандың һәр районына, һәр ауылына дәүләт транспорты хеҙмәтләндереүенең барып етеренә гарантия була аламы? Ысынында, бер район эсендә бер ауылдан икенсеһенә, хатта район үҙәгенә барып етеү ҙур ауырлыҡ тыуҙырыуын һәр кем белә. Шунлыҡтан халыҡ транспорты булған граждандарға мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Тора-бара был кешеләрҙе "таксистар" тип кенә йөрөтә башлайҙар. Эйе, уларҙың кеше ташыу өсөн рөхсәте лә, лицензияһы ла юҡ. Әммә юл хаҡын такси хеҙмәте кеүек алалар - уларға ла йәшәргә кәрәк бит. Мәҫәлән, дәүләт автобусы йәки лицензияһы булған шәхси эшҡыуарҙың такси автобусында район үҙәгенә барыу 100 һум торһа, ашығыс рәүештә бер кешегә ауылдаш "таксист" менән барыу - 400 һумға барып баҫа, сөнки кеше булмаһа, буш урындар өсөн дә түләргә тура килә.

Ошо легаль булмаған таксиҙарҙың һәм "ларгус"тарҙың өҫтөнлөгө нимәлә - улар кешене тәғәйен урындан килеп алып, тәғәйен урынға алып барып ҡуя. Йәғни ауыр сумканды һөйрәп, өҫтөрәлеп йөрөмәйһең. Ә заман кешеһе хәҙер уңайлыраҡ, яҡшыраҡ мөмкинлектәр эҙләй һәм шуға өҫтөнлөк бирә лә инде. Ниндәй генә легаль маршрут булмаһын, ул пассажирҙы бер ваҡытта ла тәғәйен еренә алып барып ҡуймай. Эйе, баш ҡаланан район үҙәгенә тиклем бер проблемаһыҙ ҡайтырға мөмкин. Әммә артабан ауылына ҡайтып еткәнсе кеше тағы күпме ыҙа күрергә йәки ошо уҡ сумманы сығарып һалырға тейеш була. Шуға ул ғүмерен Хоҙай ҡулына тапшыра ла, уңайлыраҡ вариантты һайлай. Һорау бар икән, легаль булмаған таксиҙарға йәки дәүләт тарафынан "нелегаль" тип ҡабул ителгән шәхси эшҡыуарҙар асҡан маршруттарға һорау бер ваҡытта ла бөтмәйәсәк, сөнки улар маршрутты дәүләт күҙлегенән түгел, ә ихтыяжды күреп, өйрәнеп, кешегә уңайлылыҡ күҙлегенән сығып аса. Һәм халыҡ үҙенә яҡшыраҡты һайларға тырыша. Эйе, уның быға тулы хоҡуғы бар! Ни өсөн уларҙың транспорт һайлағанда ла үҙенә яҡшыраҡ, уңайлыраҡ булған ысулды һайлауын - үҙ хоҡуғын тормошҡа ашырырға теләүен уларҙың хоҡуғы тип ҡарамайбыҙ һуң?

Бында властарҙы мәсьәләнең икенсе яғы нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра кеүек. Хөкүмәттең легаль булмаған таксиҙарға ҡаршы көрәш асыуының төп сәбәбен кеше ғүмерҙәре өсөн хафаланыу тип күрһәтергә тырышһалар ҙа, бында төп сәбәп - рәсми теркәлмәгән, хатта теркәлгән таксиҙарҙан да ҡаҙнаға һалым инмәү. Сөнки дәүләт автобустарынан 400 миллион һалым инһә, "ларгус"тарҙан һәм микроавтобустарҙан ни бары 11 миллион ғына ингән. Ауылдарҙағы таксистарҙан иһә бөтөнләй аҡса инмәй. Шуға күрә, уларҙы йә ҡыҫырыҡлап сығарырға кәрәк, йә һалым түләүҙәрен арттырырға кәрәк, тиҙәр. Икенсе вариантты бер ваҡытта ла юлға һалып булмаясаҡ, сөнки уларҙың күпме килем алғанын аныҡ ҡына асыҡлау мөмкин түгел.

"Легаль булмаған таксиға ултырып, ғүмерегеҙҙе хәүеф аҫтына ҡуяһығыҙ", тип тә ҡурҡыталар. Әйтерһең дә, легаль маршруттарҙа гарантия бар. Эйе, гарантия бар - уларҙа пассажирҙың ғүмере страховкалана һәм улбыл хәл була ҡалһа, страховка түләүҙәре алырға мөмкин. Әммә тиҙерәк тыуған өйөңә (ялға, байрамға, ҡунаҡҡа, һуңғы юлға оҙатырға, туйға, каникулға һ.б.) ҡайтырға ашыҡҡанда һәм һиңә кәрәк ваҡытта билеттар булмағанда, сәфәреңде кисектереү тураһында уйламайһың, ә нисек тә юлға сығырға тырышаһың... Әгәр дәүләт транспорты көнөнә бер нисә тапҡыр район үҙәгенә генә түгел, ә кешегә кәрәкле урынға (һәр ауылға) алып барып еткереп һәм көнөнә бер нисә рейс яһаһа, әлбиттә, хеҙмәтләндереүҙең бер айырмаһы ла булмаҫ һәм, бәлки, яйлап легаль таксиҙарға (маршрут автобустарына) күсеп бөтөр инек. Әммә дәүләттең әлегә бындай шарттар тыуҙырырға мөмкинлеге юҡ.

Был хаҡта граждандар үҙҙәре нимә уйлай икән?

***Диана ДӘҮЛӘТОВА, талибә:*** Минең өсөн шундай "ларгус" - бик йыш ата-әсәйемә бер ниндәй мәшәҡәтһеҙ ҡайтып, кире килеү мөмкинлеге. Дәүләт автобустары менән район үҙәгенә тиклем ҡайтып булһа ла, артабан ауылға ла ҡайтырға кәрәк бит. "Ҡайтам", тип шылтыратһаң, үҙебеҙҙең машина булмағас, атай-әсәй ҡаршы килеп алыу өсөн транспорт эҙләй башлай. Машинаһы булған кеше лә әҙер генә тормай бит әле ул, йә бензины юҡ ваҡыт була, йә ҡунаҡта, йә башҡа сәбәп. Шуға мин ҡайтып еткәнсе ата-әсәмдең сәсе тағы ла нығыраҡ ағара. Ә бындай "ларгус"тар йөрөй башлағас, шул тиклем рәхәт - шылтыратып, урын алып ҡуяһың да, кәрәк икән йәшәгән ереңдән килеп алып, өй алдына тиклем алып барып ҡуялар. Китергә булһа ла бер ниндәй мәшәҡәт тә, ығы-зығы ла юҡ. Байрамдарға ҡайтыр булһам, баш ҡалала йәшәгән машиналы ауылдаштарҙы алдан белешеп ҡуям. Барыбер шул такси хаҡын түләйһең бит инде. Хәҙер, ошондай тыйыуҙар барлыҡҡа килһә, улар беҙҙе алып ҡайтмай башлармы икән, тип борсоуға төштөм әле...

***Рәшиҙә ҒИЗӘТУЛЛИНА, Бөрйән районы:*** Әгәр даими рәүештә бер үк ваҡытта йөрөп торорона гарантия булһа, дәүләт пассажирҙар транспортына өҫтөнлөк бирер инем. Әммә Бөрйән-Өфө араһында уларға ышанып сығырға торғанда йә ваҡытын үҙгәртә лә ебәрәләр, йә башҡа сәбәп менән рейсты алып ташлайҙар. Бындай осраҡтар күп булды. Ләкин ҡайҙалыр барырға булһаң, эштәреңде, йомоштарыңды алдан планлаштырып, һөйләшеп, килешеп сығаһың бит, шуға күрә, көн шәхси транспорт эйәләренә ҡала. Аҡса кәрәккәс, улар һинең ыңғайыңа ғына тора. Балыҡ һыуҙың тәрәнен һайлаған кеүек, беҙ ҙә үҙебеҙгә уңайлы яҡты ҡарайбыҙ инде.

***Сәрүәр ХОҘАЙҒОЛОВА:*** Ҡолаҡ шаулағас, мең бәлә менән райондан Өфөгә нисек юллама алғанымды һөйләп тормайым. Тик бына был юлы республика дауаханаһына барып етеү тамуҡ юлын үтеү булды. Минең кеүек пассажирҙарҙы өйҙән генә алып китә торған таксистар ҡапыл һыуға төшкәндәй юғалған да ҡуйған. Кемдер ҡурҡытҡан тиҙәр. Автовокзалға шылтыратып, автобустың ваҡытын белештем. Тейешле көндө трассаға, туҡталышҡа сығып торҙом. Көтә-көтә шаҡырайып туңдым. Үтеп барыусы машиналарҙы туҡтатып ҡарайым, "ултыртмайбыҙ, ярамай", тиҙәр. Элекке замандар иҫкә төштө: ошолай ҡаңғыра инек бит. Йәш саҡта бөтә һаулыҡты автобус көтөп, юлда машина "тотоп" ҡаҡшаттыҡ. Хәҙер, ҡартайған көндә, дауаханаға барып етә алмай, юлда йән бирерһең, тәүбә! Ул егеттәрҙең кемгә зыяны тейгәндер. Йомшаҡ йылы машинала иҙерәп кенә бараһың. Юлды, ҡайҙа ниндәй хәүефле ер бар икәнен беләләр, ҡыумайҙар. "Апай-апай", тип торалар, дауаханаға алып барып уҡ ҡуялар, шунан килеп алып китәләр. Быға тиклем коммунизмда йәшәгәнбеҙ икән...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҒӘЙНӘЛӘР!



Алдараҡ телгә алынған рус тикшеренеүсеһе Н. Попов ғәйнә ырыуы информаторҙарынан яҙып алынған ошондай мәғлүмәтте килтерә: "Улар үҙҙәрен Башкурт тип атай, үҙҙәренең ырыуын (бындағы башҡорттарҙы) Нағай Татарҙарының Булгар өлкәһендә йәшәгән Тархан быуынынан башлай, уларҙың үҙ риүәйәттәренә ярашлы, был өлкәне XII быуат аҙағында ҡалдырып китәләр; Урал тауҙарына килеп урынлашып, әле йәшәгән барса ерҙәрендә таралып көн итә башлайҙар". Бында Н. Попов нуғайҙарҙы татарҙар менән бәйләп, бер нисек һәм бер ҡасан да этник берәмек булмаған тархандар төркөмө хаҡында аңлатма бирмәй. Был осраҡта ғәйнәләрҙең үҙҙәренең Булгар ханлығында тарханлы ҡәүем булып, нуғайҙар менән күпкә һуңғараҡ, XV быуатта ғына сәйәси бәйләнешкә инә алыуына иғтибар итергә кәрәктер.

Әйтергә кәрәк, нуғай мырҙалары XVI быуаттың икенсе яртыһында ла элегерәк үҙҙәренә буйһонған Пермь яғы халҡынан яһаҡ йыйырға маташа. Архив сығанаҡтарында нуғайҙарҙың 1578 йылда Кама буйы башҡорттарына һәм Ҡаҙан өйәҙе иштәктәренә һөжүм итеүе хаҡында мәғлүмәт бар. "И башкирдцы и остяки, собрався, иных побили...", - тип яҙыла бер документта.

Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин фекеренсә, ғәйнәләрҙәге тарханлыҡ төшөнсәһен туранан тура мадъярҙарҙың "тарьян" этнонимы менән бәйләү нигеҙле түгел. Р.Ғ. Кузеевтың ошондай ҡарашын тарханлыҡ төшөнсәһенең сословиены белдереп, этник билдәләнешкә тура килмәүе аша инҡар итеп була.

Ғалим-антрополог Р.М. Йосопов ғәйнәләрҙең килеп сығышын палеоантропология һәм краниология (баш һөйәгенең формаларын өйрәнеү) фәндәре позицияһынан тороп аңлатыу мөмкинлеген тапты. Ул ғәйнәләрҙең ир-аттары антропологик яҡтан ҡоңғорт көньяҡ европеоид компоненты өҫтөнлөк иткән ҡатнаш сығышлы типҡа ҡарауын асыҡланы. Был антропологик тип сак-массагет (савромат-сармат, сармат-алан) мөхитендә формалашҡан. Ә уларҙың ҡатын-ҡыҙҙарында ерле субураль антропологик тибы һыҙаттары өҫтөнлөк итә.

Ошо ғалим раҫлауынса, ғәйнәләрҙең краниологик һыҙаттары мең ырыуы башҡорттарыныҡына яҡын икән. Антрополог Ринат Йосопов ғәйнә этнонимының этимологияһына иғтибар итеп, ошо һүҙҙең ғәрәп телендәге "гайн" хәрефенә тура килеүе, ошо уҡ хәрефтең ғәрәп алфавитында мең һанын белдереүе хаҡында яҙа. Ошонан сығып, ғалим үтә ҡыҙыҡлы һығымта эшләй: боронғо осорҙарҙа "ғәйнә" һүҙенең дә мең кешенән торған ғәскәри берәмекте аңлатыуы мөмкин. Был шул уҡ мең ырыуы атамаһының нисек хасил булыуына тура килә.

Ғәйнәләрҙең мең һәм башҡа башҡорт ырыуҙары менән этник бәйләнеше хаҡында 1912 йылда Елпачиха (Удик) ауылы муллаһы Хөббихужа Түмәсев төҙөгән шәжәрә мәғлүмәттәре аша ла белеп була. Ошо шәжәрәлә ғәйнәләрҙең төп ата-бабаһы итеп Джавыш бей, уның улдары Инсан бей һәм Ихсан бей күрһәтелә. Ошо исемдәр менән аталған шәхестәр "Ҡисса-и Аҡһаҡ Тимер" хикәйәтендә лә бар. Был хикәйәт башҡорттар араһында популяр була, ундағы сюжеттар бүләр, юрматы, ғәйнә ырыуҙары шәжәрәләрендә сағылыш таба. Ғөмүмән, башҡорт ырыуҙары шәжәрәләрен төҙөүселәр йыш ҡына Булгар хандары һәм уларҙан таралған тоҡомдарҙы үҙҙәренең төп ата-бабалары рәүешендә һүрәтләй. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин быны ошо замандарҙағы тарихи традиция йоғонтоһо менән бәйләй. XVIII быуатта башҡорт мосолман руханиҙары, уҡымышлы заттар араһында булгарсылыҡ идеяһы өҫтөнлөк итә, Булгар ханлығы һәм уның арҙаҡлы шәхестәре башҡорттар өсөн камил бер өлгө итеп күрһәтелеп, милли яңырыу символына әйләнә. Башҡорт ихтилалдары тарихында киң билдәле мулла Батырша Алиев та булгарсылыҡ идеяһын хуплай, ә икенсе бер мулла Морат Ишкалеев XVIII быуаттың икенсе яртыһында яңы Булгар дәүләтен төҙөргә саҡыра. XIX быуаттың суфый шәйехтәре, мосолман яҙыусылары Таджетдин Ялсығол әл Башҡорди, Ғәли Соҡорой кеүек уҡымышлы заттар башҡорт тарихын Булгар тарихынан айырып ҡарамай. Шуға күрә ғәйнә башҡорттары риүәйәттәрендәге булгар версияһын да ошо тарихи традицияға бәйләп аңлатып була.

Ғәйнә ырыуы шәжәрәһендә, бәғзе бер башҡорт ырыуҙарына хас булғанса, үҙ ырыуына ҡараған этник атрибуттарҙың Сыңғыҙхан тарафынан биреләүенә ишара бар. Алда атап үтелгән Хөббихужа Түмәсев шәжәрәһендә ошолай әйтелә: "Ырыу бүлемебеҙ - кәкүк, оранығыҙ - "Бурух!", ҡошобоҙ - һөҙһөт, ағасыбыҙ - удмурт сағаны, тамғабыҙ - хәмзә". Был "Ҡисса-и Сыңғыҙ хан" хикәйәтендә Сыңғыҙ хандың Бүркот бейгә төбәп әйткәненә бермә-бер тура килә. Тимәк, ғәйнә ырыуы шәжәрәһендә лә ырыу дәрәжәһен Сыңғыҙ хан абруйы менән нығытырға тырышыу сағылыш тапҡан. Шәмшәҙе, Ҡанлы, Уран, Гәрәй ырыуҙарының ҡайһы бер шәжәрәләрендә лә төп ата-бабалары сифатында шул уҡ Бүркот бей күрһәтелә. С. Хәмиҙуллин билдәләүенсә, был осраҡта ла ошондай исемле бейҙең теге йәки был ырыуға ҡараған-лығын асыҡлар өсөн етерлек дәлилдәр юҡ. "Ҡисса-и Сыңғыҙ хан" хикәйәтендә аталған һәр башҡорт бейенә айырым бер башҡорт ырыуы тап килә, әммә башҡорттарҙың ырыу номенклатураһында Бүркот этнонимы юҡ. Гәрәйҙәрҙең төп бабаһы - Кирәйәт бей, ә Уран, Йылан, Елдәк ырыуҙары ҡыпсаҡ сығышлы булғас, уларҙың да төп бабаһы итеп Ҡыпсаҡ бей һанала. Шәмшәҙәләр иһә ҡанлы ырыуына ҡарай, шуға ла Бүркот бейҙе уларҙың бабаһы итеп күрһәтеү бигүк нигеҙле булмаҫ ине. Ғөмүмән, был осраҡта ла билдәле шәхес исеме аҫтында ырыу дәрәжәһен күтәреү ошоға сәбәп булғандыр, тигән фаразға ерлек бар. Шулай ҙа ғәйнәләрҙең Ғәйнә исемле тарихи шәхесе булмауы (ул исем риүәйәттәрҙә генә осрай) әле атап үтелгән Бүркот бейҙең ошо ырыу тарихына бәйле булыуын фаразларға урын ҡалдыра.

Урҙас бейҙең (XIV б.) "мең һаҙаҡлы" олоҫо составында мең, меркет, ҡобау башҡорттары менән бер рәттән, ғәйнәләрҙең ата-бабалары ла булыуы мөмкин. Хөббихужа Түмәсевтың шәжәрәһендә мең шәжәрәләрендә күрһәтелгән исемдәр ҙә осрай. Риүәйәт мәғлүмәттәренә ярашлы, ғәйнә бабаларының береһе Ураҡ бейҙең тамғаһы ла Урҙас бей тамғаһына тап килә. Ошо шәжәрәлә Худхуд мулла исеме лә бар, ул Елпачиха ауылы муллаһы, Пугачев полковнигы Әҙиғут Тимәсевҡа тура килә. Ихтилалсылар тарафынан иҫке төркисә яҙылған бер указда "мулла Худхуд Тимач улы", тигән исем теркәлгән. Был башҡортса һөҙһөт тигәнгә тап килә, ә ул шул уҡ Бүркот бейҙең онгоны - ҡошо исеме икәнлеге лә билдәле.

Йәнә бер ҡыҙыҡлы факт. Ғәйнәләрҙең юғары ҡатламы - элитаһына ҡараған шәхестәр үҙҙәрен Бүркот тоҡомдары сифатында күрһәтеүе мөмкин. XII башҡорт кантоны начальнигы Низаметдин Адутовтың улы Ниғмәтжан Низаметдин улының эпитафияһында, йәғни ҡәбер ташындағы яҙыуҙа Худхуд мулла Әҙиғут Тимәсев "буркут Адуд" , тип күрһәтелгән. Ҡайһы бер тарихи сығанаҡтарҙа буркуттарҙың (Бүркот тоҡомдары) Сыңғыҙ хан нәҫеленән булған Тайбуғидтар династияһына ҡарауы хаҡында ла мәғлүмәттәр бар.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 1-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

Башҡорт атлы дивизияларын төҙөү буйынса ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты һәм БАССР Совнаркомының 1941 йылдың 17 ноябрендәге ҡарары республиканың барлыҡ район һәм ҡалаларына ебәрелә, урындарҙа ошо ҡарарға ярашлы махсус комиссиялар булдырыла. Патриотик бурысты үтәү маҡсатында һис бер тотҡарлыҡһыҙ ашығыс саралар ғәмәлгә ашырыла башлай. Тиҙ арала дивизиялар өсөн хәрби мөлкәт һәм башҡа кәрәк-яраҡ нәмәләрҙе йыйнау маҡсатында Совнарком айырым күрһәтмәләр ҡабул итә, төрлө предприятиеларға заданиелар бирелә. Өфөнөң 3-сө төҙөлөш тресында пулемет тачанкалары һәм егеү кәрәк-яраҡтары, Белорет ҡалаһында - поход кухнялары, Стәрлетамаҡтың Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводында - инженер ҡоралдары (һуғыш һәм төҙөлөш балталары, кәйлә-кәтмән, тимерсыбыҡ киҫә торған ҡайсылар), Башкооппромсовет предприятиеларында - пар атлы еген өсөн сбруй, бесән сеткалары, Наркомземдыҡында - ат ҡырғыстары һәм щеткалары әҙерләнергә тейеш була. Башҡа бер мөлкәт һәм кәрәк-яраҡтар (мылтыҡ һәм ҡул пулеметтары өсөн ҡайыш, кавалерия портупеялары, патронташтар, ҡул гранаталары өсөн сумкалар һ.б.) менән тәьмин итеү Наркомлегпром предприятиеларына йөкмәтелә.

Хөкүмәт ҡарарҙарына ярашлы, ике атлы дивизияның да ғәскәри составына үҙ теләктәре һәм мобилизация буйынса ауылдарҙа йәшәүсе башҡорт егеттәре саҡырыла башлай. Был хәрби задание юғары рух күтәренкелеге шарттарында үтәлә. 112-се атлы дивизияға Башҡортостандың 37 районында тыуып үҫкән, хәрби хеҙмәткә яраҡлы ир-егеттәр алына. Райондарҙан 150-нән алып 250-гә тиклем кеше дивизия формалашҡан Дим станцияһына йүнәлә. Мәҫәлән, Туймазы районынан - 245, Баймаҡтан - 207, Күгәрсендән - 188, Учалынан - 187, Ғафуриҙан - 174, Миәкәнән 126 ир-егет дивизияның иң тәүге составына алына. Ҡайһы бер райондарҙан буласаҡ яугирҙар үҙ аттарын менеп килә. Колхоздарҙан төрлө ҡоралдар, аҙыҡ-түлек, һоло һәм бесән тейәлгән йөк ылауҙары ағыла.

Райондарҙан мобилизация һәм кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү буйынса план үтәлеше хаҡында рапорттар бирелә. Мәҫәлән, Йәрмәкәй районынан былай тип яҙалар: "Йәрмәкәйҙәр үҙҙәренең ватаныбыҙға тоғро һаҡсыларын тулы әҙерлектә ебәрҙе. 102 кешегә обмундирование һәм алмаш эске кейем әҙерләп бирҙек. Һәр ҡайһыһына боевой ат бирелде. Унан башҡа, аҙыҡ-түлек ебәрҙек: бойҙай - 152 центнер, аттар өсөн һоло - 600, бесән - 750, ит - 37, май - 4,6, картуф - 143, йәшелсәләр - 75 центнер һәм йон (быйма өсөн) - 3,9 центнер...". Яңауылдан ебәрелгән рапорт: "Район хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең ватан һаҡлаусыларын ҡыуаныс һәм тәрән тоғролоҡ менән оҙатты. 256 кешенән торған яугирҙар обмундированиеның тулы комплекты менән тәьмин ителде. Унан башҡа, колхоздар туған дивизияға хәрби әҙерлеклә 408 ат һәм һуғышсыларға етерлек кимәлдә аҙыҡ-түлек, аттарға фураж бүлеп бирҙе".

Декабрҙең тәүге көндәренән уҡ Дим станцияһына хәрби хеҙмәткә саҡырылған кешеләр килә башлай, фураж, аҙыҡ-түлек тейәлгән йөктәр ҡабул ителә. Даими нигеҙҙә тәғәйенләнгән хәрби командирҙар килеп еткәнсе ойоштороу эштәре менән етәкселек итеү, дивизияны комплектлау маҡсатында Урал хәрби округы ваҡытлы командирҙар һәм политработниктар ебәрә. Дивизияны формалаштырыу буйынса эштәргә командалыҡ итеү капитан Зайцевҡа йөкмәтелә. Төҙөләүсе дивизияның подразделениеларын сәйәси хеҙмәткәрҙәр менән тулыландырыу буйынса шул уҡ хәрби округтан ебәрелгән полк комиссары Иванов шөғөлләнә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Ошо ике һандың төрлөсә ҡабатланып торған варианттарынан хасил булған комбинацияларҙың иге-сиге юҡ. Тимәк, ошо нигеҙҙә үҙебеҙгә кәрәкле теләһә ниндәй мәғлүмәтте математик кодҡа һалып була.*



**Һуңғы ваҡытта киң матбуғат сараларында, интернет селтәрҙәрендә илебеҙҙә иғлан ителгән өр-яңы программа - иҡтисадта һәм дәүләт эшмәкәрлегенең барса өлкәләрендә лә цифрлаштырыу тип аталған мәғлүмәти-технологик процестарҙы әүҙемләштереү, ошо ысул менән тормошобоҙҙо үҙгәртеп ҡороу хаҡында ҡыҙыу бәхәс-дискуссиялар бара. Беҙ ҙә ошо виртуаль фекер алышыуға ҡушылып, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына түбәндәге виртуаль әңгәмәбеҙҙе тәҡдим итәбеҙ.**

# ЗАМАНДАШТЫҢ ҺОРАУҘАРЫНА

**Совет осоронда диалектик материализм тигән фән булды. Диалектика ҡанундарына ярашлы, донъялағы бар нәмә лә мәңгелек хәрәкәттә булып, йәшәйешебеҙҙең үҫешенә сәбәпсе икән. Кешелектең үҫеш юлындағы ниндәй асыш-табыштар прогресҡа этәргес көс булған?**

Кешелек барлыҡҡа килгәндән бирле уның үҫешенә һөҙөмтәле йоғонто яһаған факторҙарҙы һанап сығырға була, улар әллә ни артыҡ күп тә түгел. Шул факторҙарҙан торлаҡ ҡороу, ут тоҡандырырға өйрәнеү, кейем тегеү, һунар, эш, яу ҡоралдарын яһау, ат, дөйә, һыйыр һәм башҡа йорт хайуандарын ҡулға эйәләштереү, тәгәрмәс, арба/сана яһарға өйрәнеү, игенселек менән шөғөлләнеү, металл эшкәртеү, ут, һыу, ел энергияһын файҙаланыу юлдарын таба алыу, мылтыҡ/туп утлы ҡоралдарына эйә булыу, әйбер-ҡорамалдарҙы механик станоктарҙа яһау өсөн цех-мануфактуралар, завод-фабрикалар төҙөү, пар, һуңынан эске яныу двигателен уйлап табыу, электр энергияһын асыу һәм ҡулланыу, моторлы үҙ йөрөшлө машиналар эшләү, телеграф, телефон, радио аша бәйләнеш селтәрен булдырыу, атом энергияһын ҡуллана башлау, самолет, ракета, автоматик системалар, робот техникаһын яһарға өйрәнеү, телевидение системаһын һәм электрон һанау машиналарын, микропроцессорҙар нигеҙендә компьютерҙар уйлап табыу... Бына ошо ҙур булмаған теҙмәгә кешелектең барса тарихы һыйған кеүек. Әммә бында һаналғандарҙың һәр ҡайһыһы кешелек үҫешенең һынылышлы, революцион мәлдәрен тасуирлай, кешеләрҙең йәшәү рәүешенең нисек үҙгәрә, ҡатмарлаша барыуын күрһәтә.

**Беҙ XXI быуат башында, кешелек тарихының яңы һынылыш осоронда йәшәйбеҙ: бәлки, мең йылдан һуң беҙҙең вариҫтарыбыҙ әлеге эпоханы легендар заман итеп күҙ алдына килтерер ҙә, беҙ улар өсөн "архаика"ға әйләнгән дәүерҙең онотолоп бөткән "динозаврҙарына" әйерелербеҙ. Әлеге осор кешелек тарихына ниндәйерәк новациялар индерер икән?**

Билдәле булыуынса, һынылыш үҙәгендә бөгөн беҙҙең өсөн өр-яңы асыштарҙан булған, ғилми асылы аңлашылып та бөтмәгән цифрлаштырыу (цифровизация) күренеше тора. Ошо хаҡта тәфсирләберәк һөйләшеп алыу урынлылыр, тим.

Әйткәндәй, тәүҙәрәк ошо ят төшөнсә ябай кешеләр аралашҡан мөхиткә телевидение тапшырыуҙарын әлегә тиклем йөшәп килгән аналог принцибынан цифрлаштырыу системаһына күсереү айҡанлы килеп инде. Быны үҙенсәлекле технологик һикереш тип тә атарға булалыр: аналогияға ҡоролған технологиялар тарих сүплегенә ташлана торған замананың етеүен һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ, ахырыһы.

Әле яңы технологик асыш тыуҙырған цивилизацион һынылыш башланып ҡына тора. Ул һәр саҡта ла шулай булған - урта быуаттарҙан һуң Европала механик станоктар, машиналар ҡулланыуға, фабрика һәм заводтар эшмәкәрлегенә нигеҙләнгән яңы иҡтисади система капиталистик цивилизацияға юл аса, быны ғалимдар беренсе сәнәғәт революцияһы, тип атаны. Был тарихи һынылыш XVIII-XIX быуаттарҙа ғәмәлгә ашырыла, уның һөҙөмтәһендә милли дәүләттәр һәм империялар, индустриаль йәмғиәт барлыҡҡа килә. Икенсе сәнәғәт революцияһы XIX быуат аҙаҡтарынан башланып, XX быуатта дауам итә. Ул сәнәғәттә конвейер системаһын индереү, электрлаштырыу һәм яңы, яһалма химик матдәләр етештереү менән бәйле. Был һынылыш ахырҙа етештереүҙә эшсе көсөн автоматик системалар менән алыштырыу мөмкинлеген бирҙе. Ә XXI быуат башында өсөнсө сәнәғәт революцияһы - цифрлаштырыу технологияларына ҡоролған иҡтисад хаҡында һүҙ бара.

**Ошо өр-яңы технологик системаны элеккеһе - аналогияға нигеҙләнгәне менән сағыштырып, яҡшыраҡ һәм аныҡыраҡ күҙаллап буламы?**

Хәҙерге тормошобоҙҙо һәр төрлө белемдән, мәғлүмәт даирәһенән башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай, айырым кеше ғәмәлдәре лә, дәүләт кимәлендәге барса эшмәкәрлек тә информацион системалар тип аталған ғәйәт ҡатмарлы күренеш менән бәйле. Кешелек тарихындағы барса информацион системаларҙы сигнал системалары тип атап була. Кешенең аңлы тормошо бары тик сигналдар системаһы механизмдары аша башҡарыла: ул ҡабул иткән һәм аңлай алған һәр сигнал уға билдәле бер мәғлүмәт бирә.

Нәмә һуң ул сигнал? Ябай ғына әйткәндә, ысынбарлыҡтағы бер әйбер (предмет) йә иһә күренештең кеше организмындағы, атап әйткәндә, уның мейеһендәге сағылышы. Физиолог И.П. Павлов тереклек донъяһында ике сигнал системаһы - 1-се һәм 2-се сигнал системалары булыуы хаҡындағы тәғлимәт авторы. Беренсеһе һиҙеү органдары аша хасил булған һын-образдарҙан торһа, икенсеһе һүҙҙәрҙән ярала, кешегә генә хас төшөнсәле телмәрҙе барлыҡҡа килтерә. Ә кеше үҙенең нервылар системаһы аша ошо сигналдарҙы ҡабул итеү, анализлау һәм тышҡы донъяның сағылышы булған эске картинаһын булдырыу һәләтенә эйә. Кешенең психик донъяһын - образдарын, хис-эмоцияларын, аңын һәм үҙаңын ысынбарлыҡтан алынған мәғлүмәттәр суммаһы рәүешендә лә ҡарап була.

Кеше менән тышҡы донъя (кеше үҙе лә ошо тышҡы донъяның бер өлөшсәһе рәүешендә) араһында бер туҡтауһыҙ барған бәйләнеште аналогия (оҡшашлыҡ, тура килеү) принцибына ҡоролған бәйләнеш, тип атап була. Мәҫәлән, күреү, ишетеү, еҫ һиҙеү, тейеүҙе һиҙеү, йылылыҡты тойоу - былар барыһы ла ысынбарлыҡта булған нәмәләрҙең физик-химик тәьҫиренең - тышҡы сигналдарҙың нервылар системаһының биоэлектрик потенциалдарына әйләндерелеп, мейе эшмәкәрлеге аша тышҡы донъяның эске аналогияһын булдырыу механизмы ул. Тауышты ишетеү, кеше телмәрен йә иһә музыка тыңлау - былар ҙа аналогия тибындағы мәғлүмәт бәйләнешенең миҫалдары. Кеше аңының үҫеше аналогия принцибына ҡоролған яһалма (технологик) мәғлүмәт системаларын (ҡоролмаларын) уйлап табыу мөмкинлеген бирә. Бының миҫалдары - аналогик сәғәттәр (ҡояш, һыу, ҡом һәм уҡлы механик сәғәттәр), термометр, пленкалы фотоаппарат, граммофон, телеграф, телефон, радио, аналог тибындағы телевидение.

Аналогия тибындағы технологик система сигналдарының параметрҙары ваҡыт функциялары һәм өҙлөкһөҙ үҙгәреп торған үлсәмдәре менән билдәләнә, уның геометрик сағылышын тура һыҙыҡ, түңәрәк, киҫем, күп үлсәмле арауыҡтар, мәҫәлән, төҫ сағылыштары рәүешендә күрһәтеп була. Аналогик сигналдарҙың математик функцияһы өҙлөкһөҙ була. Ә цифрлаштырылған системала мәғлүмәт бәйләнешенең математик һүрәтләнеше дискрет (айырымланған) цифрлы модулдәрҙән (өлөштәрҙән) хасил була.

**Цифрлаштырылған мәғлүмәт системаһы нисегерәк ғәмәлгә ашырыла һуң?**

Заманса информацион технологияларҙа мәғлүмәт цифрлаштырыла, йәғни уның параметрҙары дискрет (цифрлы) күрһәткестәрҙән хасил булған модулләштерелгән сигналдар теҙмәһе рәүешендә бирелә. Был операция математика телендә квантлау, тип тә йөрөтөлә. Бының өсөн тәү ҡарамаҡҡа үтә ябай булып тойолған иҫәпләү системаһы - 0 һәм 1 цифрҙарынан ғына торған ике элементлы (русса - двоичная) система ҡулланыла. Ҡәҙимге тормошобоҙҙа беҙ унарлы иҫәпләү системаһын ҡулланабыҙ, әммә технологик иҫәпләү һәм мәғлүмәт системалары өсөн ике элементлы иҫәпләү системаһы ҡулайлыраҡ, сөнки ул электрон мәғлүмәт системаларын конструкциялау, программалаштырыу өсөн бик тә уңайлы. Ошо ике һандың төрлөсә ҡабатланып торған варианттарынан хасил булған комбинацияларҙың иге-сиге юҡ. Тимәк, ошо нигеҙҙә үҙебеҙгә кәрәкле теләһә ниндәй мәғлүмәтте математик кодҡа һалып була. Мәҫәлән, рус телендәге "мама" һүҙен компьютер клавишаларына баҫып яҙған саҡта уның процессорҙарында 11101100 11100000 11101100 11100000 рәүешендәге цифрлы кодҡа ярашлы операция башҡарыла, һәм беҙ мониторҙа әлеге һүҙҙе күрәбеҙ. Шул принципҡа ярашлы барса мәғлүмәтте компьютер программаларына һалып, һаҡлап һәм теләгән һәр ҡулланыусыға тапшырып була. Мәҫәлән, компакт-дискыла икеле разрядтарҙан торған 6 миллиард цифрлы билге аша 1 сәғәтлек музыкаль әҫәрҙәр яҙҙырып була. Мәғлүмәтте цифрлаштырыу бығаса файҙаланылыуҙа булған барлыҡ технологик ҡоролмаларҙы яңыртыу мөмкинлеген булдырҙы. Әлеге ваҡытта цифрлы компьютерҙарҙан тыш цифрлы телевидение, фото/видео аппараттар, электротехник ҡорамалдар, робот техникаһы, күп төрлө үлсәү приборҙары, программаланған автоматик идара итеү системалары, пилотһыҙ автомобилдәр, самолеттар, йәшәйештең бар өлкәләрендә лә ҡулланып була торған төрлө технологик инструменттар көндән-көн ишәйә бара. Бына нисек бит ул: барлыҡ гениаль асыштар ябай ғына фекергә нигеҙләнә, әммә ошо фекер иҫкитмәле мөмкинлектәр асҡан яһалма интеллект базаһын булдыра.



**Яһалма интеллект тигәс, уның киләсәген дә ошо уҡ цифрлаштырыу технологияларының артабанғы үҫеше аша күҙаллап булалыр?**

Барлыҡ яңы, яһалма технологиялар - кеше аҡылы ҡаҙанышы икәнен онотмайыҡ. Кешелектең интеллектуаль үҫеше

бер ҡасан да туҡтамаясаҡ. Технологик системаларҙың кешенең тәбиғи мөмкинлектәре нигеҙендә барлыҡҡа килгән грандиоз интеллект ҡаҙаныштары икәнен беләбеҙ. Боронғо ғалимдар ҡасандыр мәңгелек двигатель яһау юлдарын эҙләп ҡаңғырған, әммә ошо маҡсатҡа ынтылып, улар яңы асыштар ҙа яһай алған. Яһалма интеллектты ла ошо мәңгелек двигатель образына тиңләп булалыр ул. Кеше аҡылынан да өҫтөнөрәк технологик яһалма аҡыл булдырыу - ғалимдарға хас бер хыялдыр. Әлеге заманда ошо маҡсатҡа өлгәшә алыу мөмкин түгел, әммә ошо юлда беҙҙе әле хыялыбыҙға ла инмәгән асыштар көтә. Заманса "аҡыллы" робот техникаһы өлгәләре лә ошо фекерҙе раҫлай. Унан һуң фундаменталь фәндәр өлкәһендәге ҡаҙаныштар нигеҙендә яңы технологиялар барлыҡҡа килеүе лә көтөлә. Ғалимдар әле үк 4-се сәнәғәт революцияһы хаҡында һүҙ йөртә башланы. Ул квант физикаһы тәғлимәте нигеҙендә яңы энергетик сығанаҡтар эҙләү менән бер рәттән ошо юҫыҡта өр-яңы информацион база булдырыуҙы күҙ уңында тота. Квант информатикаһы

программаны үтәү өсөн бюджеттан һәм башҡа сығанаҡтарҙан 1 триллион 634,9 миллиард һум аҡса йәлеп ителәсәк. Ошо программа сиктәрендә айырым милли проекттар ғәмәлгә ашырыласаҡ, улар цифрлы иҡтисад өсөн кадрҙар әҙерләү, цифрлаштырылған мәғлүмәт инфраструктураһын киңәйтеү, мәғлүмәт хәүефһеҙлеген тәьмин итеү, Рәсәйҙең үҙенең цифрлы технологияларын булдырыу, цифрлаштырыу процестарын юридик-норматив көйләү, дәүләт идара итеү системаһын һәм дәүләт хеҙмәтләндереүе өлкәләрен цифрлаштырыу йүнәлештәрен сағылдыра. Федераль үҙәктә ошо дәүләт әһәмиәтендәге пландарҙы үтәү өсөн яуаплы орган да булдырылған - ул Цифрлы үҫеш, бәйләнеш һәм киң коммуникациялар министрлығы. Республикабыҙҙа ошондай министрлыҡ яңы ғына булдырылды - ул Дәүләт идаралығының цифрлы үҫеше министрлығы тип атала.

**▸ Ошо программаның граждандар өсөн ғәмәли файҙаһы булырмы икән?**

Әлбиттә, иҡтисадты һәм дәүләт менән идара итеүҙе заманса

үтә әүҙем замандашыбыҙ мәктәп уҡыусылары алдында сығыш яһап, яҡын киләсәктә белем алыу өсөн бары цифрлы ҡоралдар - гаджеттар, компьютерҙар, тренинг ҡоролмалары һәм инструменттары ла етерлек буласаҡ. Йәнәһе, китап, белешмә кеүек әсбаптарҙың, хатта уҡытыусыларҙың да әллә ни кәрәге ҡалмаясаҡ. Уҡыусылар ошо цифрлы киләсәктең хыялый агитаторына ышандымы, юҡмы - быныһы ҡараңғы. Тик ул кеше менән кеше араһында ғына бар була торған бер нәмәне онотоп ебәрә - белем алыу процесында шәхес йоғонтоһо, кешегә генә хас хис-эмоция бәйләнештәре барлыҡҡа килеп, йыш ҡына хәл иткес факторға әүерелә. Образлы итеп әйткәндә, уҡыусы-тәрбиәләнеүсеһенә йылмайып, йә иһә борсолоораҡ баҡҡан, уның менән һөйләшкәндә генә була торған тауыш интонацияһын тойҙорған, кәрәк сағында йомшаҡ ҡулы менән арҡаһынан һөйөп, дәртләндереү, ҡанатландыра алған уҡытыусы шәхесенә иң алға киткән роботлы цивилизацияларҙа ла ихтыяж көслө буласаҡ. Ғөмүмән, технологик яҡтан иҫ китмәле ҡаҙаныштарға өлгәшкән осраҡта ла кеше шәхе-

# ЯУАПТАР

принциптарына ярашлы тәүге квант компьютерҙары яһала башланы ла инде. Әммә был эш әле бары эксперимент булараҡ башҡарыла, шулай ҙа ғалимдар квант информатикаһы тәғлимәте нигеҙендә яһалма интеллект булдырыу ысулын табыу хаҡында ла фараз ҡора.

**▸ Хәҙерге йәмғиәт һәм дәүләт ошондай технологик үҙгәрештәрҙе нисек ҡабул итә?**

Әгәр йәмғиәттә консерватизм күренештәре өҫтөнлөк итһә, ул үҙе үк фәнни-техник прогресс тормозына әйләнә. Әммә "иҫке донъя"ны емереп ташлап, йә иһә өҫтән төшөрөлгән әмерҙәр менән генә яңыһын ҡороп булмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәйҙә бар замандарҙа ла прогрессив фекерләүҙәр, шул иҫәптән йәмғиәттә бығаса булмаған яңы фекер-идеялар тыуҙырыусы новаторҙар ҙа, ниндәйҙер бер еретик тайпылышлы кешеләр рәтенә ҡуйылып, инҡар ителеүгә дусар булған. Рәсәй тарихында ғына түгел, хатта һуңғы совет осоронда ла бындай күренештәр ҡабатлана торҙо. Мәҫәлән, заманында генетика һәм кибернетика фәндәре буржуаз идеология шауҡымы сағылышы һаналып, совет дәүләте етәкселеге тарафынан тыйылды.

Әлбиттә, хәҙер дәүләт етәкселеге технологик яңырыу процестарын әүҙемләштереү программаларын ҡабул итә. 2018 йылдың 24 декабрендә РФ Президенты эргәһендәге стратегик үҫеш һәм милли проекттар буйынса Совет президиумы тарафынан "Рәсәй Федерацияһының цифрлы иҡтисады" тигән дәүләт программаһының паспорты раҫланды. Ул 2024 йылға тиклем иҫәпләнгән, был про-

технологияларға ярашлы үҙгәртеп ҡороу әле әйтеп үтелгән маҡсатты ла күҙ уңында тота. Беренсенән, бөтөн ил территорияһында тиерлек юғары сифатлы цифрлы телевидение тапшырыуҙарын ҡабул итеү мөмкинлеге булдырылды. Икенсенән, дәүләт хеҙмәтләндереүен электрон бәйләнеш системалары аша ғәмәлгә ашырыу мөмкинлектәре көндән-көн арта бара. Өсөнсөнән, һәр граждан электрон паспорт алыу мөмкинлеген тәьмин итеү һәм йәшәйештә шәхси идентификациялау талап ителгән һәр осраҡта ла индивидуаль биометрик күрһәткестәр ҡуллана алыу системаһын булдырыу планлаштырылған. Унан тыш, барлыҡ дәүләт ойошмалары, шул иҫәптән мәктәптәр, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары киң полосалы интернет селтәренә тоташтырыласаҡ. Ә цифрлаштырыу нигеҙендә иҡтисад үҫешенә өлгәшеү илдең һәр гражданы өсөн файҙалы булырына шик юҡ.

Эйе, цифрлаштырыу пландары ҙур, әгәр улар тормошҡа ашһа, Рәсәй ысынлап та алға табан технологик һикереш яһай алыр ине.

**▸ Дәүләтебеҙ үҫешенең өр-яңы программаһы ҡабул ителде лә ул, әммә рәсәйҙәр уның һөҙөмтәле булыуына ышанырҙармы икән?**

Үтә ҡатмарлы темаға арналған әңгәмәбеҙҙең иң сетерекле һорауы ла ошолор, моғайын. Ул киң матбуғат сараларында, бигерәк тә интернет селтәрҙәрендә сағылыш тапты ла инде. Бер яҡтан, ошо грандиоз программа менән һоҡланып, хатта ғорурланып яҙыусылар бар. Улар фекеренсә, беҙҙе был өлкәлә иҫ китмәле үҙгәрештәр көтә. Хатта ки бер

се йәмғиәттең дә, дәүләттең дә иң юғары баһаланған ҡиммәте булып ҡалыуы фарыз.

Шул уҡ ваҡытта цифрлаштырыу эпопеяһы бәғзе бер замандаштарыбыҙҙа һис көтөлмәгән реакция тыуҙыра. Сәйәсәт менән бәйле тәнҡитселәр быны сираттағы "яҡты киләсәк"те вәғәҙә итеп, граждандарҙы албырғатыу ғына итеп ҡабул итә, икенселәре ошо пландарҙы үтәй алыусы әҙерлекле кадрҙар булмауға зарлана, өсөнсөләре ошо маҡсаттарға бүленгән финанс сараларының тейешлесә файҙаланылмайынса, Рәсәй бюрократияһы һаҙлығына батып бөтәсәген күҙаллай, бәғзеләре мәғариф системаһының һуңғы йылдарҙа белем сифаты һәм креативлыҡ күрһәткестәре буйынса артта ҡалыуына һылтанып, уның цифрлаштырылған система талаптарына яуап бирерлек кимәлдә булмауын билдәләй. Хатта ошо үҙгәрештәр кешенең үҙен цифрлаштырылыу ҡорбанына әүерелдереп, уның өҫтән ҡушылған әмер һәм инструкцияларҙы камил үтәүсе биороботҡа әйләнеү хәүефе тыуасаҡ, тип фараз ҡылыусылар ҙа бар.

Әммә прогресс - донъя ҡануны. Иртәме, һуңыраҡмы, ул үҙенекен итәсәк. Хыялһыҙ, киләсәккә ышанысһыҙ йәшәү йәмғиәтебеҙҙә пессимистик мөхиткә урынды ғына киңәйтәсәк. Дәүләт кимәлендәге прогрессив үҙгәрештәр оҙаҡ көттөрмәҫ, ә был иҡтисадта ла, йәмғиәт киңлегендә лә әле хыялда ғына йөрөгән өмөттәребеҙҙе ысынбарлыҡҡа әүерелдерә алыр, тип ышанайыҡ.

**Виртуаль әңгәмәне
Бәҙри ӘХМӘТОВ
ойошторҙо.**

*ИР-АТ ҠОЛАҒЫНА*



# ТҮЛҺЕҘЛЕККӘ НИ СӘБӘП?

**Һуңғы 50 йылда ир-егеттәр араһындағы түлһеҙлек ике тапҡырға артҡан. Быға ниндәй сәбәптәр йоғонто яһаған һуң?**

## Кеҫә телефоны үлтерә

Кеҫә телефонының сперманың күләменә һәм сифатына зарарлы йоғонтоһо фәнни яҡтан раҫланған. Быны венгр ғалимдары 2004 йылда уҡ тикшерә башлай һәм кеҫә телефонын биленә элеп, йә салбар кеҫәһенә һалып йөрөгән ир-егеттәрҙең спермалары бер йыл эсендә 20-30 процентҡа тиклем сифатын юғалта икәнен раҫлай. Һөйләшмәгән осраҡта ла селтәр менән тоташтырыу өсөн сигнал биреүе лә зарарлы, сөнки лифтта, метрола йәки башҡа ябыҡ урында булғанда телефон сигналы күп тапҡырға көсәйә һәм эшләү режимы икеләтә әүҙемләшә.

Былтыр Американың репродуктив медицина йәмғиәте конференцияһында шаҡ ҡатырғыс бер доклад тыңлана. Докладта ир-егеттәр өсөн кеҫә телефоны буйынса һөйләшеүҙең дә бик зарарлы булыуы билдәләнә. Тикшеренеүҙәр көслө зат көн дауамында ни тиклем оҙаҡ һөйләшә, сперматозоидтары ла йылдам рәүештә кәмей барыуын асыҡлай.

## Төп дошман - сауна, компьютер һәм ангина

Йылы - ирҙәрҙең енси биҙҙәренең иң яман дошманы. 85 градус эҫелектәге саунала 20 минут тирәһе ултырыу ҙа сперматозоидтарҙың күләме һәм сифаты түбәнәйеүенә килтерә. Мунсанан һуң бер аҙна буйына ла уларҙың сифаты яҡшырмай, фәҡәт биш аҙна дауамында ғына яйлап нормалләшә. Шуның өсөн, әгәр ир менән ҡатын бала теләй икән, был изге уйын ғәмәлгә ашырғыһы килһә, кәмендә өс ай эҫе мунса инмәһен. Ни өсөн тигәндә, сифатлы, яңы сперматозоидтар ун аҙна эсендә генә барлыҡҡа килә.

Һалҡын тейҙереү, грипп (температураның 38-39 градусҡаса күтәрелеүе) һәм ангина ла ир-егет өсөн үтә хәүефле. Был сирҙәр менән ауырығандан һуң енси күҙәнәктәр өс ай буйына яңырмай, ә емешле эшмәкәрлеге биш айҙан һуң ғына аяҡҡа баҫа.

Компьютер артында 4-5 сәғәт буйына бер тормай ултырыуҙан да енси биҙҙәр "ҡыҙа". Ә уларҙың артыҡ йылыныуы төп тәбиғи функцияһына кире йоғонто яһай.

## Ғәриплек - алкоголдән

Эскелек менән мауығыу - бөтөн яҡтан да зарарлы. Ирҙәр гормонын эшләп сығарыусы күҙәнәктәрҙе алкоголь яфалауы күптән билдәле. Хатта алкоголь гипогонадизмы тигән ауырыу ҙа бар. Ул организмдың етерлек кимәлдә тестостерон эшләп сығара алмауын аңлата. Бер һүҙ менән әйткәндә, эскесе ир-ат үҙен иркеле рәүештә тоҡомһоҙлоҡҡа дусар итә. Бигерәк тә енси өлгөрөү мәлендә алкоголле эсемлек менән мауығыу хәүефле.

Һыу өсөн пластик шешәләр ҙә һаулыҡҡа зарарлы, сөнки уларҙағы эстрогенға оҡшаш матдәләр нәҫел ишәйтеү системаһының үҫешен тотҡарлай. Шуның өсөн егеттәргә пластик һауыттарҙағы һыу, һыра эсеү менән дә мауығырға ярамай.

## Штанганың да хәүефе ҙур

Балаларҙың спорт менән шөғөлләнеүе хуплауға лайыҡ булһа ла, ауыр әйберҙәр күтәреүгә бәйле спорт төрө уларҙың енси үҫеш системаһына зыян килтерә. Малайҙар гер-фәлән күтәрергә әүәҫләнһә, ауырлыҡтың орлоҡ ептәрендәге веналарҙың варикоз киңәйеүен көсәйтеүе, уларҙы түлһеҙлеккә дусар итеүе ихтимал.

Миллиондарса кеше бала сағында ҡолаҡ арты биҙе шешеүенән ауырыһа ла, өҙлөгөп, орхит сиренә дусар булғандар түлһеҙгә әйләнә. Орхит - түллек биҙе шешеүен аңлата. Әгәр кескәй улығыҙ ҡолаҡ арты шешеп ауырый икән, урамға уйнарға ла сығармайынса, тамам һауыҡҡансы дауаларға кәрәк.

***✓ Баҙамша өндәшмәне. Ул был баҫып килгән тулҡындан ҡаса алмаҫтарын аңлағайны. Йәшерәк булһа, үҙе лә, моғайын, шул юлды һайлар ине, тигән уйға килә ине ул һуңғы көндәрҙә. Шунлыҡтан уландарына ҡарап баш ҡына ҡаҡты.***




Ил араһы дауыл көткән һыу өҫтөндәй булып быжырланды, ваҡ тулҡындар йүгерешә. Заводсылар, ҡалға һалдаттары менән бәрелештәр йышайғандан-йышайҙы. Башҡорт егеттәре бәләкәй һыбайлы төркөмдәр менән төҙөләш алып барыусыларға, сиктән үткәндәргә һөжүм итте, ҡалғанекеләр ҙә башҡорттарҙы осратҡанда аяп торманы. Был сапҡындарҙа кинйәһе Балапандың да йөрөүен белгән Баҙамша сығырынан сыҡты, әммә уныһы тотоп ярып ҡына тыйырлыҡ йәштән үткәйне. Ҡатын алып бирел аҙыраҡ баҫмаҡсы, донъя мәшәҡәтенә күммәксе булып өгөтләүенә лә күнмәне улы, урыҫтарҙы ҡыуғас алырмын, тип кенә ҡул һелтәне. Был ҡыйыулыҡтың хәйерле бөтмәҫен бауыры менән тойған ҡарт яугир ҡорҙашы Бәшир менән кәңәшләшеп ҡарарға булды. Старшинаның йәйләү урыны уларҙыҡынан артыҡ алыҫ түгел, йылға ағышынан саҡ ҡына түбәндәрәк ине тирмәләре. Ҡорҙашы яңы ғына ҡайҙандыр ҡайтып тора, күрәһең, бисәләре билгәсе сисендереп сайындырып маташа. Ялсыһы Баҙамша килеүен хәбәр иткәс, ҡулын иҙәп ҡатындарына сығырға ҡушты ла, оҙон һөлгө менән һөртөнә-һөртөнә әйҙүкләне:

- Әйҙә, әйҙә, ҡорҙаш! Үтеп кит.

Баҙамша инеүгә Бәшир киң йоҡа күлдәктә булып, бабайҙарса тарбанлап килеп күреште. Һаҡалдарын һыпырғас, ҡарттар кейеҙгә түшәлгән йомшаҡ түшәктәргә сүктеләр. Ялсы улар алдына әсе ҡымыҙ менән һыуыҡ ит индереп ултыртты. Бәшир турһыҡтан эсемлекте үҙе ҡойоп, тәғәстең береһен Баҙамша алдына ҡуйҙы.

- Йә, нихәл, ҡорҙаш, ни хәбәрҙәр бар илйортта? - тип башланы хәл белешеүҙе ҡунаҡ.

- Бер яҡшы хәбәр юҡ, ай-бай, нимәләр булып бөтөр - бер Алла ғына белә. Петр батша килгән икән, тиҙәр, ул ҡотолоп ҡалған булған икән, тиҙәр. Әле шунан килгән хатты уҡыйҙар. "Меҫкен бәндәләргә" тип тороп яҙған, ти. Башҡорттарға урыҫ памещиктары тартып алған ерҙәрҙе кире ҡайтарырға вәғәҙәләй, ти. Аптырарһың... Ышанырлыҡмы был, юҡмы?

- Кинйә старшина уны барып күреп ҡайтҡан, хатта Указ апҡайтҡан тиҙәр, шул дөрөҫмө икән?

- Дөрөҫтөр, Нуғай даруғаһындағы иң арҙаҡлы старшиналарҙың береһе булған Кинйә юҡты һөйләмәҫ. Указды яҙғанда баштан уҡ Пугачев яуында йөрөгән Иҙеркәй һәм башҡорт вәкәләтенең башлығы, Кинйәнең энеһе, Ҡотлогилде ҡатнашҡан, ти бит. Шуға күрә указда башҡорт халҡының бөтә булған иң көслө теләге ап-асыҡ яҙылған да, ти.

- Ырымбур ҡәлғәһен ҡамауҙа тоталар тиме? - Баҙамша быҒаса ишетеп тә шик аҫтында тотҡандарын дөрөҫ мәғлүмәттәре булған ҡорҙашынан дәлилләткән һайын көмһоро ҡойола барҙы.

- Шулай, ти. Яманһары менән Кинйә старшиналар көс булып барыуға ғәскәр туплайҙар икән.

- Әбей батшаға ҡаршы сығыуғамы?

- Петр батша әбейенә ҡаршы һуғышҡас, шулай була инде, Әбей батшаға ҡаршы була.

Был яңылыҡты һеңдереп ҡабул итергә тырышып ултыра торғас, ҡапыл Баҙамшаһын йөрөгән шомло уй телеп үтте: Балапаны әлеге ғәскәргә барып ҡушылмағаймы! Ул шундуҡ ырғып тороп йыйына башланы.

- Әттә-тә! Ҡорт саҡҡандай булдың да?

- Балапан! - тип кенә әйтә алды ла ҡарт, ашығыуҙан сәсәй яҙып атына ҡарай йүгерҙе лә әйәренә егеттәрсә йылдамлыҡ менән һикереп менеп сабып сығып та китте. Ҡорҙашының ниндәй уйҙан улай ашыҡҡанын аңлаған Бәшир баш сайҡап ҡарап ҡына ҡала алды. Айбар шул дуҫының кинйәһе, ай, айбар! Һуйылдап да тәртәгә индерә алмаҫ йәш айғырҙай, ситлектә тотоп булмаҫ йыртҡыс ҡош ише. Ундайҙан бәлә көт тә тор...

* * *

– Ҡайҙа Балапан? - ҡырын ятып ҡына ойоп барған Гәйниә, иренең яман һөрәнләүенән һиҫкәнеп, ҡапыл ҡалҡына алмай аҙапланды. Ул арала Баҙамша килеп түрбаш яҡ ҡорғанын һыпыра тартып асып ебәрҙе лә, туңҡанлап тороп килгән ҡатынын беләгенән тотоп бер һелкетеүҙә аяғына баҫтырҙы:

- Ҡайҙа малайың?

Гәйниә күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ итеп башын ғына сайҡап алды:

- Белмәйем, атаһы... Аллаһи-валлаһи, икенсе көн ҡайтҡаны юҡ... Нимә уйларға белмәй торам... Үҙем...икенсе төн күҙ йоммайым.

Енләнгән ир, ҡәһәтен кемгә төшөрөргә белмәй, һис ғәйепһеҙ ҡатынын ҡолата төртөп тирмәнән тышҡа атылды ла, етеҙ йүгереп барып башта Дәүләтҡолдоң, унан Байтулланың тирмәләренә башын тыҡты:

- Балапанды күрмәнегеҙме?

Эстән бары ейәндәре лә килендәре генә яуапланы:

- Юҡ, олатай, күрмәнек!

- Юҡсы, ҡайным...

Өлкән улдарының был ваҡытта ҡырҙа мал артынан йөрөүен хәтерләгән ҡарт тағы һыбай атланып сапты. Гәйниә ирен ҡарашы менән генә оҙатып илаулап ҡалды:

- Ай, Аллам... Ярлыҡай күр... Балаҡайым...

Өлкән улдарын барып тапҡас, хәлде йәһәт кенә аңлатып, Дәүләтҡолдо эйәртте. Быныһы айыу кәүҙәле, бер күбәне сәнсеп ырғытыр көсө, көрәшсе тигән аты бар. Балапанды, әгәр ғәскәргә барып ҡушылған булһа, ә уның шундалығына иманы камил атаһының, туҡмап, бәйләп булһа ла алып ҡайтырға кәрәк. Табып алғанда, ул шайтан малайҙы ауыҙын ҡайырып өйләндереп, һыртында ҡамсы уйнатып ҡына тотасаҡ бынан ары. Төпсәк тә төпсәк тип, артыҡ иркәләтеп, бигерәк үҙһүҙле, үгеҙ күҙле итеп үҫтерҙеләр. Үҙе инде Баҙамша, үҙе... Башбаштаҡлыҡтарын мәрәкә күреп, яндырайлығын да, төҫөн дә йәшләй генә һәләк булып ҡалған ҡустыһына оҡшатып... артыҡ буйлатты, һыртлатты шул. Йә, ярар, етте уға, атаһының ҡанын боҙоуҙың ахыры былса ошо көн булыр.

* * *

Кинйә йәйләүендә табылманы Балапан, әммә ауылынан әллә күпме иргеттә осраттылар. Үҙ балаңа баш була алмай йөрөгәндә кеше балларына аҡыл һатып тороуҙы урынһыҙ һанап өндәшмәне уларға Баҙамша. Аптыраны ла етмәһә. Егерме-утыҙлап ҡына малай-шалайҙыр тип килһә, бында биш йөҙләп һыбайлы ҡайнаша. Арыуығын таный, аралашып-һөйләшеп йөрөгән ир-уҙамандар, уның кеүек өйөрләп мал тотҡан хәлләләре лә етәрлек. Әллә былар ысынлап урыҫтарҙы ҡыумаҡсымы, ысынлап күтәрелгәндәрме, тигән уй эсендәге һаман баҫылмаған асыуы менән айҡашты.

Яманһары старшинаның йәйләүе лә йыйылып яткан ғәскәрҙең торағына әйләнгән. Аҡландың йомшаҡ үләне күмәк ат тояғы аҫтында иҙелеп ҡарайған. Бында ла ауылдаштарын аңғарҙы. Йәйләүҙә халыҡ араһында алаҡанлап йөрөй торғас, Балапан үҙе ҡаршыларына килеп сыҡты:

- Атай!

- Ы-ых! - тип ҡамсылы ҡулын күтәрә биреп кире төшөрҙө атаһы, һуҡманы.

- Атай, мин йөҙ башы!

- Атаң башы! Йыйын әйҙә, ҡайҙа менгең?

- Мин ҡайтмайым, атай. Иртәгә беҙ Ырымбурға юлланабыҙ, унда беҙҙе батша яҙмамға көтә.

- Өйҙә, ана, әсәң көтә һине! Йыйын, тинем, - улының һыңғайламаҫын аңлаған ир артында торған олоһона боролоп баш иҙәне, йәнәһе, ал. Тик Дәүләтҡоло ауыҙын йырып тора бирҙе.

- Нимәгә ҡыуанаһың ул? Әпкил аттарҙы, меңгәштереп булһа ла апҡайтам был башһыҙҙы, - Баҙамша өлкәненә лә екерҙе.

- Атай... - Дәүләтҡол күҙҙәре янып эргәтирәләгеләргә күҙәтте, - ҙур ғәскәр туплана бит. Ни эшләп беҙ ҙә ҡушылмайбыҙ? Заводҡа тип бөтөн солоҡло йүкәлектәрҙе алдылар былтыр, һыҙырып ҡырҡып сыҡтылар. Ул ерҙәр һинең олатайыңдан олатаһына күскән аманат тигәйнең дә инде. Әйҙә, шул урындарыбыҙҙы булһа ла кире ҡайтарып алайыҡ.

- Алйот! Кем әйтте һинә ул ерҙәрҙе кире бирәләр тип? - Дәүләтҡолонан ындайҙы көтмәгән ата асыуынан сәрсәй яҙҙы.

- Һаңғырау түгелмен дә инде. Ишеттем. Батшанан килгән илселәрҙе тыңланым.

"Ниндәй батша?" тип һорарға ынтылды ла, тыйылды ҡарт. Ҡайҙа ниндәй батша икәнлеген ул хәҙер үҙе лә аңламай инде - буталды. Хатта, ана, ҡалға урыҫтары араһында йөрөгән, ураған һайын өйәҙ сходтарында ҡатнашҡан Бәшир староста ла белә алмай ултыра.

- Нимә, Кинйә менән Яманһары старшиналар казактар менән берләшеп һуғышмаҡсылармы? Казактарҙың утыҙ йыл әүәле генә ни хәтле халыҡты ҡырып киткәнен онотҡандармы?

Балапандың яуабы уны бөтөнләй хайран итте:

- Улар ғына түгел, егерме өс башҡорт старшинаһы ҡушылырға әҙер.

- Һин быны ҡайҙан беләһең? Дөрөҫ хәбәрме?

- Мин үҙем илселәрҙе оҙатып йөрөүселәрҙең береһе булдым. Үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем. Әбей батшаның каратель отрядында булған башҡорттарҙы ла өгөтләп был яҡҡа күсерергә алдыҡ.

Баҙамша бер аҙ өндәшә алмай торҙо. Унан тәрән һырҙар бураҙналаған маңлайын ыуып, ҡамсыны менән итек башына һуҡҡылап торҙо. Нығ аптырангайны ҡарт.

- Йә-ә... Яу буламы инде был?

- Яу була, атай. Беҙ яуға күтәрелдек! - тине лә Балапан атаһының яурынынан ҡағып китеп барҙы, унан, бара биргәс, боролоп ағаһына бармаҡ төбәп ҡысҡырҙы. - Мин һеҙҙе Ырымбурҙа көтәм!

* * *

Көҙ уртаһы, урман-ҡырҙарҙы салт алтынға мансып, үтә лә сыуаҡ торҙо. Ҡарасай яртыһына етеп барғанда ла, әле аяҡ аҫтында күпереп ултырған ҡурпы, йәй төҫөн һаҡлай ине. Тәбиғәттә һиллек-камиллыҡ та, ил араһында тыныслыҡ юҡ. Ул яҡтан, был яҡтан килгән хәбәрҙәрҙе тыңлап, нимә уйлап, ниндәй фекер төйнәргә белмәй аҙапландылар Баҙамша ғаиләһендә лә. Бәшир старшина һөйләүенсә, Ырымбур губернаторы Рейнсдорп һәм хатта Екатерина батшабикә боласылар яуын баҫтырыуға башҡорттар яҙҙам итер тип ышанған. Шунан сығып, башта 500 атлы, унан тағы 5000 кешелек башкорт командаһы төҙөргә бойороҡ биргән. Ләкин Кинйәнең өгөтсәләре менән осрашып өлгөргән башҡорттар каратель командаһына барыуҙан баш тартҡан, улар төркөм-төркөм булып билдәһеҙ яҡҡа олаҡҡан. Һуңғы сиктә рус властары көс-хәл менән ике мең ярым һыбайлы йыйған. Уның командир ярҙамсыны итеп Нуғай даруғаһының баш страшинаһы Әлебай ҡуйылған, ул үҙе лә тупланыш урыны булған Стәрлетамаҡ пристаненән сығыр алдынан ғына Кинйәнән хат алған. Шул командала Шайтан-Көҙәй олоҫонан үҙ отряды менән килгән Юлай старшина улы Салауат та булған.

Кинйә ебәргән кешеләр башҡорт командаһын өгөтләп, ҡамалған Ырымбурҙы ҡотҡарырға килгән генерал В.А. Кар ғәскәренә ҡушылырға бармаған. Петр батша ебәргән баш күтәреүселәр Кар ғәскәрен тар-мар иткән, ә башҡорт командаһының Әлебай етәкселегендәге бер төркөмө уларға килеп ҡушылған. Был төркөмдә үҙенең меңдән ашыу егеттәре менән Салауат отряды ла булған. Команданың ҡалған өлөшөн Петр батша лагерына сотник Ҡаҫҡын Һамаров алып барған. Әлебай менән Ҡаҫҡын ҡушылған мәлдә баш күтәреүселәр ғәскәрендәге башҡорттар һаны 5 меңдән дә ашып киткән. Һуңғы ике команда ҡушылғас, Петр батша ғәскәренең яртыһынан күбеһен башҡорттар тәшкил иткән.

Йәйләү миҙгелен ябыу, малды ауылға алып ҡайтып урынлаштырыу, һуя торғандарын һуйып алыу мәшәҡәттәрен башҡарғанда ла тик шул хәрәкәт тураһында ғына уйланы, һәр яңылыҡты йотлоғоп тыңланы Баҙамша. Ә бер кис уға Байтулла менән Дәүләтҡол килеп инде. Гәйниә һуңғы мәлдәрҙә гел ҡырҙа йөрөгән уландарын һирәк күргәнлектән, әле икәүләшеп килеп инеүҙәренә күңеле булып, әйҙүкләп түргә саҡырғайны ла, ирҙәр сисенмәй ҙә һикегә терәлеште. Ҡарт быларҙың ниндәйҙер мөһим нәмә әйтерҙәрен аңғарып, урындыҡ түрендә ултырған килеш төбәләп ҡалды.

- Атай, - тип башланы Байтуллаһы, - беҙ, бына, ҡусты менән күптән һөйләшеп йөрөйбөҙ ҙә... беҙ ҙә яуға ҡушылабыҙ. Бүгәсәүҙә инде ун биш меңдән ашыу башҡорт тупланған, ти. Бөтөн ил ирек даулағанда, беҙ ни эшләп ситтә ҡалабыҙ?

Баҙамша ҡыҫыҡ күҙҙәрен хәле еткән тиклем киңерәк асып балаларына алмаштилмәш тексәйҙе:

- Һеҙҙе кем ирекһеҙләй әле ул тиклем? Сабыр-сәсер ерегеҙ бар, малдарығыҙ өйөрөйөр, артыҡ бай булмаһаҡ та, хәлләләр араһында торабыҙ. Болғанышты башлаған казактарҙың байҙары әбей батша яғын алған, ти, бит әле. Завуттағылар ҙа ҡушылмай, ҡәлғәләрен яман һаҡлай, ти. Мишәр, татар старшиналары ла баш тартҡан, тип ишеттем.

- Баш тартҡан байҙарҙы ҡапҡа бағаналарына аҫып китәндәр. Урыҫтарҙың крипаснайҙары тулыһынса ҡушылған, - тип һаман үҙенекен һөйләне өлкән улы. Уны икенсеһе лә күтәреп алды:

- Өфө тирәһендәге өйәҙҙәрҙән генә лә етмештән ашыу башҡорт старшинаһы ҡушылған, ти. Ырымбур, Исәт, Көнгөр өйәҙендә һәм башҡа яҡтарҙа ла шулай уҡ икән.

- Атай, беҙ һүҙ көрәштерергә килмәнек, беҙ һаубуллашып китергә генә... - был хәбәрҙән саҡ сыҙап торған Гәйниә сарбаулап килеп өлкән улына йәбеште:

- Юҡ! Юҡ! Бер ҡайҙа ла бармайһығыҙ! Балапандың сығып олаҡҡаны еткән!

Әсәһенең тауышынан ҡурҡып шаршау артынан килеп сыҡҡан Еҙбикә лә сай-сойға ҡушылып илап ебәрҙе.

- Атаһы! Нимешләп тик ултыраһың ул? Ебәрмә балларҙы! Тый...

Баҙамша өндәшмәне лә, ҡуҙғалманы ла. Ул был баҫып килгән тулҡындан ҡаса алмаҫтарын аңлағайны. Йәшерәк булһа, үҙе лә, моғайын, шул юлды һайлар ине, тигән уйға килә ине ул һуңғы көндәрҙә. Шунлыҡтан уландарына ҡарап баш ҡына ҡаҡты:

- Фатиха!

- Аһ-аһ! Ниндәй фатиха! Атаһы...

- Сеү әле! Бөтөн ил яуға күтәрелгәндә өрләктәй улдарыңды урындыҡ аҫтында йәшереп тотмаҡсыһыңмы? Ниндәй намыҫ менән йәшәй улар аҙаҡ? Ирҙәрҙең бурысы шул - яу сабыу.

Аталарының был һүҙҙәренән ҡаушаңҡырап ҡына килгән ирҙәрҙең яурындары турайып, баштары юғары күтәрелде.

- Әйткәнеңә көүәт, атай.

- Бәхил булығыҙ. Яҙған булһа күрешербеҙ әле.

Гәйниә улдарының әле береһенә, әле икенсеһенә барып йәбеште, инәлде-ялбарҙы, ахырҙа зыулап илап арттарынан сығып, эйәрә биреп тороп ҡалды. Ҡараңғылыҡтан ҡайһыныһындыр ике ауыҙ һүҙе генә килеп етте:

- Ин, әсәй, өшөрһөң...

**(Дауамы. Башы 52-1-се һандарҙа).**

✔ *Халыҡ йырын ижад иткән башҡорт уйлап яҙып ултырмаған бит, йырлаған да ҡуйған. Институтта ла әйтәләр, башҡорттар уҡырға килһә, киң диапазон менән әҙерлекле килә, аҙаҡтан уны матурайтыу ғына ҡала. Шулай ҙа иң кәрәклеһе - моң.*



ЗАМАН БАШҠОРТО

**Классик музыканың иң юғары баҫҡысы иҫәпләнгән опера һәм балет сәнғәтен ниндәйҙер әкиәт донъяһы кеүек ҡабул итергә күнеккәнбеҙ. Халҡыбыҙға сит-ят, күптәребеҙгә аңлайышһыҙ донъя кеүек ул беҙгә. Милли сәнғәттең, педагогиканың, холоҡ-ҡылыҡтарыбыҙҙың, үҙаңыбыҙҙың һ.б нигеҙе булып халыҡ ижады тора, тибеҙ. Әммә ошо уҡ халыҡ ижадының фольклор сиктәренә һыймай, үҙе үк профессиональ сәнғәт юғарылығында булыуын иҫебеҙҙә тотмайбыҙ. Юғиһә, башҡорт халыҡ йыры - опера ариялары, айырым бер сюжетҡа ҡоролған халыҡ бейеүе балеттан һис айырылмай бит! Ошо опера һәм балет сәнғәтендә башҡорт йырсылары һәм бейеүселәренең айырыуса дан ҡаҙаныуы ла быға дәлил булып тора. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Онегин" Икенсе милли опера премияһы лауреаты, "Рәсәй радиоһы" артисы" премияһы дипломанты, Башҡорт опера һәм балет театры солисы Артур ҠӘЙЕПҠОЛОВ менән әңгәмәбеҙ ошо мөғжизәле донъя, уның ҡанундары һәм унда уңышлы ижад иткән башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары тураһында.**



# ЙЫРЛАЙЫМ...

## ә башҡа төрлө һөнәрем юҡ

➔ **Опера артисы булыу өсөн донъяның мәҙәни үҙәге һаналған уҡ булмаһа ла, ошо юҫыҡта үҫешеү өсөн шарттар тәҡдим итә алған ҙур ҡалаларҙа тыуып-үҫергә, йәшәргә кәрәк, тигән ҡараш бар. Баймаҡ егетенең операға юлы ниндәй булды? Әллә һәләт өсөн баш ҡала-төпкөл тигән бүленеш юҡмы?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, опера йырсыһы булам тип уйлағаным да булманы. Минең үҫмер сағым телевизорҙа башҡорт клиптары күренә башлаған саҡҡа тура килде, бына шундағы йырсылар кеүек микрофон тотоп, йырлап йөрөгөм килә ине былай. Әммә йырсы һөнәрен һайлау уйҙа ла булманы, сөнки шоферҙар нәҫеләнән булараҡ, атайым кеүек ҙур КамАЗ йөрөтөрмөн, йыраҡ юлдарға сығырмын, тип хыяллана инем. Шулай ҙа атайымдың атаһы Сәғәҙей ҡартатайымдың үҙ алдына һина халыҡ йырҙарын йырлап йөрөүен ишетеп үҫтем.

Уҡырға барғас, музыка уҡытыусыһы үҙе етәкләгән түңәрәккә саҡырҙы. Ҡайтып әйткәс, балам, йөрө лә ҡуй, тине әсәйем, шуның менән минең урамда малайҙар менән уйнап йөрөүемә сик ҡуйырға теләне, ахыры. Беҙ бит бөгөнгө балалар кеүек телефонға текәлеп, өйҙә ултырмаҡ, рәхәтләнеп уйнай инек. Ошо түңәрәктә сәнғәткә һөйөү уянды. Тарихсы булам, тип йөрөгәндә, уҡытыусым, тауышың бар, тип, сәнғәт юлынан китергә кәңәш бирҙе. Шулай итеп мин Сибай сәнғәт колледжына уҡырға индем. Был уҡыу йорто үҙ мөлендә әллә күпме йырсы үҫтерҙе, Камил Вәлиев, Джон Мусин кеүек шәхестәр тәрбиәләне уларҙы. Тимәк, уҡытыусы булһа, ҡайҙалыр төпкөлдә лә опера йырсыһы тәрбиәләргә була. Ә Сибайҙа милли мәҙәни мөхит булды. Һөнәрҙең төп нескәлектәренә иһә Өфө дәүләт сәнғәт институтына килгәс төшөндөм. 5 йыл сәнғәт донъяһына сумып, шуның менән генә йәшәнем. Колледждағы остаҙым Джон Әхмәт улы, әгәр ҙә Салауат Асҡаровтың класына эләкмәһәм, кире ҡайт, тип әйтеп ебәргәйне. Салауат Әхмәт улы кеүек уҡытыусыға эләгеүем дә ҙур бәхет булды.

➔ **Бөгөнгө көндә классик музыкаға иғтибар көсләрәк кеүек, баш ҡалала ла төрлө саралар йыш үтеп тора. Һеҙ дөйөм милли сәнғәт тураһында ниндәй фекерҙәһегеҙ?**

- Классик концерттарҙың, "Евразия йөрәге" кеүек халыҡ-ара фестивалдәрҙең үтеүе, уларҙа билдәле опера йырсылары сығыш яһауы бик яҡшы. Шулай уҡ этно йүнәлештең үҫешеүе дөрөҫ тип уйлайым. Башҡортса һөйләшкән, башҡорт мәҙәниәтен күтәргән был егеттәрҙең һәр береһен яҡшы беләм, ҙур эш башҡара улар. Башҡорт халыҡ йырын йәштәргә яҡынайталар. Сөнки эстрада менән генә мәҙәниәтте күтәреп булмай, унда бөгөн бер йырсы килә, иртәгә китә, тимәк, был йүнәлеш даими күренеш була алмай. Унан һуң, эстрада йырсыһына ниндәйҙер талаптар ҡуйып та булмай, бер йыр яҙҙыралар ҙа, нисәмә йылдар йырсы булып йөрөйҙәр. Ә тауыш гел эшләргә тейеш. Уҡыған саҡта аҡса эшләйем тип, йырлап маташтым бер ваҡыт. Микрофонға йырлап йөрөһәң, уҡытмайым, тине Салауат Әхәт улы. Спортсы оҙаҡ шөғөлләнмәй башлаһа, формаһын юғалтҡан кеүек, микрофонға йырлау ҙа тауыштың юғалыуына килтерә. Шуға ла күптәр эстрадала оҙаҡ ҡала алмай. Бәлки, шуның өсөн дә халыҡта, йырсы ул һөнәр түгел, тигәнерәк ҡараш йәшәйҙер. Ауылға ҡайтып, бер партия башҡарыу өсөн опера йырсыһына 2-3 ай ваҡыт кәрәк тип әйтеп ҡара, ышанмаясаҡтар. Әле бына саҡ атай-әсәйҙәр, туғандар минең сығышымды ҡарарға килә башланы. Шул тиклем оҡшаталар, Баймаҡҡа ла килегеҙ концерт менән, тиҙәр.

➔ **Шул уҡ ваҡытта опера сәнғәте милләтебеҙ өсөн ят түгел, беҙҙең халыҡ йырҙарыбыҙ арияларға тиң, опера һәм балет сәнғәтенә нигеҙ һалған шәхестәребеҙ күп, Башҡорт опера һәм балет театры ла милләттәшебеҙ Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың тырышлығы менән барлыҡҡа килгән. Иң мөһиме, бөгөн донъяның опера сәнғәте донъяһында башҡорттарҙы беләләр...**

- Көн һайын аҙ ғына бал ашаған кеүек, классик музыка ла тыңларға кәрәк. Уның кеше анына тәьҫире көслө. Рок, джаз кеүек бөйөк музыка рәтенә индән йүнәлештәр бар. Әммә улар ҙа үҙгәреш, яңырыш кисереп тора, ә классика ул - үлемһеҙ. Башҡорт халыҡ йыры кеүек үлемһеҙ сәнғәт өлгөһө тыуҙырған башҡорт та ошо мондоң ҡеүәтен һәм йәнде имләр тәьҫирен белгән булһа кәрәк. Башкиро, башкиро, ти беҙгә итальяндар ҙа, америкалар ҙа бөгөн. Һәм бында Илдар Абдразаҡовтың өлөшө ҙур. Ла Скала хәҙерге йәштәр теле менән әйткәндә, донъялағы иң текә театр үҙенең миҙгел асыу концертына Илдарҙы саҡыра. Донъяның иң яҡшы басы. Ул бит Америка телевидениеһынан халыҡ йыры "Азамат"ты йырлаған кеше! Ни өсөн йырламаҫҡа ти, башҡорт йыры төҙөлөшө, диапазоны буйынса опера ариялары һис ҡалышмай. Халыҡ йырын да һәр кем йырлай алмай, тынды тотоуы еңел түгел.

Студент саҡта Италияға алып барғайнылар, шунда мин дә халыҡ йырын йырлап ишеттерҙем. Һоҡланып тыңлап ултырҙылар, аҙаҡтан һорайҙар: "Ә һеҙ йырлағанда тын алдығыҙмы ул?" "Юҡ", тием. "Нисек улай?" тип аптырайҙар. "Йырҙарыбыҙҙың үҙенсәлеге шулай", тием. 40-50 секунд буйына тынды әҙмәйһең, әҙһең, йыр өҙөлә. Уҡырға ингәс, һәр кемдең октаваһын "үлсәйҙәр". Әйтәйек, кемдекелер 1,5 октава, кемдекелер кәмерәк. Һәм артабан ошо тауыш киңлеген арттырыу өҫтөндә эшләйһең. Халыҡ йырын ижад иткән башҡорт уйлап яҙып ултырмаған бит, йырлаған да ҡуйған. Институтта ла әйтәләр, башҡорттар уҡырға килһә, киң диапазон менән әҙерлекле килә, аҙаҡтан уны матурайтыу ғына ҡала. Шулай ҙа иң кәрәклеһе - моң. Операла ла, моңоң булмаһа, күп нәмәгә өлгәшеп булмай.

➔ **Моң - ул аңлатып булмай торған төшөнсә, тиҙәр. Һеҙҙең өсөн нимә ул моң?**

- Ысынлап та, телебеҙ ни тиклем бай булһа ла, мондоң нимә икәнен аңлатыу өсөн ул да ярлы. Яратыу тиер инең, кеше йырҙы яратып та, тәбиғи һәләте булмауы бар. Шуныһы ғына бәхәсһеҙ, моң ул һәр башҡортта бар һәм ул күңелдән, йөрәктән сығырға тейеш. Башҡорт телен дә моңло тел, тиҙәр бит. Опера йырсыһы төрлө телдәрҙә йырлай, әйтелеше йәнәтенән беҙҙең телгә иң яҡыны - француз теле. "Фауст"ты ҡуйған саҡта коуч саҡырғайнылар, минең менән шөғөлләнеүе уға еңел булды. Тик нисек кенә ятлама, сит тел туған телең кеүек яңғырамаясаҡ. Итальяндар беҙҙең итальянса йырлағанды ишетеп, шәп, тик ошо урынын башҡасараҡ итһәң, тип әйтәсәк. Башҡорт композиторы яҙғанды башҡортҡа уйнауы рәхәтерәк, ул телдең һәр бөгөлөн дөрөҫ ишетерәсәк. Шулай ҙа дөрөҫ әйтелештән тыш, тырышлыҡ булмаһа, партия уңышлы сыҡмай. Тексты ятлағандан һуң, ул тауышына, тәненә матурлап, шымарып "ултырһын" өсөн ваҡыт һәм тырышлыҡ кәрәк.

➔ **Һеҙ - опера донъяһында иң абруйлы "Онегин" милли опера премияһы лауреаты, тағы ла әллә күпме исем-дәрәжәләрегеҙ бар. Улар араһында үҙегеҙ өсөн иң ҡиммәтлеһе нимә?**

- Холҡом шундай, мин бер ҡасан да дан артынан ҡыумайым. Минә улар арҡылы килгән мөмкинлектәр баһалыраҡ. "Онегин" милли опера премияһы лауреаттары беренсе турҙа видеояҙма аша билдәләнә, аҙаҡтан тәнҡитселәр уларҙың сығышын театрҙа килеп ҡарай һәм һайлап ала. Рәсәйҙә 50-нән ашыу опера театры бар, һәр номинацияла 4-әр кеше. Лауреаттар исемлегенә эләккәс тә, ҡайҙан-ҡайҙан, Өфөгә биреп тормаһалар инде, тигән уй менән генә барҙым Санкт-Петербургҡа. Ул тантананың нисек байрамса үткәнен күрһәгеҙ, ундағы матурлыҡҡа күҙҙәр ҡамаша, күренекле профессорҙар, артистар ҡатнаша. "Икенсе пландағы роль" номинацияһында Артур Ҡәйепҡолов, тигәс тә ышанмай ултырҙым әле. Икенсе йылына ошондай уҡ тантанала "Рәсәй радиоһы" артисы" тигән премия бирҙеләр һәм беҙҙе Ҙур театрҙа сығыш яһарға саҡырҙылар. Кем генә был театрҙа йырларға хыялланмаһын инде! Был премиялар минең ошо хыялымды тормошҡа ашырырға этәргес булды. Хоҙайға, яҙмышҡа ошондай бүләктәре өсөн рәхмәтлемен. Рәсәй театрҙарынан саҡырыуҙар алһам да, үҙебеҙҙең театрға тоғромон. Бында әлеге мәлдә бик яҡшы команда тупланды. Ял итергә лә ваҡыт юҡ, ролдәр күп. Уныш ғәли йәнәптәренең дә, тамашасыңдың да һөйөүен тоям. Тамашасылар араһында киләсәктә башҡорттар ҙа күбәйер, тип ышанам. Сөнки минең өсөн үҙ халҡымдың таныуы мөһим.

➔ **Үҙгәреп торған заман артынан беҙгә лә үҙгәрергә кәрәктер, могайын. Бөгөнгө заман башҡортона ниндәй сифаттар мөһим, тип уйлайһығыҙ?**

- Тотош милләт өсөн яуап тотоуы ауыр, үҙемдән сығып ҡарағанда, беҙгә үҙенде, эшенде, һәләтенде күрһәтә белеү кәрәк. Был милләттән дә түгел, шәхсән кешенең үҙенән торалыр күбеһенсә. Әҙерәк үткерерәк булырға кәрәк. Ниндәй шәп тауышлы егеттәребеҙ тормошта ла, сәнғәттә лә юғалып ҡала, үткерерәк булһалар, халҡыбыҙ һәләтле йырсыларға ла байыраҡ булыр ине. Бөгөн уңышлы булам тиһән, спорт менән шөғөлләнһәң, дөрөҫ туҡлан, тип тә әйтер инем. Шулай уҡ бер-беребеҙгә ярҙам итеүҙе, күтәрмәләүҙе ғәҙәт итһәк ине. Былай халҡыбыҙ ихлас, эскерһеҙ беҙҙең. Ошолар беҙҙе күтәрмәләй ҙә.

Ҡарап-күреп йөрөйөм, тәрбиә ысулдары ла үҙгәрә хәҙер. Беҙҙе атай-әсәйҙәр ныҡ тотто, күп нәмәнән тыйҙылар. Бөгөн шул уҡ әсәйҙәр ейәндәренә башҡараҡ ҡараша. Ябай ғына күренеш, элек ололар эргәһендә һүҙ һөйләп тороу мөмкин булмаған хәл ине. Хәҙер бала баш, ҡунаҡта ла башта балалар ултыра табынға, унан ғына ололар. Ныҡ тыйыу ҙа, әлеге кеүек ныҡ иркәләтеү ҙә дөрөҫ түгелдер. Хәҙерге балалар үҙҙәре лә иртә өлкәнәйә. Беҙ 10 йәштә уйнап йөрөй инек әле. Бөгөн 5 йәшлек улым миңә үҙе аҡыл өйрәтә. Мәктәпкә уҡый, яҙа, һанай белеп бара. Спорт холоҡто тәрбиәләй тип, дзюдоға ла бирҙек. 6-7 йәштән музыкаға ла биргем килә, ул аҡылды үҫтерә. Бына шулай бала сағын урлайбыҙ инде үҙебеҙ. Шулай уҡ үҙемә эйәртеп йөрөп, ярҙам итәм, тигән теләк белдергәнендә тыймаҫҡа күнеккәнмен.

➔ **Ә үҙегеҙ ысын ир-егеттәргә хас шөғөлдәрҙең барыһын да эшләй беләһегеҙме?**

- Маҡтанырлыҡ һөнәрем юҡ - йырлай ғына беләм, тиер инем, атайҙан улға күсә торған һөнәрҙәрҙең барыһын да үҙләштергәнмен. Уларҙы миңә махсус өйрәтеп ултырған кеше лә булманы. Атай йыраҡ юлдарға йөрөй ине, тигәйнем бит инде. 3-4 класта һыйыр аҫтын көрәп, малды көтөүгә ҡыуыу кеүек эштәрҙе эшләй инем. Бесәндә лә атай барып тейәп кенә алып ҡайта ине, сабыу, йыйыу, күбәләү, кәбән ҡойоуҙы әсәй менән, йә ҡайны берҙә ағайҙар менән ҡул ярҙамында эшләй инек. Утын ярыу, ҡураны төҙәтеү - быларҙы шөғөлгә лә һанамайым. Таныштарҙың сантехника төҙәтеп ҡуйыуҙы ла башҡаларға ҡушып эшләтеүенә көлкөм килә. Ә мин, беләмме, юҡмы, үҙем тотоп эшләргә күнеккәнмен. Шулай ҙа иң ҙур ҡыҙыҡһыныуым - машиналар. Руль китмәй минән. Яратам машина йөрөтөргә, бынан ҙур кинәнес алам.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✔ *8 мең йәш ғаиләне тикшереп, психологтар шундай һығымта яһаған: иртә ҡоролған ғаиләләрҙә ата-әсәләр һәм балалар араһында мөнәсәбәт яҡшыраҡ була, был ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙың интеллект кимәле юғарыраҡ була.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАТЛЫ АШАМА,
## оҙаҡ йоҡлама

■ Америка ғалимдары иртәнге сәйгә шәкәр һалмаҫҡа һәм татлы аҙыҡтар ашамаҫҡа кәңәш итә. Татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр ҡандағы шәкәрҙең күләмен күтәреп кенә ҡалмай. Уяңғас та тәм-том менән "һыйланған" организмға ғәҙәттәгенән артығыраҡ калория кәрәк буласаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, бигерәк тә юғары калориялы эсемлектәр зарарлы.

■ Аҡһымлы һәм майлы аҙыҡты эшкәртеү өсөн күп энергия һәм ваҡыт сарыф ителә. Шуға ла ауырыған саҡта сирленең бер аҙ ашамай тороуы файҙалыраҡ, сөнки был ваҡытта организмдың көсө аш һеңдереүгә түгел, ә инфекция менән көрәшеүгә өсөн йүнәлтелгән булырға тейеш. Ауырып китһәгеҙ, туклыҡлы аштарҙы кәметеп, күберәк емеш-еләк, бигерәк тә әфлисун, мандарин, лимон, сей йәки быҡтырылған йәшелсә, һыуҙа бешерелгән йәки быҡтырылған балыҡ ашағыҙ, һыт эсегеҙ. Әйткәндәй, киҙеү вирусы әсе мөхитте яратмай, шуға ла нарзан кеүек минераль һыуҙарҙы күберәк эсеү яҡшыраҡ, ул бауырҙан ҡабул ителгән дарыуҙарҙы ла сығарырға ярҙам итә.

■ Канаданың Шербрук университеты ғалимдары белдереүенсә, пневмонияның вакцина үпкәләр шешеүенән генә түгел, инфаркт ҡурҡынысынан ла һаҡлай. Бындай һығымтаға улар 65 мең инфаркт кисергән сирлене тикшергәндән һуң килгән. Был сирлеләрҙең 12 проценты пневмонияға ҡаршы вакцина эшләткән булған, шуға ла инфаркттан үлеү осрағы 40-70 процентҡа кәмегән. Ғалимдар быны пневмонияның йөрәк артерияларының эске көбө шешеүенә булышлыҡ итеүе, ә был үҙ сиратында холестериндың йыйылыуына һәм артерияларҙы ҡаплап тороусы төйөрҙәр барлыҡҡа килеүе менән аңлата.

■ Американың Сан-Диего университеты ғалимдары йоҡонон оҙайлығы кешенең сәләмәтлегенә нисек йоғонто яһауын асыҡларға теләп тикшеренеүҙәр үткәргән. Һөҙөмтәлә улар тәүлегенә 5-6 сәғәт йоҡлау иң яҡшыһы тигән фекергә килгән. 14 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 5-6,5 сәғәттән оҙағыраҡ йоҡлау йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә килтерә икән. Шулай уҡ төндә йоҡламауһылар ҙың да сәләмәтлегенә байтаҡ зыян килә, уларҙың ҡан баҫымы йыш күтәрелә.

■ Бөгөн йәштәр карьера эшләү өсөн ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Әммә Американың Пенн-Стейт университеты белгестәре фекеренсә, 18 йәштән 25 йәшкә тиклем ғаилә ҡороу йәштәрҙең генә түгел, ә уларҙың буласаҡ балаларының да психологик сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай. 8 мең йәш ғаиләне тикшереп, психологтар шундай һығымта яһаған: иртә ҡоролған ғаиләләрҙә ата-әсәләр һәм балалар араһында мөнәсәбәт яҡшыраҡ була, был ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балаларҙың интеллект кимәле юғарыраҡ була.

■ 2011 йылдан Еврокомиссия балалар өсөн тәғәйенләнгән пластик шешәләр етештереүҙә "Бисфенол А" матдәһен ҡулланыуҙы тыя. Был химик ҡушылма баланың үҫешенә кире йоғонто яһауы ихтимал. Бисфенол А тәрлө үтә күренмәле пластик һауыт-һаба етештереүҙә киң ҡулланыла. Был матдә бигерәк тә эсе һәм майлы аҙыҡ менән бәйләнешкә ингәндә хәүефле. Әгәр ҙә бындай пластиктан яһалған шешә иҫкергән һәм унда сыйылған урындар бар икән, бисфенол А тағы ла күберәк бүленеп сыға.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# ТУМЫРТҠА



**Тумыртҡа һуҡҡан барабан тауышын күптәрҙең ишеткәне бар. Беҙ был тауышты тыңларға яратабыҙ. Ҡышҡы урманға йәм өҫтәп ебәрә бит тумыртҡа туҡылдауы. Ә бына үҙен нишләптер өнәп етмәйбеҙ.**

Беренсенән, тумыртҡа ҡушаматы ошаҡ ташыған кешегә ҡушыла. Йәнәһе, "тумыртҡа" булған ерҙә һаҡ булығыҙ, ул һәр хәбәренде "туҡылдатып" ҡына тора. Икенсенән, был ҡошто алйот тип иҫәпләйбеҙ. Иҫәпләйбеҙ генә түгел, хатта сағыштырыу миҫалы итеп ҡулланабыҙ. Иҫ китмәле инде. Әгәр берәүҙе былай ғына түгел, ә бик ныҡ итеп үпкәләтергә теләһәк, бөгөлгән бармаҡтар менән өҫтәлгә бер нисә тапҡыр туҡылдатып алабыҙ ҙа, "бына һин ошолай", тип әйтәбеҙ. Хатта әйтелергә тейешле алйот һүҙен әйтеп тә тормайбыҙ. Уныһы, йәнәһе, былай ҙа аңлашыла.

Әйткән кешеһен әйтәм әле, ул бушҡа ғына өҫтәл туҡылдатмай. Йәнәһе, тумыртҡа ла бына ошолай туҡылдата. Ә унын ... мейеһе юҡ! Әгәр мейеһе булһа... ул күптән үлгән булыр ине. Йә мейе һелкенеүҙән, йә мейеһе сәсрәп осоп бөтөүҙән. Әммә тәбиғәт нишләптер был ҡошто йәлләгән, тип уйлай кеше. Мейеһен сәсрәтеп бөтөргән, ә үҙен тере ҡалдырған. Бына хәҙер йөрөй "мейеһеҙ" тумыртҡа рәхәтләнеп туҡылдап. Бына шулай, өҫтәлгә туҡылдатыу мейе юҡлығына ишара икән!

Уйлап ҡараһаң, бындай һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк тә бар һымаҡ. Үҙегеҙ баһа биреп ҡарағыҙ әле. Тумыртҡа көнөнә 12 мең тапҡыр һуға, секундына 20 тапҡыр һуғып өлгөрә, һуғыу тиҙлеге 35 км/сәғ. Бындай тиҙлектә һуҡҡан сукыш хатта ҡыҙып китә. Шуға тумыртҡа бер аҙға тынып ҡала икән. Суҡыш һыуына төшкәс, тағы бер тапҡыр барабан һуғып ала. Кеше мейеһе бындай туҡылдауға сыҙамаҫ ине, ә тумыртҡа мейеһе нисек сыҙай икән - был хәл ғалимдар тарафынан өйрәнелгән һәм асыҡланған. Баҡтиһәң, был ҡоштоң баш төҙөлөшө, мейе урынлашыуы һәм башҡаһы беҙҙекенән бөтөнләй менән айырыла икән.

Әйткәндәй, "телең оҙонайһа, ҡыҫҡартырмын мин уны" тигән әйтемгә тумыртҡа миҫал була ала. Уның теле бигерәк оҙон. Кәүҙә оҙонлоғо 25 см, ә тел оҙонлоғо 10 см самаһы! Унысама оҙон телде ауыҙына нисек һыйҙыралыр, аптырамалы инде. Уға бындай оҙон тел ҡарышлауыҡтарҙы супләр өсөн кәрәк. Төрлө тумыртҡаның тел төҙөлөшө төрлөсә - кемдер ҡарышлауыҡты үтә сәнсә, кемдер уны тел ҡытыршылығы менән тота, ә кемдер лайлалы төкөрөк менән эләктереп ала. Тумыртҡа икенсе төр аҙыҡҡа ла күсә ала. Ҡышҡыһын ағас төбөндә өймәләм булып ятҡан ҡарағай тубырсыҡтары ошо тумыртҡаның эше лә инде. Ул тубырсыҡты күп осраҡта ботаҡ сатаһына ҡыҫтыра һәм емен супләй. Бушап ҡалғас, уны ергә төшөрөп ебәрә. Шулай йыйылып китә инде ағас төбөнә емһеҙ ҡалған тубырсыҡтар.

Ә шулай ҙа төп аҙыҡ булып урман ҡортҡостары иҫәпләнә. Уларҙың күплегенә ҡарап, йәш ғаилә буласаҡ оя урынын һәм биләмә ҙурлығын билдәләй. Йорт һалыр өсөн ағас олонон һайлап алалар һәм унда ҡыуышлыҡ соҡоп эшләйҙәр. Күп ваҡыт уҫаҡ, ерек һәм сағанда оя соҡола. Бына әле мин төшөрөп алған фотоһүрәттә йорт төҙөү өсөн имән һайлап алынған. Йорт һалыу өсөн сама менән 20 көн ваҡыт китә. Соҡоу эшендә ата ҡош та, инә ҡош та тигеҙ ҡатнаша. Йорт апаруҡ иркен килеп сыға, унын тәрәнлеге 30 см, ә киңлеге 20 см самаһы була. Йәш пар 4-5 йомортҡаны алмашлап баҫа. Төнөн күберәген "атай" ҡарай. Ярты ай баҫҡандан һуң ҡош балалары донъяға килә. Бер ай самаһы атай-әсәй ҡарамағында йәшәйҙәр, шунан ғына үҙ яйына йәшәргә һәләтле булалар. Ә шулай ҙа улар ата-әсәй эргәһенән китергә ашыҡмайҙар. Өс ай самаһы улар эргәһендә донъя көтәләр. Шунан һуң ғына тыуған йортон ташлайҙар һәм үҙ парҙарын табып, донъя көтә башлайҙар.

Тумыртҡа ғаиләһе үҙ биләмәһен булдыра, ҡортҡостарҙың күплеген самалап, унын сиктәрен билдәләй. Әгәр ҡортҡостар күбәйә башлаһа, ғаилә биләмә сиктәрен үҙгәртә, йәғни унын майҙанын күпкә кәметә. Ваҡытлыса буш ҡалған биләмә өлөшөнә "өйәзш" булып башҡа тумыртҡалар осоп килә башлай. "Өйәҙш" тумыртҡалар арҡаһында биләмәлә ҡортҡостар шашып үрсеп китә алмай. Шуныһы ҡыҙыҡ, "өйәзш" булырға яңғыҙ, әлегә ғаилә ҡороп өлгөрмәгән йәш тумыртҡаларҙың ғына хоҡуғы бар. Ҡортҡостар һаны кәмегәс, ғаилә биләмә сиктәрен кире тергеҙеп ҡуя. Аяҡ аҫтында буталып йөрөгән, әле үҙ донъяһы булмаған ыбыр-сыбыр йәш тумыртҡалар кире ҡыуып ебәрелә. Ошоларҙан ғына сығып, тумыртҡаны бер ҙә алйот тип әйтеп булмайҙыр.

Был мәҡәләне Айһылыу Йәғәфәрованың шиғыры менән тамамлағым килә.

*Тумытка - урман докторы,*
*Ағас йөрәген тыңлай.*
*Уның әйткән һәр бер һүҙен*
*Урман ҡабатлай, тынмай.*

Әйткәндәй, беҙҙә тумыртҡаның иң таралған төрө булып туҡран иҫәпләнә. Икенсе исеме - ҡара тумыртҡа. Исеме есеменә тура килә былай. Был ҡош ҡара-тоноҡ төҫтә. Башында һәр ваҡыт ҡыҙыл "түбәтәй" була. Мин төшөрөп алған фотоһүрәттә унын балаһы үҙ ояһынан башын ғына сығарып ата-әсәһен көтөп тора.

# ҺАЙЫҪҠАН



**Һайыҫҡанды беҙ иҫ белә башлағандан уҡ беләбеҙ. Сөнки был ҡош йыл әйләнәһенә беҙҙең эргәлә. Йылы яҡҡа ла осоп китмәй ул. Шуға күрә беҙ унын тегеләйбылай осоп йөрөүенә өйрәнеп тә бөткәнбеҙ, бугай. Хатта шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул итәбеҙ. Беҙ бөгөн унын менән яҡындараҡ танышайыҡ әле.**

Тәү сиратта, был ҡош үҙенең яңғырауыҡлы итеп шыҡырыҡлауы менән билдәле. Һайрауы менән, тип әйтергә, нишләптер, тел әйләнмәй. Шыҡырыҡлағас шыҡырыҡлай инде. Матур һайрай тип яҙып, һандуғасты үпкәләтеп булмай ҙа инде. Ә шулай ҙа һайыҫҡандың шыҡырыҡлауын халыҡ үҙ итә, хатта яҡын күрә. Уға бына ошондай яғымлы шиғыр юлдары бушҡа бағышланмаған.

*Урман яңылыҡтарын*
*Һайыҫҡан көн дә һөйләй:*
*Урман радиоһында*
*Ул диктор булып эшләй.*

Бына шулай, халыҡ һайыҫҡанды шыҡырыҡламай, ә урман яңылыҡтарын һөйләй, тип ҡабул итә. Улай ғына түгел, хатта "урман дикторы" тараткан "яңылыҡтарҙы" хәйерлегә юрай. Уның "яңылығын" ишеткән кеше, "һәйбәт хәбәр килде", тип ҡыуанып китә. Был турала шағир ошолай яҙа:

*Тәҙрәләремә ҡарап,*
*Ҡойма башына баҫҡан.*
*- Бөгөн ҡунаҡ көтөгөҙ, - тип,*
*Шыҡырыҡлай һайыҫҡан.*

Әйткәндәй, ваҡыты менән һайыҫҡан үҙе лә ҡунаҡ булырға ярата. "Башы ҡороғор, бынау һайыҫҡан баҫырға һалған ун йомортҡаның берәһен ҡалдырмай эсеп киткән", - тип зарланып йөрөгән хужабикәләр һәр ауылда барҙыр. Халыҡ уның йырлауын оҡшата, ә бына "бейеүен" нишләптер оҡшатмай. Һайыҫҡандың оҫта "бейеүсе" булыуы тураһында ошондай таҡмаҡ сығарылған:

*Аяғындағы итегең*
*Әмериканский икән.*
*Һикереп-төшөп бейеүҙәрең*
*Һайыҫҡанский икән!*

Шуныһы ҡыҙыҡ, һайыҫҡан нишләптер ялтыр нәмәләрҙе ярата, яйы сыҡһа, уларҙы урлап та ҡуя. Бер мәл берәү ошолай һөйләп торғайны. "Иҫем китте, мунсала һабын юғала ла ҡуя. Хәҙер булһа, артыҡ иғтибар итмәҫ инем. Заманында һәр нәмәгә ҡытлыҡ булғайны бит, бына ошо ваҡытта булды был хәл. Бер айға бер һабын бирелгәс, уны ҡәҙерләп-самалап ҡына тотонорға тура килә ине. Бер һабынды бишкә бүлеп, мунса һайын бер киҫәген алып барған мәлдәр ине. Мунса инәбеҙ, ә иртәнсәк һабын юҡ. Унан елдәр иҫкән була. Мәйтәм, былай булмай, бурҙы тотор кәрәк! Ә эстән генә шайтан ҡоторта, күрше-күләндән генә эше, инеп ауыҙҙарын йырып сыҡ, тей. Ярай, тим шайтанға, ҡабаланмайыҡ, өлгөрөрбөҙ ауыҙҙарын йырырға, тәүҙә бурҙы тотайыҡ әле. Кис мунса индек, ә иртәнсәк таң беленер-беленмәҫ мәлдә мин ҡулға елле генә таяҡ тотоп, һарай башында йәшенеп ятам. Урынды һәйбәт һайлаганмын былай, мунсаның асыҡ ишеге хатта һәйбәт күренә. Еллә- тергә, тип асып ҡуйғанбыҙ ишекте. Бына бер мәл мунса ишегенә... һайыҫҡан килеп ултырҙы. Оҙон ҡойроҡтарын тегеләй ялпылдатты, былай ялпылдатты, оҙон муйындарын һуҙып, тирә-яҡты байҡап сыҡты, мунса эсенә күҙ һалып алды. Шунан мунса эсенә осоп инеп китте һәм... ауыҙына һабын киҫәген арҡыры тешләп килеп тә сыҡты! Бына кем икән бур! Ә үҙем бер яҡтан ҡыуанам, шул уҡ ваҡытта оялам. Ярай әле, мәйтәм, шайтан ҡотҡоһона бирелеп, аңын-тоңон белмәйенсә күршеләргә йән-фарман сабып барып инмәгәнмен!

Ә бына һайыҫҡандың "өйөнә" барҙым. Шыҡырыҡлауына самалап барыбер таптым мин унын ояһын. Үҙен генә тотоп булманы. Минең әрләгәндә эргәләге ағас ботағында тыныс ҡына тыңлап ултырҙы. Ә унын ояһында ебеп бөткән һабын киҫәктәре, ялтыр шешә ярыҡтары, хатта бер муйынсаҡ һәм тараҡ бар ине".

Бына ошондайыраҡ ул һайыҫҡан. Ярай, мәйтәм, урлашһа - урлашһын, насар бейеүсе булғанына ла күҙ йоморға була. Шуныһы мөһим, һайыҫҡан бары тик беҙгә яҡшы хәбәрҙәр генә еткереп торһон!

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*✓ Беҙҙең яҡта Башҡортостандың башҡа райондарында булмаған үҙенсәлекле бер һуғыу ысулы - күп көрәлә туҡыусылыҡ һаҡланып ҡалған. Балаҫ һәм таҫтамалдарҙы ике көрәлә генә һуғалар, ә был 4 көрәлә һәм 4 аяҡлы була.*



ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

**Иҫке йылдың һуңғы көндәрендә бөтә республиканан һәм Рәсәй төбәктәренән иң оҫта һөнәрселәр баш ҡалабыҙға "Уфа-Ладья. Арт. Ремесла. Сувениры" халыҡ-ара күргәҙмәһенә йыйылғайны. Унда күңеленә яҡҡан шөғөлөнән йәм табып йәшәгән замандаштарыбыҙҙың береһе, Архангел районы Орловка ауылынан Фәнисә Сәйфетдинова менән танышып һөйләшеү форсаты тейҙе.**

# ОНОТОЛҒАНДЫ ТЕРГЕҘӘБЕҘ

- 2006 йылда үҙебеҙҙең ауыл клубына экспонаттар йыйғанда боронғо бер туҡыу станогына тап булдыҡ. Мәҙәниәт йорто мөдире менән ошо станокта эшләй белгән кеше эҙләй башланыҡ. Үҙебеҙҙең ауылда туҡыу-һуғыу эшен белеүсе табылмағас, күрше Ҡыҙыл Еҙем ауылында йәшәгән 82 йәшлек Мария Антипинаға мөрәжәғәт иттек. Уны 3 көнгә ауылға алып ҡайтып, табылдыҡ станокты ҡорорға өйрәнеп, эш айышына төшөнөп алдыҡ. Хәҙер беҙҙең биҙәү-ҡулланма сәнғәте халыҡ клубында 11-ләп кеше йөрөй, 2010 йылдан алып туҡыусылыҡ буйынса 4 республика семинары үткәрҙек, ауылдағы оҫталар араһында конкурстар, фестивалдәр ойоштороп торабыҙ. Ә һаҡланып ҡалған боронғо станоктарҙы музейға ҡуйып, үҙебеҙ яңыларын эшләп алдыҡ.

Осраҡлы ғына табылған туҡыу станогы тотош ғиләбеҙ менән яратып шөғөлләнер һөнәргә йәлеп итер тип кем уйлаған. Тәүҙә үҙем генә тотоноп киткәйнем, йылап ирем дә был эшкә ылығып китте: башта станоктар эшләп бирһә, хәҙер үҙе лә келәмдәр һуға. Беҙҙең яҡта Башҡортостандың башҡа райондарында булмаған үҙенсәлекле бер һуғыу ысулы - күп көрәлә туҡыусылыҡ (многоремизное ткачество) һаҡланып ҡалған. Иғтибар итһәгеҙ, балаҫ һәм таҫтамалдарҙы ике көрәлә генә һуғалар, ә был 4 көрәлә һәм 4 аяҡлы була. Кейеҙҙәрҙе генә түгел, сүпләү-хисаплау ысулы менән таҫтамалдарҙы ла шулай һуҡҡандар. Был ҡатмарлы ысулдар менән берәр генә таҫтамал һуҡҡайным, 26 ноябрь БР Милли музейында ойошторолған күргәҙмәгә венгрҙар килеп, өләсәйемдең ошондай таҫтамалдары бар ине, тип һатып алып киттеләр. Тамырҙары беҙҙең яҡтарҙан булыуҙарын да телгә алғайнылар улар. Шуға әле күрһәтергә таҫтамал өлгөләрем юҡ, ғөмүмән, беҙҙә таҫтамал һуғыусылар һирәк хәҙер, шаршау һуҡҡан кеше бөтөнләй юҡ. Бына шулай, үҙ ваҡытында ошо шәп кәсепте һаҡлап ҡала алыуыбыҙға бик шатбыҙ. Әммә шуныһы үкенесле: мин тыуып үҫкән Заһит ауылында ла туҡылған таҫтамал, аҫалы балаҫтар һаҡланмаған, сөнки, әсәйем әйтеүенсә, оло йәштәге ҡарт өләсәйемдең киндерҙән һуҡҡан таҫтамалдары, шаршауҙары һуғыш ваҡытында аҙыҡҡа алмаштырып бөтөлгән булған. Шуға нәҡ беҙҙең төбәккә хас биҙәк үҙенсәлектәрен белеп бөтмәйем, эҙләп тапҡан әйбер үрнәктәренә генә ҡарап эшләйем...



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быуындар бәйләнеше өҙөлә тип борсолғанда, бер әмәле табылып, ата-бабаларыбыҙҙың белемдәре киләсәккә барып етеренә ышанырға кәрәк. Быға миҫал: эргә-тирәләге ауылдарҙы ҡалдырмай эҙләп, туҡыусылыҡты тергеҙеп һәм сифатлы келәм, таҫтамал, билбау, сумка, аҫалы балаҫтарына күңел йылыһын һалып эшләгән алтын ҡуллы Фәнисә Сәйфетдинова.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# КЕШЕГӘ ЯМАНЛЫҠ ТЕЛӘГӘНСЕ,

## үҙеңә яҡшылыҡ телә

Күптән түгел элек бер аҙ ваҡыт күрше йәшәгән танышымды осраттым. Тәүҙә танымай торҙом уны, үҙе өндәшмәһә, билләһи, үтеп тә китер инем. Көләс йөҙө һүрелгән, ирендәре ҡымтылған, хатта буйсан кәүҙәһе бәләкәсәйеп, бөкөрәйеп тә ҡалған һымаҡ. Һөйләшеүендә элеккесә төртмә теллелек, кинәйә лә юҡ, шаян көләмәстәре лә онотолған. Күҙендә мин яраткан осҡон-нур күренмәй. Күптән түгел ире менән айырылышыуы тураһында ишеткәйнем инде. Шуға ла күңел яраһына тоҙ һибеп, хәлен һорашырға ҡыйманым.

- Ни эшләп ни өсөн айырылышыуыбыҙ тураһында һорамайһың? - тип үҙе һүҙ башланы ул. - Икенсе ҡатынға сығып китте бит. Ике йыл элек һулға йөрөй башлағанын һиҙгәйнем инде. Минән генә түгел, балаларҙан, туғандарҙан да оялманы. Аҙналап ҡайтмағанын аҡлап, бөтә өйөпте миңә ауҙарҙы. Ҡоторор-ҡоторор ҙа урынына ултырыр тип, ғәйепләүенә генә түҙер ҙә инем. Тик унын, утыҙ йылдан артыҡ юҡ-бар хәбәрең, ғәйбәтен, көнләшеүең менән ҡолаҡ итемде ашаны, тип әйтеүе зитыма тейҙе. Бөтәһен дә аптыратып, барҙым да айырылышыуға ғариза бирҙем...

Уңған, бөтә эшкә етеҙ, оҫта ҡуллы был танышымдың бер кире яғы була торғайны: ни эшләптер, үҙен ҡарап, биҙәнептөҙәнеп, ҡупшы итеп кейенгән ҡатын-ҡыҙҙың мотлаҡ һөйәре йәки, ир кеше булһа, һөйәркәһе бар, тип уйлай ине. Уйлай ғына ла түгел, ундайҙар тураһында төрлө имеш-мимеш таратты. Хағын да, нахағын да ҡурҡмай һөйләне. Шул зәһәр теле арҡаһында ни тиклем эшкә һәләтле булһа ла, эшләгән урынында оҙаҡ тотҡарланманы. Ғәҙәттә, ялҡауыраҡ, һәлкәүерәк, эшен минән киткәнсе - эйәһенә еткәнсе тип эшләгәндәрҙән коллективта тиҙерәк ҡотолорға тырышалар, ә танышым яман теле менән һәйманы шикелле: йә хеҙмәткәрҙәре эштән китергә мәжбүрләнә, йә оло ғауға менән үҙе китте.

Танышыма берәй ҡатын-ҡыҙҙы йәки ир-егетте маҡтап һүҙ һөйләнһәң, ул йәш саҡта бик йөрөмтәл булды, ул фәләнфәлән менән оҙаҡ йылдар йөрөнө, тип әллә ҡасан булғанмы-булмағанмы ваҡиғаны тәфсирләп, сағыу төҫтәргә буяп һөйләргә ярата. Айырылышҡан йәки тол ҡалған ҡатындарҙы бөтөнләй кешегә һанаманы. Иркен тормошта йәшәйҙәр, кешенең ирен аҙҙыралар, йәнәһе. Йыш ҡына уйҙырма һөйләгәненә шаһит булырға ла тура килгеләне.

Бына әле лә уның әлеге хәбәре, иренең икенсе ҡатын менән йәшәй тип әйтеүе дөрөҫ түгел ине. Ире ҡартайып, ҡәрҙәре бөткән атаһы һәм әсәһе менән бергә йәшәй икәнен бөтәһе лә белә.

Ә шулай ҙа ҡасандыр байтаҡ кешенең яраһына тоҙ һалған, бик күптәрҙе нахаҡҡа рәнйеткән, яла яҡҡан танышым йәл булып китте.

- Ярай, айырым йәшәп, һағынышып ҡауышырһығыҙ әле. Балаларығыҙҙы башлы-күҙле итәһе лә бар, - тим, уның төшөнкө күңелен саҡ ҡына күтәрергә теләп. Тегенең күңеле йомшарҙы, ахры:

- Яңғыҙыңа бигерәк ауыр икән шул, - тине саҡ ҡына ишетерлек итеп.

...Кешегә яманлыҡ теләгәнсе, үҙеңә яҡшылыҡ телә, тигән аҡылды быға тиклем белмәнә, танышым хәҙер үҙ тормош тәжрибәһендә аңлағандыр, тип уйлайым.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 3-сө идея: "Ғәйебеңде танырға кәрәк"

Күп йылдар элек Неаполдең вице-короле герцог Ассунский Испанияға, Барселона ҡалаһына визит менән килә. Шунда герцог гавандә торған галераның бортына күтәрелеп, ишкәксе тотҡондарҙы урап сыға, һәр береһенән ниндәй енәйәт ҡылыуҙары хаҡында һораша һәм уларҙың фажиғәле тарихтарын тыңлай.

Бер кеше судьяның уның дошмандарынан ришүәт алып, ғәҙел булмаған хөкөм сығарыуы сәбәпле бында килеп юлығыуы тураһында һөйләй. Икенсеһе һөйләүенсә, уның дошмандары шаһитҡа аҡса түләгән һәм тегенеһе судта уға ҡаршы ялған күрһәтмә биргән. Өсөнсөһөн, ғәҙел хөкөмдән ҡасып, иң яҡшы дуҫы һатҡан. Ахыр килеп, герцог үҙ ғәйебен таныған кешене тыңлай: "Әфәндем, мин бында үҙ гонаһтарым өсөн килеп эләктем. Күп аҡсам булыуын теләнем дә көшөләк урланым. Бында кисерергә тура килгәндәргә мин лайыҡмын".

Герцог аптырап ҡала. Ул галера капитанына борола ла: "Был кешеләрҙең бөтәһе лә ғәйепһеҙ һәм бында ғәҙел булмаған хөкөм сығарыу арҡаһында ғына килеп эләккәндәр, ләкин улар араһында бер енәйәтсе бар. Боҙоҡлого менән башҡаларҙы зарарламаһын өсөн, әйҙә, уны ҡотҡарайыҡ", - ти. Шулай итеп, үҙ ғәйебен таныған кеше иреккә сығарыла һәм аҡлана, ә үҙҙәрен аҡлаусылар галерала ҡала.

Был ысынлап та булған һәм тормошта йыш осраған хәлде аныҡ сағылдырыуы менән ҡыҙыҡлы. Беҙ яңылышҡан саҡтарыбыҙҙа хатабыҙҙы таныу урынына ғүмер буйы үҙебеҙҙе аҡлайбыҙ. "Мин тормошом менән үҙем идара итәм. Үҙ уйҙарыма үҙем генә хужамын, һәм ошо мәлдәге ысынбарлығымды үҙем шулай тыуҙырғанмын", тиер урынға башҡаларҙы ғәйепләйбеҙ, шарттарҙы ғәйепләйбеҙ. Ошо Хәҡиҡәтте аңлаһаҡ, беҙ был ғүмерҙең галера ҡоллоғонан ҡотолорбоҙ һәм үҙ тормошобоҙ менән йәшәй алырбыҙ.

Үҙ ғүмереңә әйләнеп күҙ һал. Хаталарыңа ҡарамаҫтан, үҙеңде кисерергә һәм яратырға өйрән. Үҙ яңылышлыҡтарыңды ҡабул ит. Шул саҡта һин нисек йәшәргә тейешһең, шулай - бәхетле, тыныс, сәләмәт булып йәшәү мөмкинлеге алырһың. Бөтә нәмә үткәнен, бөгөнгөң һәм киләсәгең өсөн үҙеңә яуаплылыҡ алыуҙан башлана.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 13 ЯНВАРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 "Сегодня вечером". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
17.00 Время покажет. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Про Веру". [16+]
23.30 Новогодняя ночь на Первом. [16+]
3.05 Про любовь. [16+]
3.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.00 Новогодний Голубой огонёк-2020.
4.05 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Земля обетованная от Иосифа Сталина". [16+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 "Ради добра". [6+]**
**18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**21.15 "Полезные новости". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 "Күстәнәс". [12+]**
**0.00 Х/ф "Дневной свет". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Незваный гость". [12+]**
**5.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.15 "Орнамент". [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

## 14 ЯНВАРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.35 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Про Веру". [16+]
23.25 Д/ф Премьера. "Антарктида. Хождение за три полюса". [12+]
4.10 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.00 "Аншлаг. Старый Новый год". [16+]
3.30 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Земля обетованная от Иосифа Сталина". [16+]**
**11.15 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.00, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45 "Интервью". [12+]**
**15.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.20 Хоккей. КХЛ. "Барыс" (Нур-Султан) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 Х/ф "Бабич". [12+]**
**0.45 Х/ф "Корнуэль". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

## 15 ЯНВАРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.10 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 15.00, 1.35, 3.05 Время покажет. [16+]
13.30 Новости (с субтитрами).
14.00 Ежегодное послание Президента РФ Владимира Путина Федеральному Собранию.
17.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Про Веру". [16+]
23.25 Д/ф Премьера. "Антарктида. Хождение за три полюса". [12+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
10.55 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
11.50, 15.00 "60 минут". [12+]
13.00, 20.00 Вести.
14.00 Ежегодное послание Президента РФ Владимира Путина Федеральному Собранию.
16.00, 17.25 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Земля обетованная от Иосифа Сталина". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Полезные новости". [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00, 6.00 "Историческая среда". [12+]**
**23.00 Творческий вечер народного поэта РБ Гульфии Юнусовой. [12+]**
**0.00 Х/ф "Сделка с Адель". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]**
**4.45 Автограф. [12+]**
**5.15 "Орнамент". [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**

## 16 ЯНВАРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.30, 3.05 Время покажет. [16+]
14.10 Давай поженимся! [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.25 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Про Веру". [16+]
23.25 Д/ф Премьера. "Антарктида. Хождение за три полюса". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Крепостная". [12+]
0.00 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
3.30 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Земля обетованная от Иосифа Сталина". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30, 5.15 "Земляки". [12+]**
**14.45 "Ради добра". [6+]**
**15.00, 17.45 "Интервью". [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**23.00 Творческий вечер народного поэта РБ Гульфии Юнусовой. [12+]**
**0.00 Х/ф "Уильям и Кейт". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Девушка с веснушками". [12+]**
**4.45 "Бай". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

## 17 ЯНВАРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Эээх, Разгуляй!" [16+]
23.45 Д/ф "Джон и Йоко: "Выше нас только небо". [16+]
1.35 Х/ф "Побеждай!" [16+]
3.35 Про любовь. [16+]
4.20 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.20 "Сто причин для смеха". К 75-летию Семёна Альтова.
23.50 Х/ф "А снег кружит..." [12+]
3.30 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Д/ф "Илья Глазунов. Роковая коллекция". [12+]**
**10.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00, 4.15 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Уфа. Живое". [12+]**
**0.15, 4.45 Х/ф "За пропастью во ржи". [16+]**
**2.30 Спектакль "Пылкие любовники". [12+]**

## 18 ЯНВАРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/с "Теория заговора". [16+]
11.15, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Т/с Премьера. "Практика". Новый сезон. [12+]
15.50 Повтори! [16+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.35, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Т/с Премьера. "Война миров". [16+]
0.45 Х/ф "Цвет денег". [16+]
3.00 Про любовь. [16+]
3.45 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота. [12+]
8.35 "По секрету всему свету".
9.30 "Пятеро на одного".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
13.40 Х/ф "Поздние цветы". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Сильная ты". [12+]
1.00 Х/ф "Не жалею, не зову, не плачу". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград.net. [6+]**
**10.30 Сыйырсыҡ. [0+]**
**10.45 "Тамыр селтәре". [6+]**
**11.15 Байтус. [6+]**
**11.30 "Асылташ". [6+]**
**12.00 "Күстәнәс". [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.15 "Земляки". [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 "Полезные новости". [12+]**
**20.15 "Ради добра". [6+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 0.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 Х/ф "Люмьеры". [6+]**
**1.30 Спектакль "Кьоджинские перепалки". [12+]**
**3.45 Творческий вечер народного поэта РБ Гульфии Юнусовой. [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 Д/ф "Илья Глазунов. Роковая коллекция". [12+]**

## 19 ЯНВАРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15, 6.10 Х/ф "Огонь, вода и... медные трубы". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Наедине со всеми. [16+]
14.55 Д/ф Премьера. "Максим Дунаевский. "Любовь нечаянно нагрянет..." [12+]
16.00 "ДОстояние РЕспублики".
16.50 Точь-в-точь. [16+]
19.25, 21.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Встреча выпускников. [16+]
21.00 Время.
23.00 Т/с Премьера. "Война миров". [16+]
0.45 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Мужчины. 15 км. Гонка преследования. Трансляция из Чехии. [0+]
1.35 Х/ф "Жюстин". [16+]
3.50 Про любовь. [16+]

### РОССИЯ 1

5.55 Х/ф "Семейное счастье". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.45 Т/с "Любить нельзя ненавидеть". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 "Действующие лица с Наилей Аскер-заде". [12+]
1.30 Х/ф "Небо измеряется милями". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15, 2.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 АйТеkә! [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 Башкорттар. [6+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 3.00 "Историческая среда". [12+]**
**16.45 "Аида на оперу!" [12+]**
**19.00 "Полезные новости". [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30, 4.30 Х/ф "Мадам Нобель". [16+]**
**1.00 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**3.30 Творческий вечер народного поэта РБ Гульфии Юнусовой. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАБИЧТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 125 йыл




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**1-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кәримов. Табаҡ. Сабитов. Трюм. Аласыҡ. Ғарҡ. Сорт. Асы. Ҡайнар. Аҙбар. Автор. Аждаһа. Хамматов. Аймаҡ. Роза. Әҫәр. Саян. Файл. Ғәли. Троя.

**Вертикаль буйынса:** Исхаҡова. Туғыҙбаева. Рәхим. Смаҡов. Аҡсуға. АКМ. Рәт. Бакиров. Кәнфит. Турта. Тирҫ. Ваҡ. Валсыҡ. Австралия. Йәдкәр. Сатин. Ҡамыр. Алҡа.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (18) дүшәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |
| 14 (19) шишәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:45 | 17:15 | 18:45 |
| 15 (20) шаршамбы | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:47 | 17:17 | 18:47 |
| 16 (21) кесе йома | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 17 (22) йома | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 18 (23) шәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:52 | 17:22 | 18:52 |
| 19 (24) йәкшәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

**Рәсәйҙә һәр өсөнсө кеше үҙенең асығауыҙлығы арҡаһында төрлө мутлашыусыларҙан зыян күрә. Хәҙер кеҫә телефондары барлыҡҡа килгәс, ундайҙарҙың һаны тағы ла артты.**

Мутлашыусылар, ғәҙәттә, шәхси мәғлүмәт алырға тырыша. Шылтыратыусылар, нигеҙҙә, банк картаһының мәғлүмәттәренә һунар итә. Улар төрлө психологик алымдар ҡуллана, үҙҙәрен банк хеҙмәткәре тип таныта һәм картанан аҡса урларға тырышыуҙары тураһында хәбәр итеп, кешеләрҙе хафаға һала. Тиҙ ышаныусандар булған ғына аҡсаһын һаҡлап ҡалырға тырышып, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән шәхси мәғлүмәттәрен, карта кодтарын әйтеп бирә. Һәҙәмтәлә үҙҙәре уҡ муттарға аҡсаға юл аса. Шуға күрә, кем генә, ниндәй генә хеҙмәттән тип шылтыратһалар ҙа, пластик карталарығыҙҙың кодын, шәхси мәғлүмәтләрегеҙҙе бер кемгә лә әйтмәгеҙ. Был мәғлүмәт конфиденциаль һәм уны бары тик бер генә кеше - үҙегеҙ генә белергә тейешһегеҙ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 ғинуар "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+
**16 ғинуар "Һөйәркә"** (Т. Миннуллин), драма. 12+
**17 ғинуар "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия. 12+
**18 ғинуар "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+
**19 ғинуар "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 ғинуар "Сундучок Деда Мороза"** (Д. Голубецкий), Яңы йыл әкиәте. 12.00 0+
**19 ғинуар "Щелкунчик"** (Нина Соболева, Э.Т.А. Гофман әкиәте буйынса), музыкаль әкиәт. 12.00 0+
**"Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. 18.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**11 ғинуар "Буратино"** (А. Толстой). 12.00, 14.00 0+
**12 ғинуар "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 12.00, 14.00 0+
**18-19 ғинуар "Алиса в стране чудес"** (С. Чураева). 12.00, 14.00 6+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ғинуар "Үткәндәрҙе һағынып..."** 50-90-сы йылдар хиттары 18.00 6+
**15 ғинуар "STEINWAY" роялен презентациялау"** (Н. Луганский) 6+
**19 ғинуар "Weekend с органом"** бөтә ғаилә өсөн йәкшәмбе концерты 15.00 6+

ИҒТИБАР!

# ҮЛЕМ МЕНӘН САУҘА ИТӘЛӘР!

Рәсәй Федерацияһының Енәйәт кодексында наркотиктар һәм психотроп матдәләр һатҡан өсөн яуаплылыҡ билдәләнеүгә һәм бөләкәй генә күләмде һатыу ҙа енәйәтселек тип танылыуға, был өсөн хатта иректән мәхрүм итеүҙәренә ҡарамаҫтан, уны таратыусылар ниндәй генә аҙымдарға бармай. Был хатта балалар уйынына ла оҡшап китә: енәйәтселәр наркотик матдәләрҙе йәшерен урындарға ҡалдыра ла, наркокурьерҙарға мессенджер аша адрес менән бергә үлем йәшерелгән урындың фотоһын ебәрә. Бындай криминал юл менән, ғәҙәттә, студенттар, хатта уҡыусылар үҙҙәренә аҡса эшләргә тырыша, сөнки уларҙы еңел һәм тиҙ аҡса эшләү ысулы менән ҡыҙыҡтыралар.

**Наркотик матдәләрҙе ситтә түгел, хатта подъездарҙа һәм подвалдарҙа йәшерәләр. Әгәр һеҙ йәшерен урынды йәки наркотиктар йәшереү шаһиты булһағыҙ, шунда уҡ хоҡуҡ һаҡлау органдарына:**

- Өфө ҡалаһы буйынса Рәсәй Эске эштәр министрлығы идаралығының 6-сы полиция бүлеге **+7 (347) 279-53-42**;
- Өфө ҡалаһы буйынса Рәсәй Эске эштәр министрлығы идаралығының 8-се полиция бүлеге **+7 (347) 236-78-66** йәки күп каналлы **112 номерына шылтыратығыҙ.**

Оператив-тикшереү төркөмө килгәнгә тиклем йәшерелгән әйберҙәргә ҡағылмағыҙ, шулай уҡ ихатағыҙҙа йәки подъезығыҙҙа күренгән шикле кешеләрҙең билдәләрен хәтерегеҙҙә ҡалдырырға тырышығыҙ.

✓ *Өйләнгән кешене Адриатик диңгеҙ менән никахҡа ингәндәй итеп тоям: ул әле кәләш итеп алған ҡатын-ҡыҙҙа ыңйы ла, башҡа байлыҡтар ҙа, ҡот осҡос йәнлек тә, еңелмәҫ дауылдар ҙа тупланыуын белмәй. (Генрих Гейне).*



*ЗАУЫҠ*

*Наилә ХӘМБӘЛИЕВА*

# ҮҘЕБЕҘГӘ ҺЫУ БӨРКМӘҺӘК,

## Килеп беҙҙе кем яҡлар?..



### Алтын ҡаҙаҡ

...Алтын ғына ҡаҙаҡ ҡағыр еребеҙ бар,
Еребеҙҙе йәннәт иткән серебеҙ бар,
Изге ниәт, аҡ күңелдән килгәндәрҙе
Саф күңелдән ҡаршылаған түребеҙ бар.

Һүҙебеҙҙе бөйөк иткән телебеҙ бар,
Һыуһылыуҙар төйәк иткән күлебеҙ бар.
Нисә быуат ят ҡандарҙан өр(ө)кмәгән,
Баҫҡынсыға бирелмәгән билебеҙ бар.

Унау ятһа, уяу булған беребеҙ бар,
Еребеҙгә еректергән бүребеҙ бар,
Ҡырағайҙар түгелбеҙ ҙә: туплап алып,
Фарман биреп ултырырға түрәбеҙ бар.

Һап-һау ғына булмай инде - сиребеҙ бар:
Һәр гәмәлгә аяҡ салған киребеҙ бар.
Арҡырыны тура юлға баҫтырырлыҡ,
Йөрәктәрҙә ( юҡ тимәгеҙ!) кәребеҙ бар.

Башҡортом, тип һайлап алған йәребеҙ бар,
Маңҡортланмай ишәйерлек сарабыҙ бар.
Эй, ҡатындар! Әлдә генә кендек ҡырҡып,
Уландарға ғүмер биргән ярабыҙ бар.

Алыҫ йәшәп яҡын булған меңебеҙ бар,
Нурға манып берләштергән динебеҙ бар.
Харам ейгән күп түгел ул. Шөкөр әле -
Хәләл сәсеп, хәләл урыр йүнебеҙ бар.

...Дүрт тарафтан ҙурырағы - бишенсе бар,
Унда киткән ҡайтмай тигән төшенсә бар...
Уйлай китһәң, уйҙар ҙа бар: кемгә кәрәк
Еребеҙҙе ҡанһыраткан төшөм, йөбөр?

Еребеҙҙә беҙҙән һуң да тормош булыр,
Килешелеп ғаиләләр ҡормош булыр,
Шул ояла яратыуҙан, һөйөшөүҙән
Уландар ҙа, ҡыҙыҡайҙар тыумыш булыр.

Шул балалар барып күрер буш яланды,
Бер аҡһаҡал уға әйтер: "Буш ялындым...
Ошо ерҙә мөгжизәле бер тау ине.
Һинең атаң һуйып һатты...
Таш-тау һынды.

Тау һынғанда, атаң торҙо сәпәкәйләп,
Әпкәләйгә табын ҡорҙо әпәк-сәйләп.
Еребеҙҙе яратайыҡ, яҡлайыҡ тип,
Күҙ ҙә йоммай, матур торҙо, хәбәр һөйләп.

Ана теге яҡта ҡара урман ине...
Һинең бабаң:
"Ҡырҡығыҙ!" - тип фарман элде.
Һаҙлыҡ хәҙер. Бер сәсәк юҡ. Тереклек юҡ.
Ул яҡтарға мин икенсе бармам инде...

Һаҙлыҡта ла йәшәйҙәр ти - башҡорт түгел.
Кешеләре теремек ти, йәш, ҡарт түгел.
Барҙынинһәң, иң тәүәлә һаҡ тулә,
Һин аҫаба иканлегең һис шарт түгел.

Аҫабалар араһынан борсолғандар,
Булды "Ҡырҡма, тунама!" тип яр һалғандар.
Ишетмәмеш-күрмәмештәр байтаҡ ине -
Киҫелгәндәр, кителгәндәр, ярсылғандар".

...Тура юлдан барыуҙары ауыр була.
Ҡаршылыҡтар бик йыш һине быуыр була.
Көслөрәктәр:
"Һин кем әле? Юлдан төш!" - тип
Һеперткеһен мең яңыртып ҡыуыр була.

Тура юлдар таҡыр тиеп яңылышалар,
Тура юлда, гәҙәттә, бик аңдышалар...
Бәгзеләре оранына ҡанат ҡуймай.
Берәүҙәрҙә азат ниәт, аң тышала.

Тышалғандар ятып ҡала ярҙам көтөп.
Ярҙам килә ситтәгенән: "Аһ-аһ!" итеп.
"Күрәһеңме, һинекеләр һәйбәт түгел,
Ташланылар, ҡул һуҙмайҙар, онот!" - тиеп,
Хаҡ гәмәлде күрһәтәләр нахаҡ итеп.

Фетнәсенең иң яманы аҡ сүрәттә,
Күңеленән йылан да ул, һаҡ өйрәк тә,
Ах, күрмәйбеҙ, аңғармайбыҙ, шик-шөбһәнән
Ҡуҙғып ала арабыҙҙа бик һирәктәр.

Берҙәмлек юҡ - фетнәсенең бер шатлығы.
Икенсеһе - халҡыбыҙҙың берҡатлығы.
Шатлығының өсөнсөһө - үҙ тигәнең
Үҙенекен ситкә тибә. Бар һатлығы.

Шул өс нәмә бөттөниһә, могайын да,
Урман шаулар, тауҙар ҡалыр туғайында.
Бер аҡһаҡал уланына хәбәр һөйләр:
"Еребеҙҙең, илебеҙҙең мөгжизәһе -
Тау иңләгән ана теге бөркөтөндә,
Зәңгәр күктә һабан көткән турғайында..."

### Беҙ - башҡорт!

- Атай, минең һорауым бар.
- Әү, балам, әйт, тыңлайым.
- Минең телем бөтә тиеп
Әйтәләрсе көн һайын?..

- Юҡ, юҡ, балам, буш хәбәр ул!
Яман кеше хәбәре.
Тел бәхете күрмәгәнден
Үҙ-үҙенә йәбере.

- Ә Салауат кем ул, атай?
- Аһ, балам, матур һорау!
Быға яуап белеү була
Халҡыңа һөйөп ҡарау.

Салауат ул - батыр, балам,
Ҡанбабан, рухи бабаң.
Башҡорттарҙы әйҙәгән ул
Яҡты ҡиблаға табан.

- Әсәй, ҡашмау, яға нимә?
- Ҡыҙым, был кейем йәме.
Ғорур, ипле башҡорт ҡыҙын
Иман нурына күмә.

- Атай, әсәй, беҙ башҡортмо?
- Алтындарым, һеҙ - Башҡорт!
Бөйөк, азат илебеҙгә
һеҙ - ышаныс, һеҙ - йәш ҡот!

Беҙҙән һеҙгә, балаларым,
Бер фатиха, аманат -
Маңҡорт ҡаны ҡушылмаһа,
Илебеҙ булыр азат.

### Яҙылмаған ҡанундар бар

Яҙылмаған ҡанундар бар,
Улар халыҡ аңында.
Милләттәрҙең хәтерендә,
Дәүер, нәҫел ҡанында.

Улар ташҡа баҫылмаған,
Мисәт беркетелмәгән.
Аң-зиһендә өйрәлгән -
Бере-бер кителмәгән.

"Һәр нәмәнең - үҙ мәле бар",
Миҙгел етеүе кәрәк.
Әҙәмдәрҙең, емештәрҙең
Алдан сапмай, шул миҙгелде
Сабыр көтөүе кәрәк.

"Теше алышынмағандың
Тешәр сағы үтмәһә",
Балаларын бөгзе атай
Һай, уҙаман итмәһен.

"Һаҡалыны һыпырғанды"
Тыңлай бел дә, аңлай бел.
Олоно оло итмәгән
Һис бер ерҙә уңмай - бел.

"Теле барҙың иле лә бар",
Илдә әсәй нуры бар.
Сит илдәрҙең әҙәменә
Әсәң нуры - барыбер.

Үкһеҙ етемлек - фажиға,
Күрәсәктер, яҙмыштыр.
Илһеҙ етемдәр ишәйҙе...
Риза булып кәрәк тотоп
Телгә сокор ҡаҙғастар...

"Ирмен тигән ир-батырҙар
Шып-шым ҡарап тормаһа",
Кеше ашар дейеүҙәрҙең
Башын әҙәп ормаһа,

"Күҙ йәшергән ҙур үлемгә"
Тере һыуҙы бөркмәһә,
Рухи ҡоллоҡ афәтенән
Ҡара яуҙай өркмәһә -

Беҙ булырбыҙмы үлемһеҙ?
Илле, телле, Ватанлы?
Ете быуындың етеһе
Таҙа түлле, саф, данлы?

Ҡалырбыҙмы ғорур, сәмле,
Йәмле, йәнле, айыҡтар?
Минең тупраҡ тиеп, кирә
Баҫыр микән аяҡтар?
...Үҙебеҙгә һыу бөркмәһәк,
Килеп беҙҙе кем яҡлар?..

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИКЕ ЙӨҘЛӨЛӨК КЕНӘ...

## ярлыҡанмай торған гонаһ

Күңел - ҡурҡаҡ, ҡул - батыр: эшләһәң, эш ҡарышмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ алға барырға тейешбеҙ: яҙмышҡа ҡаршы тороу өсөн түгел - бынының мөмкин булмаған хәл, ә яҙмыштың ҡаршыһына табан барыу өсөн.

**(Фридрих Геббель).**

Өйләнгән кешене Адриатик диңгеҙ менән никахҡа ингәндәй итеп тоям: ул әле кәләш итеп алған ҡатын-ҡыҙҙа ыңйы ла, башҡа байлыҡтар ҙа, ҡот осҡос йәнлек тә, еңелмәҫ дауылдар ҙа тупланыуын белмәй.

**(Генрих Гейне).**

Башҡа кешегә оҡшау сәнғәте бик ябай: уға үҙең тураһында бөтөнләй һөйләмә һәм әҙләкһеҙ уны маҡта, ҡыҙыҡһынып һорауҙар бир.

**(Гонкур).**

Ҡатын-ҡыҙҙар тураһында насар һөйләгән ир, гәҙәттә, бер генә ҡатын-ҡыҙы күҙ уңында тота.

**(Реми де Гурмон).**

Ярлыҡанмай торған берҙән-бер гонаһ - ул ике йөҙлөлөк. Сөнки ике йөҙлө кешенең тәүбә итеүе - үҙе ике йөҙлөлөк ул.

**(Уильям Гэзлитт).**

Үлемгә уңайлыраҡ һәм ныҡлыраҡ әҙерләнеү кәрәк, шуға ла ул ғүмерҙең иң аҙағына ҡуйылған...

**(Козьма Прутков).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡараңғы төндә юл буйлап китеп барған бер суфый яҡындағы ҡоҙоҡтан ярҙам һорап ҡысҡырған кешенең тауышын ишетә. "Әй, ни булды?" - тип һорай суфый ҡоҙоҡ эргәһенә яҡын килеп. "Мин - тел белгесе. Мин ҡараңғыла юл тапмай йөрөп, ошо ҡоҙоҡҡа килеп төштөм", - тигән тауыш ишетелә аҫтан. "Түҙеп тор инде, дуҫ кеше, мин хәҙер, баҫҡыс менән бау ғына табып алып киләйем дә..." - ти суфый. "Бер генә минут тороп тороғоҙ әле, - тигән тауыш ишетелә тағы ҡоҙоҡтан. - Һеҙ дөрөҫ һөйләшмәйһегеҙ. Һеҙ һүҙҙәрҙе бөтөнләй дөрөҫ әйтмәйһегеҙ". "Ярай, улайһа. Әгәр ҙә һеҙҙең өсөн һүҙ уның мәғәнәһенән мөһимерәк икән, мин ул һүҙҙе дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнгәнсе, ҡоҙоҡта ултырып тороғоҙ", - ти суфый һәм үҙ юлы менән китеп бара..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир 253-25-44**
**Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24**
**Матбуғат таратыу 246-03-23**

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 10 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3707
Заказ - 17/01